✓ "Бер саҡ Аркадий Гайдарҙан хәрби дуҫтары былай тип һорай икән: "Һеҙ үлемгә нисек ҡарайһығыҙ?" "Кире ҡарайым", - тип яуап биргән Гайдар. "Ни өсөн, улай булғас, пуля аҫтына аяуһыҙ ташланаһығыҙ?". "Йәшәү өсөн", - тип яуап биргән Гайдар".

1 МАЙ

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №18 (384)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Көрәшселәр әүҙемләшә...**

һабантуйҙа ғына түгел, ҙур спортта



4

**Милләттең рух сағылышы,**

йәки Башҡорт матбуғаты үҙ бурысын нисек үтәй?



8-9


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙең йәшәйешебеҙҙә намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһенә урын бармы?

*Байгилде ЯНБУЛАТОВ, хаҡлы ялда:*

Әгәр хеҙмәтеңдән күберәк табыш алыу тураһында ғына хыялланаһың икән, был осраҡта намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһе самалы була. Сөнки һәр кешенең нәфсеһе, шәхси ихтыяждары бар, кемдер үҙенең был тойғоларын йүгәнләп тота ала, ә кемдер шайтан ҡотҡоһонан ысҡына алмай. Мәҫәлән, уҡытыусылар иңенә балаға белем биреү, киләсәк быуынды тәрбиәләү кеүек ҙур бурыс һалынған. Шундай ҙур яуаплылыҡты үҙ иңендә тойған уҡытыусының намыҫһыҙ хеҙмәт итеүе мөмкинме? Әгәр ул үҙ бурысын намыҫлы үтәмәһә, был бөйөк исемде йөрөтөргә хаҡы ла юҡ. Мин дә өс йыл тирәһе мәктәптә уҡытыусы булып эшләнем. Күҙеңә ҡарап, нindәй һүҙ әйтер икән, тип көткән саф күңелле балаларҙы тәрбиәләгәндә, намыҫыңдың таҙа булыуы - беренсе шарт. Эшеңде намыҫлы башҡарған осраҡта ғына, һин балаларҙы ярата, улар менән уртаҡ тел таба алаһың.

*Фәүзиә БАРШУАТОВА, Ҡырғыҙ-Миәкә район мәҙәниәт һарайы хеҙмәткәре:*

Намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһен үткән заманға ғына ҡайтарып ҡалдыралар. Был дөрөҫ түгел. Элек хеҙмәт алдынғыларын өлгө итеп күрһәтеү көслө ине. Ә хәҙер матбуғат баҫмалары намыҫлы хеҙмәт итеүселәргә ҡарағанда, күберәк "йондоҙҙар"ҙы яҡтыртыуҙы өҫтөн күрә. Шул уҡ ваҡытта был "йондоҙҙар"ҙың барыһы ла хеҙмәтен намыҫлы башҡара, тип әйтеүе ҡыйын. Ундайҙары бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шуға күрә киң мәғлүмәт саралары үҙ эштәрен намыҫлы башҡарған кешеләрҙе күберәк яҡтыртһа, йәштәребеҙ лайыҡлы-лайыҡһыҙ "йондоҙҙар"ҙан түгел, ә ысын мәғәнәһендә лайыҡлы хеҙмәт геройҙарынан өлгө алыр ине.

*Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА, уҡытыусы:*

Намыҫлы хеҙмәт - сүл эсендәге бәләкәй генә оазис кеүек булһа ла, йәшәйешебеҙҙә бөтөнләй юйылып бөтмәгән. Миҫалға яҙыусыбыҙ Рәшит Шәкүрҙе килтерер инем. Уны беҙ студенттары аша ишетеп беләбеҙ. Ул халҡыбыҙ өсөн бик күп файҙалы китаптар яҙҙы, үҙ эшен намыҫлы башҡара, иле, халҡы өсөн янып-көйә. Билдәле шәхестәребеҙ араһында сит ерҙәрҙә "ожмах" вәғәҙә ителгән осраҡта ла, үҙ илендә ҡалыуҙы хуп күргән, тыуған иленә намыҫлы хеҙмәт иткән кешеләр бар. Шуны нисек батырлыҡ, намыҫлы хеҙмәт, тип атамаҫҡа мөмкин? Тормошобоҙҙа хәләл, харам тигән төшөнсәләр ҙә бар бит әле. Хисап көнөндә намыҫһыҙ хеҙмәт итеүселәр яҙаһын, ә намыҫлы хеҙмәт итеүселәр тейешле әжерен аласаҡ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

*Рауил БИКБАЕВ*

**"Инде күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ!"**
**(Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Ҡатау заводы эшселәренә яҙған хатынан, 1774 йыл, 10 сентябрь.)**

## "...КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘ УҪАЛЛЫҠ ЮҠ!"



**Ҡылысыбыҙ һәр саҡ ҡул осонда -
Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ.
Яҙмышыбыҙ булды ҡыл осонда -
Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ.**

**Ер, азатлыҡ өсөн, дуҫлыҡ өсөн
Һыуҙар ғына түгел, ҡандар кистек.
Юғалтманыҡ барыбер һиҙгерлекте,
Биҙҙерҙек беҙ
Үҙебеҙҙән ыбыр-сыбыр хисте.**

**Яҡты майҙан кеүек күңелебеҙҙе
Шом ҡапланы ҡай саҡ, шик кимерҙе.
Шик-шомдарҙы, им-томдарҙы тапап,
Яҡты майҙан кеүек күңелебеҙгә
Һабантуйҙай шатлыҡ бәреп керҙе.**

**Хәйләләрҙе зиһенебеҙ шәйләй,
Йөҙ йөҙлөктәр, мең битлектәр үтә.
Алда әле яңы киңлек көтә,
Алда яңы бейеклектәр көтә.**

**Күңелебеҙгә мәкер шыуышыр булһа,
Юлдар уға
Ҡылдан нәҙек, ҡылыстан да үткер.
Саф теләкле юлсы, ҡунаҡ булһы,
Йөрәгебеҙ асыҡ һинең алда -
Үт, кер!**

**Күмелегеҙ күңелебеҙ нурына,
Аҡ уйылар!
Киң донъяға һыймай ваҡ кешеләр,
Киң күңелгә һыймай ваҡ тойғолар.**

**Хәүеф-хафалар бар, бар һағыштар -
Уйыбыҙҙа яуыҙлыҡ юҡ.
Шатлыҡ уйнай, ҡанат ҡағып ҡоштай -
Уйыбыҙҙа яуыҙлыҡ юҡ.**

**Ваҡланмабыҙ юҡҡа!
Заманыбыҙ бөйөк,
Хистәребеҙ бөйөк.
Ҡайҙан инде беҙҙә урын ҡалһын
Ваҡ тойғоға -
Ҡара яуыҙлыҡҡа, уҫаллыҡҡа?**

Әхмәт Лотфуллин "Ауылда байрам. 1930 йылдар"

***✓ Ә беҙҙә быға тиклем нисек булды һуң? 9 майҙа барлыҡ һуғыш ветерандарын йыйырҙар ине лә, ҡулдарына эсенә араҡы һәм колбаса тултырылған пакет тотороп ҡайтарырҙар ине. Бына бит нисек...***

МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ

**"Киске Өфө" гәзитенең 15 -се һанында яҙыусы Зөһрә Бураҡаеваның "Географияны киңәйтәм, тип, идеологияны тарайтмайыҡсы әле..." тигән мәҡәләһе, бер яҡтан, ҡыуандырҙы, икенсе яҡтан, уйға ла һалды. Ҡыуаныуым шунан ғибәрәт: йәштәрҙең халыҡ яҙмышы, киләсәге тураһында тәрән уйланыуҙары һәм дөрөҫ йүнәлештә ҡыйыу фекерле булыуҙары. Афарин, бар икән йәштәребеҙ! Ә уйланыуым... Әлбиттә, мине генә уйландырмағандыр был мәҡәлә.**

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ҠОРОНДА...

## аҡһаҡалдар аҡылы өҫтөнлөк итһен, тип теләйем

Маҡсатлы, маҡсатының дөрөҫлөгөнә инанған йәштәребеҙ бар, шөкөр. Кеше ниндәйҙер маҡсат ҡуйыр алдынан ул маҡсатының дөрөҫлөгөнә үҙе инанырға тейеш. Артабан инде шул маҡсатын тормошҡа ашырыу өсөн бер нимәгә лә ҡарамай көрәшергә, юл ярырға, ҡаршылыҡтарҙы еңергә һәм тик алға ғына барырға тейеш... Ул юғарынан ҡушыуҙы ла көтмәй, аҡса түләмәүҙәренә лә, ваҡыты юҡлығына ла зарланмай, тик эшләй генә бирә. Беҙҙең йәшлегебеҙ ҙә шулай үтте. Беҙ, 1940-1980 йылдарҙағы уҡытыусылар, халҡыбыҙҙың яҡты киләсәген аң-белем таратыуҙа, мәғрифәтселек менән шөғөлләнеүҙә күрҙек. Шул йүнәлештә эшләнек тә эшләнек. Халыҡты, илде яратыу шул тиклем көслө булды, ҡайҙа инде кемдеңдер ҡотҡоһона бирелеп, сит-яҡтарға сығып китеү. Ә булдылар ундайҙар ҙа. Күпләп киттеләр беҙҙең заманда ла. Ташкент тип тә, Алма-Ата тип тә. Ҡарыуҙары ҡайтҡас, кире ҡайттылар. Алтын ғына көмөш сыҡҡан ерҙән тыуып ҡына үҫкән ил яҡшы, ти бит халыҡ.

Бөгөн иһә сит яҡтарға сығып китеү мөмкинлеге беҙҙең заман ише генәме ни? Бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ. Һәр кемгә юл асыҡ. Өҫтәүенә, туҡтауһыҙ сит ил тормошон маҡтау, илебеҙҙең етешһеҙлектәрен ҡабартып күрһәтеү... Йөрәгендә халҡы булмаған әҙәмгә уйлап та торорға түгел - сит ил паспорты ал да, һыпырт. Әммә халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың киләсәген уйлаусылар, ер йөҙөнән юғалып ҡалмау, тиңдәр араһында тиң булып йәшәргә ынтылыусылар, сәнғәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе күтәреп, тарихыбыҙҙы өйрәнеп, башҡаларға үҙебеҙҙең кем булғаныбыҙҙы һәм кем булып йәшәргә тейешлегебеҙҙе күрһәтеү хәстәре менән яныусылар бер ниндәй ауырлыҡҡа ла ҡарамай йәшәй, эшләй. "Мин халҡым өсөн йәшәргә тейешмен, минең халҡым алдында бурысым оло, һан яғынан аҙ булһаҡ та, бөйөклөктә башҡаларҙан һис тә кәм түгел, беҙҙең һәр беребеҙ бик тә кәрәкбеҙ", тигән хәҡиҡәткә инанған илһөйәрҙәр республикабыҙҙа ҡала. Бындай ҡарашлы илһөйәрҙәр юғарынан әмер көтмәй, йөрәк ҡушыуы буйынса халыҡ юлынан тайпылмай йәшәй, эшләй бирәләр, үҙ балаларын да ошо юҫыҡта тәрбиәләйҙәр. Халҡыбыҙҙың ихтыяжын, ниндәй проблемалар хәл итергә тейешлеген, республикабыҙҙа һәр башҡорттоң йәшәүе, хеҙмәт итеүенең ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген аңлаған, артабан ниндәй юлдар менән халыҡты ҡурсаларға, һаҡларға кәрәклеген бар күңеле менән тойған, халҡыбыҙ киләсәгенең өмөтлө булыуына инанған илһөйәрҙәребеҙ генә йыйылыр бындай әһәмиәтле оло ҡорға, тип ышанғы килә. Башҡорт халҡының яҙмышын шундай илһөйәр аҡһаҡалдар хәл иткән бит борон-борондан.

Зөһрәнең мәҡәләһен уҡығас, күңел йылынып китте. Бар икән илде ҡурсалар фекерле йәштәребеҙ, тинем. Ҡоролтайҙа милләтебеҙ яҙмышы хаҡында ҡыйыу мәсьәләләр ҡуйылыр, унда күтәрелгән проблемаларҙы хәл итеү өсөн ең һыҙғанып эшкә тотонорҙай илһөйәр, телһөйәр делегаттар йыйылыр, тигән өмөттә ҡалам.

**Мәликә ЙОСОПОВА, РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

БЫЛ АЙҘА...



# ҺАБАНАЙҘА ҺАЙРАШМАҺАҠ,

## һарысайҙа һарғайырбыҙ...

**Һижри календары буйынса быйылғы май айы йомадиәл әүүәл һәм йомадиәл ахыр айҙарын үҙ эсенә ала. Боронғо башҡорттар был айҙы һабанай тип атаған. Исеменән үк аңлашылыуынса, һабанай - сәсеү, йылды туйҙырыр уңышҡа нигеҙ һалыу айы.**

Шул уҡ ваҡытта май - яҙғы байрамдар айы ла. Яҙ - үҙе үк байрам. Быйылғы май байрамдарының иң күттәһе, әлбиттә, 9 май - Бөйөк Еңеүгә 65 йыл тулған көн. Әгәр ҙә ошо көн булмаһа, башҡа байрам көндәренең әһәмиәте лә булмаҫ ине кеүек. Йыл һайын, һуғыш ветерандарының һаны йылдам кәмегән һайын, беҙ Бөйөк Еңеүҙең әһәмиәтен ныҡлап төшөнә барабыҙ кеүек. Шул уҡ ваҡытта беҙгә Бөйөк Еңеү килтереүсе һуңғы яугирҙың һуңғы һулыш алған көнөн күҙ алдына килтереп ҡараһаң, тәндәр сымырҙап китә. Ни өсөн тигәндә, илебеҙ етәкселәре уларҙың сафтары шаҡтай һирәгәйеп, һәр бер дивизияға, полкҡа берәр һалдат тороп ҡалғас ҡына ветерандарҙың барлығын иҫенә төшөрҙө кеүек. Яңыраҡ телевизорҙан күритә эсендә генә йыуыныrлыҡ йәшәү шарттары булған һуғыш ветеранын күрһәттеләр. Ундайҙар бихисап. Һәр нәмә сағыштырғанда күренә, беленә, тиҙәр. Беҙҙең республиканан компьютер программаларын уйлап сығарыусы бер егет Америкала стажировка үткән һәм уны яҡшы белгес булғаны өсөн үҙҙәренә эшкә саҡырғандар. Егет үҙе менән бергә ғаиләһен һәм һуғыш ветерандары булған ата-әсәһен алып барған. Калифорния штаты хөкүмәте уның атаһы менән әсәһенә "Союздаш ғәскәрҙәр сафында немец фашизмына ҡаршы көрәшкәне өсөн" тигән программа нигеҙендә элиталы йорттан бушлай фатир биргән һәм ветерандарҙы ғүмерлек бушлай медицина ярҙамы менән тәьмин иткән. Ә беҙҙә быға тиклем нисек булды һуң? 9 майҙа барлыҡ һуғыш ветерандарын йыйырҙар ине лә, ҡулдарына эсенә араҡы һәм колбаса тултырылған пакет тотороп ҡайтарырҙар ине. Бына бит нисек...

Әйткәнемсә, майҙа байрамдар бихисап: 1 май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы, 3 - Бөтә донъя матбуғат азатлығы, Ҡояш, 7 - Радио, 8 - Бөтә донъя Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл Ярым ай, 12- Бөтә донъя шәфҡәт туташтары, 15 - Халыҡ-ара ғаилә, 18 - Халыҡ-ара музейҙар, 24 - Славян яҙмаһы һәм мәҙәниәте, 27 - Дөйөм Рәсәй китапханалар, 28 - Пограничниктар, Химиктар һәм, һе, Бөтә донъя тәмәке тартыуға ҡаршы көрәш көндәре. Пограничниктар, Химиктар, Тәмәкеселәргә ҡаршы көрәшеүселәр көндәренең 28-нә тап килеүе осраҡлы ғынамы икән? Ҡыҫҡаһы, игеҙ байрамдары булған көндәр майҙа бик күп.

Һәр хәлдә, йыл һайын 28 майҙа пограничник булып хеҙмәт итеп ҡайтыусы егеттәр байрам итергә, баҙарҙарға баҫып инергә, сит илдән килеүсе сауҙагәрҙәрҙе пыр туҙҙырырға ярата. Бында хәл бик яҡшы аңлашыла, йәғни бының менән кисәге сик буйы һаҡсылары илебеҙ етәкселәренә шуны белдерә һымаҡ: "Беҙ сик буйын һаҡлауын һаҡлайбыҙ ҙа ул, һеҙ генә мына беҙҙең елкәне кимереүселәрҙе сик аша төрлө юлдар менән үткәреп, халыҡты талатаһығыҙ..." Шуға күрә был көндә сит илдән килеүсе сауҙагәрҙәр урамда күренмәҫкә тырыша. Ошоларҙан сығып, тәҡдим: 28 майҙы тағы ла Гастарбайтерҙарҙың ял көнө тип тә атарға кәрәк.

Майҙа байрамдар күп булыуын иҫтә тотоп, шундай бер хәҙисте килтергe килә: "Байрам көндәре улар сама белмәй ашау-эсеүҙәр, күңел асыуҙар менән йәнде яфалауҙар мәле түгел, улар үҙ-ара аралашыуҙар, осрашып йөрөүҙәр, сәләм бирешеүҙәр, араларҙа мөнәсәбәттәрҙе төҙөкләндереп ҡалыу өсөн бер сәбәп". Майҙағы байрамдарҙың тап шундай итеп үтеүен күрге килә.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Һәр бер айҙағыса, майҙа юбилейҙарын билдәләүселәр ҙә күп кенә. Форсаттан файҙаланып, филология фәндәре кандидаты Ишбулды Вәлитовты, педагогия фәндәре кандидаты Хәсән Толомбаевты - 75-шәр, философия фәндәре докторы Дамир Азаматовты - 70, билдәле журналист Сәлимйән Бәҙретдиновты 60 йәшлек юбилейҙары менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Йөҙөгөҙ май ҡояшындай балҡып торһон!**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Абхазия Республикаһына эш сәфәрендә булып ҡайтты. Делегация Абхазия Президенты Сергей Багапш менән эшлекле осрашыу үткәрҙе, ике республика араһындағы хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса саралар планын раҫланы.

✓"Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу" законына иҫәп бланкыһында респонденттың милләтен яҙыу графаһына ҡағылышлы үҙгәрештәр индерелеүе мөмкин. Ул ыңғай хәл ителһә, иҫәп алыусы яуапты граждан һүҙҙәренән сығып яҙа аласаҡ. Әле иһә законда һәр кеше милләтен билдәләгән яҙыуҙы үҙе яҙырға тейеш, тиелә. Был русса насар белгәндәр йә бөтөнләй яҙа белмәгәндәр өсөн ҡатмарлылыҡ тыуҙырасаҡ.

✓"Йыл табибы" Бөтә Рәсәй конкурсында Республика онкология диспансеры табибы Гүзәл Батталова һәм Октябрьский ҡала балалар дауаханаһы табибы Альбина Мәғәнова беренсе премия яуланы. Тағы ике табип - Рәшиҙә Мостафина "Рәсәйҙең иң яҡшы медицина учреждениеһы етәксеһе" номинацияһында - өсөнсө урын, Клим Ғиләжетдинов "Рәсәйҙең иң яҡшы фтизиатры" номинацияһында икенсе урын яуланы. Быйыл тәүге тапҡыр тапшырылған беренсе премияның күләме - ярты миллион, икенсе урынға - 300 мең, өсөнсө урынға 200 мең һум.

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеү сиктәрендә Башҡортостандан ветерандар делегацияһы Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Волгоградта, Белгородта һәм Курскиҙа тантаналы сараларҙа ҡатнашасаҡ. Республиканың ҡала һәм районларынан 270 ветеран Өфөгә байрам тантанаһына киләсәк. Өс көн дауамында улар өсөн "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында ял һәм дауалау ойошторoласаҡ.

✓Бөгөн республиканың дауалау-профилактика учреждениеларында 9745 һуғыш ветераны (уларҙың 3769-ы инвалид) диспансер иҫәбендә тора. Уларға сиратһыҙ амбулатор һәм стационар дауалау тормошҡа ашырыла. Һуғыш ветерандары араһында йөрәк-ҡан тамырҙары, нервылар һәм һөйәк-мускул системалары ауырыуҙары өҫтөнлөк итә. Күп ветерандар инвалидлыҡ төркөмөнә ҡарай.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ВЕТЕРАНДАР ХӘСТӘРЛЕ БУЛДЫ БУЛЫУҒА,

## фатир таратырға ғына онотҡанбыҙ, имеш...



**Көн дә гәзит-журналдар, радио һәм телеэфир, интернет аша беҙгә мәғлүмәт тулҡыны ағыла. Шул хәбәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре генә бөгөнгө "Аҙна шаңдауы"нда урын алды. Тәү ҡарашҡа, был хәбәрҙәрҙә ғәжәпләнерлек бер нәмә лә юҡ һымаҡ. Уйлана башлаһаң иһә, тормошобоҙ иҫ киткес икән.**

Үткән аҙнала журналистар ҡулдарына килеп эләккән ҡыҙыҡлы бер документ тураһында хәбәр итте. Ул - Рәсәй Федерацияһы Һаҡлыҡ банкыһының президенты, идара рәйесе Герман Греф менән Һаҡлыҡ банкыһы араһында төҙөлгән килешеү, имеш. Әйткәндәй, дәүләттең был банкылағы өлөшө 60 проценттан ашыу. Ябайыраҡ аңлатайыммы? Һаҡлыҡ банкы кешегә үтескә биреп торған 1 һумдың 60 тине дәүләттеке. Тимәк, беҙҙеке (беҙ, ябай кешеләр, ошо дәүләтте тәшкил итәбеҙ), тип аныҡлап үтергә кәрәк. Өҫтә әйтеп үтелгән документҡа ярашлы, 2010 йылдың 1 ғинуарынан Герман Грефтың айлыҡ эш хаҡы 950000 (туғыҙ йөҙ илле мең) һум тәшкил итә. "Почти миллион" бит был. Ни бары 50 мең һум ғына етмәй. Остап Бендерҙың хыялы.

Билдәле, эш хаҡы хеҙмәткәр тарафынан башҡарылған эш өсөн түләнергә тейеш. Әйтәйек, уҡытыусы беҙҙең балаларыбыҙға биргән белем өсөн аламы? Тәү ҡарашҡа шулай һымаҡ. Әммә ул уҡыусыға белемде насар ғына, үлсәп кенә, һығып ҡына бирһә лә, йәлләмәй, рәхәтләндереп бар белгәнен түкмәй-сәсмәй бирһә лә, уға түләү бер көйө ҡала. Ваҡытында класс менән етәкселек иткән өсөн түләнә ине уҡытыусыға, тағы ла... дәфтәр тикшергәне өсөн. Эш стажы өсөн дә аҙмы-күпме аҡса тама ине. Әле аңлауымса (ата-әсә йыйылыштарына йөрөйөм ҡай саҡ), бала башына түләйҙәр икән. Йән иҫәбенә финанслау тип атала ул хәл, бәктиһән. Әммә белем биргәндәре өсөн уҡытыусыларға бер ваҡытта ла түләмәнеләр. Ни өсөн, тип уйлайһығыҙмы? Белем бит бөгөн тотоп алып ҡына баһаларлыҡ нәмә түгел. Бала мәктәпте тамамлап, кеше рәтенә инеп, иленә файҙа (ә, бәлки, зыян) килтерә башлағанға тиклем кәмендә егерме йыл үтергә тейеш тә баһа! Бына, мәҫәлән, дәүләтебеҙҙең бөгөнгө етәкселәренә, күрәһең, ваҡытында белем биреп еткерелмәгән һымаҡ. Уҡытыусыларын тотоп алып (әгәр иҫәнһау булһалар, әлбиттә), уларҙың нисек уҡығандары хаҡында һорарға ине...

Хәйер, йәмәғәт, һүҙем Һаҡлыҡ банкыһы, уның президенты һәм идара рәйесе һәм дә ошо етәксенең эш хаҡы тураһында ине бит әле. Өҫтә әйтеп үтелгән "почти" миллион һум менән генә сикләнмәй икән уның эш хаҡы. Бынан тыш, йыл һөҙөмтәләре буйынса Герман Грефҡа ни бары 16 миллион 687 мең 500 һумдан артмаған премия түләнеүе ихтимал. Быны ла аңлатып үтергә кәрәк. Һаҡлыҡ банкыһында иҫәп асһағыҙ, йәки кредит алһағыҙ һәм уны ваҡытында түләп барһағыҙ, йә булмаһа, пенсияға сыҡһағыҙ (билдәле булыуынса, пенсиялар беҙҙә бары тик Һаҡлыҡ банкыһы аша ғына түләнә), йә иһә һаҡлыҡ кенәгәһе асһағыҙ, йыл аҙағында банк президентына өҫтә әйтеп үтелгән күләмдә премия түләнәсәк. Маладис, Греф! Уның уҡытыусылары үҙҙәренең ысын мәғәнәһендәге алтын уҡыусыһы менән горурланырға хаҡлы.

Эш хаҡы тураһындағы фекерҙәрем менән уртаҡлашыуҙы дауам итмәксемен. Әйтеүемсә, эш хаҡы хеҙмәтсәндең башҡарған эшенә ҡарап түләнергә тейеш. Ғәҙеллек шуны талап итә. Тимәк, эш хаҡы юғарыраҡ булған һайын, хеҙмәткәр шул тиклем ҡатмарлыраҡ һәм яуаплыраҡ эш башҡара. Төшөнәһегеҙме? Тимәк... банк менән идара итеү һәм уның президенты булыу (ә Герман Греф бер юлы ике вазифаны биләй) тотош ил менән идара итеүгә ҡарағанда ла ҡатмарлыраҡ булып сыға ла баһа! Ни өсөн тиһегеҙме?

Апрель урталарында Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев 2009 йылдағы килемдәре тураһында декларация тапшырҙы. Уға ярашлы, үткән йылда Медведев 3 миллион 335 мең 281 һум 39 тин эш хаҡы алған. Айырмаһын һиҙәһегеҙме? Тимәк, сағыштырһаҡ - Грефтың эше (йәғни, Рәсәй Федерацияһының Һаҡлыҡ банкыһы менән идара итеү) Медведевтың эшенән (Рәсәй Федерацияһы менән идара итеү) кәмендә дүрт тапҡырға ҡатмарлыраҡ килеп сыға түгелме? Ә инде Грефтың ун алты миллион ярым һумлыҡ йыллыҡ бонуҫын иҫәпкә алғанда инде, айырма шаҡ ҡатырғыс булып китә. Һорау тыуа... хәйер, юҡ, был юлы бер ниндәй ҙә һорауым юҡ. Булһа ла, уға яуап табып булмаясағы көн кеүек асыҡ.

Икенсе бер хәбәр тағы ла аныҡыраҡ ғәжәпләндерҙе. "Беренсе" каналдағы яңылыҡтар тапшырыуында яңғыраны ул. Алыҫ Көнсығышта, Владивосток ҡалаһы граждандары урамдарҙы үҙ иҫәбенә ремонтлай башлаған, имеш. Быныһ өсөн улар интернетта, подъездарҙа һәм урамдарҙағы бағаналарға иғландар элгән, аҡса йыя башлаған. Бер урам уртаһындағы соҡорҙо ямап та ҡуйғандар. Үҙ көстәре менән. Икенсе соҡорға аҡса йыялар икән. Шул уҡ ваҡытта Владивосток ҡалаһы ҡаҙнаһында урамдарҙы тәртиптә тотоуға махсус аҡса бүленгән, ҡала хужалығында юлдарҙы ремонтлау өсөн махсус техникаға эйә булған идаралыҡ бар. Күпмеләр кеше - ябай эшселәрҙән алып юғары вазифалы түрәләргә тиклем, ай һайын эш хаҡы ала. Ә юлдарҙы ябай кешеләр үҙҙәре ремонтларға мәжбүр. Белеүемсә, махсус рәүештә урамдарҙы һәм, ғөмүмән, юлдарҙы тейешле кимәлдә тотоу өсөн халыҡ юл һалымы түләй. Һәм ул бары тик юлдарҙы ремонтлауға йүнәлтелергә тейеш. Ҡала етәкселеге нимә ҡарайҙыр инде был шарттарҙа? Тиҙҙән Владивосток халҡы үҙе үк йүнәтеп алған юлдарҙы хосусилаштырырға тотонмаҫ, тимә. Хәйер, Владивостокта йәшәүселәр юлдарҙы йүнәтеү урынына булдыҡһыҙ түрәләрен эшләргә мәжбүр итһә ине...

Тағы ла бер хәбәр. Дөрөҫөрәге, ундай хәбәрҙәр илебеҙҙең төрлө төбәктәренән көн һайын тиерлек ишетелеп тора. Беләһегеҙҙер, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығы уңайы менән ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшырталар. Был Президент Дмитрий Медведев һәм Премьер-министр Владимир Путиндың берме-икеме йыл элек эҙрҙән ҡуптарып иғлан иткән акцияһы. Президент та, Премьер ҙа бер тауыштан ҡабатлап ҡына торалар - 9 майға фатирһыҙ ветеран ҡалырға тейеш түгел.

Матур идеямы? Һис шикһеҙ! Улар беҙҙең өсөн йәнен йәлләмәй һуғышҡан, ҡан түккән, беҙ уларға булған оло бурысыбыҙҙың бер ни тиклемен булһа ла ҡайтарырға тейешбеҙ. Оло бурыс тураһында уйлаһам, тәндәр зымбырлап китә. Тик... Һуғыш тамамланғанға 65 йыл булғас, ул ветерандарға кәмендә 85 йәш булырға тейеш бит. Шулаймы? Әлбиттә, тиерһегеҙ. 85 йәшкә тиклем барып етер өсөн ҡоростай ныҡлы һаулыҡ кәрәк тә баһа. Әлбиттә, тиерһегеҙ. Һуңғы йылдарҙа ветерандарҙың һаны күпкә, бик күпкә кәмене. Яңылыҡтарҙан шапыртып бирәләр - Рәсәйҙең теге йәки был төбәгендә ветеран яңы фатирға эйә булған. Бик матур репортаж тапшырыла - яңы ғына төҙөлгән йорт, экрандан буяу еҫе аңҡып тора һымаҡ. 90 йәшкә етеп барған бабай әбейен эйәртеп, баҫҡыс буйлап өсөнсөмө-дүртенсеме ҡатҡа, үҙенең фатирын ҡарарға менеп китеп бара. Уға ауыр. Ветеран ыш-пыш килеп тын ала, туҡтап ял итә. Кадр артында хәбәрсенең пафослы тауышы: "Һуғыш ветераны Фәлән Фәләнович Фәләнов ҡырҡ йылдан ашыу яңы торлаҡты көткәндән һуң, ниһайәт, үҙ фатирына эйә булды".

Ғәжәпме? Ғәжәп. Ветеран яңы фатир өсөн етекселеккә рәхмәт уҡырға тейешме? Һис шикһеҙ! Тик... Арифметиканы ярҙамға саҡырайыҡ, булмаһа. Бөгөн 2010 йыл. Советтар Союзы тарҡалғанға, Аллаға шөкөр, егерме йыл үтеп тә китте. 2000 йылдан бирле, Борис Ельцин: "Арыным. Китәм!" - тигәндән һуң, Рәсәй менән яңы етәкселәр идара итә. Тәүҙә Владимир Путин - һигеҙ йыл, шунан Дмитрий Медведев һәм Владимир Путин - ике йыл. Ошо ваҡыт эсендә беҙ Бөйөк Еңеүҙең 55 һәм 60 йыллыҡ юбилейҙарын билдәләп өлгөрҙөк. Хәрби парадтар үткәрҙек. Ҡотлауҙар яҙҙыҡ. Ветерандарға фатир таратырға ғына онотҡанбыҙ...

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала шәмбе өмәләре дауам итә. Ҡала һәм ауылдар урамдарын сүпсарҙан таҙартыу, ағас ултыртыу эштәрендә миллиондан ашыу кеше ҡатнашып өлгөргән дә инде. БР Экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, экологик акцияларға 14 мең берәмек техника йәлеп ителгән, яҡынса 69 мең тонна көнкүреш ҡалдығы сүп полигонына сығарылған.

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған саралар сиктәрендә "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы 6 майҙа "Еңеү яҙы" тигән телемарафон, шулай уҡ "Урал ынйылары" тигән хәрби йыр башҡарыусылар конкурсы үткәрә. Был конкурстың гала-концерты өфөләләр 9 майҙа Ленин исемендәге майҙанда ла ҡарай аласаҡ.

✓Санкт-Петербург ҡалаһында үткән тай боксы буйынса Рәсәй чемпионатында Өфөнөң 24-се үҫмерҙәр спортмәктәбе уҡыусыһы Светлана Усманова 1-се урынды яуланы. Сибайҙан Ринат Ғөбәйҙуллин бронза миҙалға лайыҡ булды.

✓БР Экология министрлығы дәүләт инспекторҙары административ комиссия составында төҙәкләндереү буйынса айлыҡ сараларының үтәлешен тикшереү өсөн 428 объектта булған. Был объекттарҙың 94-е тәбиғәтте һаҡлау закондары талаптарына яуап бирмәүе асыҡланған. 74 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Штрафтарҙың дөйөм күләме 324,5 мең һум тәшкил иткән.

✓Белорет ҡалаһы ҡыҙы Лилиә Шобухова Лондондағы халыҡ-ара марафон йүгереүендә 37 меңгә яҡын спортсыны уҙып китеп, финишҡа беренсе килеп, Рәсәй тарихында тәүге еңеүҙе яуланы. Былтыр ул 42 саҡрым араны өсөнсө булып килгәйне. Лилиә Барселонала уҙасаҡ Европа беренселегендә ҡатнашасаҡ.

✓Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана Әзербайжанға халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияға саҡырыу алды. Был конференция Әхмәт-Зәки Вәлиди йылы сиктәрендә үтә. Милли китапхана конференцияға китап күргәҙмәһе алып барасаҡ.

✓Быйыл өс айҙа республикала 140 кеше сысҡан биҙгәге менән ауырыған. Былтыр 3257 кеше ошо ауырыуға дусар булғайны. Благовещен, Өфө, Иглин, Тәтешле, Мишкә, Аҫҡын районлары биләмәләре ошо сирҙең таралыу хәүефе ҙур булыуы менән билдәле.

## ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Өфө

Һуңғы ваҡытта баш ҡала урамдарында күгәрсендәр күҙгә күренеп кәмене. Күптәр был хәлгә "Вьетнамдарҙың эше, улар күгәрсендәрҙе тотоп ашай", тип баһа бирә. Әлеге ваҡытта ҡалала вьетнам магазиндарын ябалар, үҙҙәрен илдәренә ҡайтаралар. Алла бойорһа, ашаусылары булмағас, күгәрсендәр тағы ла үрсер инде.

Һуңғы ике йылда ҡала урамдарында сыйырсыҡтар, ҡара ҡарғалар күренмәй тиерлек. Баш ҡаланың "Yoka press" агентлығы хәбәрселәре орнитологтар менән берлектә был күренеште тикшереп, шундай һығымтаға килгән: баҡтиһәң, бында төп сәбәп бар донъя буйлап таралған ҡош киҙеүендә икән. Был ҡоштар көҙ етеүгә йылы яҡҡа оса, ә унда иһә мылтыҡ менән ҡоралланған капиталист фермерҙар бахырҡайҙарға көн күрһәтмәй, үҙҙәре йәшәгән ҡала-ауылдарға яҡын да юлатмай икән. Бына шунан һуң сыйырсыҡтар менән ҡара ҡарғалар кешеләрҙән биҙерәгән, имеш. Кисә үлгән булһам...

### Учалы

Был төбәктең әүҙем йәмәғәтселек ағзалары районды боронғо исемен ҡайтарыу буйынса ғилми-ғәмәли конференция уҙғарған, тип ишеттек. "Ейәнсураларҙан ҡайһы еребеҙ менән кәмбеҙ, ана, улар районларының боронғо "Ейәнсура" атамаһын кире ҡайтара алды", тип тотонған улар был эшкә. Конференцияла сығыш яһаусылар башҡорт телендә "ч" өнөнөң булмауын нигеҙ итеп алып, "Учалы" һүҙенең ошо төбәктәге "Асыуҙы" күле атамаһының боҙолоп әйтелеше тип иҫбат иткән һәм бынан-был яғына районды исемен "Асыуҙы" тип атау яҡлы. Һуғышҡа тиклем район үҙәге ҡасабаһын Асыуҙы тип йөрөткәндәр, уның янында ике күл булған икән: Ҙур Асыуҙы һәм Бәләкәй Асыуҙы күлдәре. Үкенескә ҡаршы, Бәләкәй Асыуҙы күле Учалы таубайыҡтырыу ҡалдыҡтары аҫтында тороп ҡалған. Ҙур Асыуҙы күленең һыуы эсергә яраҡһыҙ булһа ла, урындағы халыҡ уны барыбер эскән. Ғалимдар был хәлде күлдәрҙең араһында баҡыр рудаһы ятҡылығы булыуы менән аңлата икән. "Асыуҙы"ны "Учалы"ға үҙгәртеүҙе ялған легенда менән бәйләп аңлаталар. Имеш, Аҡһаҡ Тимер бында кемдәндер үс алған икән. Был боронғо атаманы танырға теләмәүселәрҙе урындағы халыҡ үтә лә асыулы рәүештә ҡаршылаясаҡ, ҡунаҡ итмәйәсәк һәм район сигенән кире борол сығарасағы тураһында конференция резолюция ҡабул иткән, имеш. Был факт, ысынлап та, Учалының Асыуҙы булыуын дәлилләй.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# КӨРӘШСЕЛӘР ӘҮҘЕМЛӘШӘ...

## һабантуйҙа ғына түгел, ҙур спортта

**Өфөлә Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған саралар сиктәрендә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев иҫтәлегенә милли көрәш буйынса асыҡ турнир үтте.**

Һуңғы осорҙа милли көрәш буйынса турнирҙар йыш үтеп тора. Яңыраҡ ҡына Мәләүездә республика райондары көрәшселәре араһында беренселек, БР Хөкүмәте ҡарарына ярашлы үткәрелгән Спартакиадала мәктәп уҡыусылары араһында ярыштар үтте. Судьялар фекеренсә, бындай турнирҙар барыһы ла бик юғары кимәлдә ойошторола һәм спортсылар араһында дуҫлыҡ бәйләнештәре нығыныуға, профессиональ оҫталыҡтың үҫеүенә килтереп кенә ҡалмай, ә республикала сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаусы йәштәрҙең күбәйеүенә булышлыҡ итә.




Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығына арналған һәм "Барыһы ла Еңеү өсөн" тигән девиз аҫтында үткән сираттағы был турнир ҙа көрәш балаҫына 100-ҙән ашыу батырҙы йыйҙы. Унда Өфө, Баймаҡ, Белорет, Нефтекама, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Учалы ҡалаларынан, Әлшәй, Ауырғазы, Балаҡатай, Саҡмағош, Мәләүез районларынан тыш, Татарстандан, Ханты-Манси автономиялы округынан, Ырымбурҙан спортсылар ҡатнашты. Еңеүсе исеменә 65 кг-ға тиклемге ауырлыҡта Вадим Зөлҡәрнәйев (Өфө), 75 кг-ға тиклем - Руслан Йосопов (Учалы), 80 кг-ға тиклем - Наил Мөхәмәтйәнов (Өфө), 85 кг-ға тиклем - Рөстәм Исламов (Саҡмағош), 90 кг-ға тиклем - Юнир Ильясов (Өфө), 100 кг-ға тиклем - Рәдиф Аҡсурин (Өфө), 100 кг-дан юғарыраҡ ауырлыҡта Юрий Сабанов (Стәрлетамаҡ) лайыҡ булды. 80 кг-ға тиклем ауырлыҡта юниорҙар араһында беренсе урынға Мансур Юлтимеров (Өфө) сыҡты. Турнирҙа беренсе, икенсе, өсөнсө урын алғандарҙың барыһына ла аҡсалата бүләктәр тапшырылды. Бынан тыш, турнирҙың иң яҡшы судьялары ла маҡтау ҡағыҙҙары менән билдәләнде.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Өфө ҡалаһы Киров районының 14-се Балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбендә йәш көрәшселәр тәрбиәләүсе тренерҙар Наил Мөхәмәтйәров һәм Рәдиф Аҡсурин май айында милли көрәш буйынса Татарстанда үтәсәк Донъя чемпионатында Башҡортостандың данын яҡлаясаҡ. БР Милли көрәш федерацияһы рәйесе Вәкил Ильясов белдереүенсә, Өфө көрәшселәре ай аҙағында Екатеринбургта буласаҡ Урал кубогында ла ҡатнашасаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## ҮТКЕР КҮҘ

# СОҠОРОМ ҺАЙ, ҠУРҠМАЙЫМ...

**Мин "Байыҡ" телевизион бейеү конкурсын ҡалдырмай ҡарап барам. Халҡыбыҙҙың шул хәтлем талантарға бай булыуына һоҡланам, ҡыуанам, ғорурланам. Тик бер нәмәгә эсем боша. Әгәр яңылышһам, алдан уҡ ғәфү үтенәм.**

Жюри ағзаларын ҡарайым да, шундай абруйлы комиссияға башҡорттарҙан кеше тапманылармы икән ни, тип борсолам. Тәүҙә "Былар ниндәй милләт кешеләре икән?" тип уйлай торғайным. Төшөндөм, алтыһы ла башур (башҡорт + урыҫ) милләтенән икән. Конкурсант бейеп сыҡҡандан һуң, уның сығышын тикшергәндә беленә уларҙың башур милләтенән икәнлектәре. "Русса әйткәндә" тип башлап алып китәләр ҙә, береһенән-береһе уҙҙырып, русса һүҙҙәр ҡушып һөйләй, "русса әйткәндә", обсуждать итә башлайҙар. Телевидениенан бөтә Башҡортостанға үҙҙәренең русса "шәп" белгәндәрен күрһәтеүҙәреме? Аңламайым, бәлки, аңлатырһығыҙ? Ә бейеүселәргә кәңәшем: жюри ағзалары русса һөйләшә икән, һеҙ ҙә бейеүҙәрегеҙҙә урыҫ бейеүе хәрәкәттәрен ҡушып ебәрегеҙ. Бәлки, юғарыраҡ балл ҡуйырҙар.

Бейеүселәргә килгәндә, миңә ҡалһа, бөгөндән үк Гран-прины Йылайыр районы Матрай ауылы егете Ғүмәр Ҡашҡаровҡа бирер инем. Ысын башҡортса итеп, халыҡсан бейей. Күптәр кеүек ырғып, бот күтәреп, балет элементтарын ҡушып бейемәй.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әгәр Өфөлә йәшәүсе "Башавтотранс" етәкселәре йоҡонан уянғас, әтәс булып ҡысҡырһа, башҡа ҡалалағылар ҙа ҡысҡырырҙармы? Моғайын, шулай итерҙәр. Бына Өфөлә ҡала эсендә йөрөгән маршрут автобустарында йөрөү хаҡын 10 һумдан 15 һумға күтәргәйнеләр, башҡалар ҙа быны хуплап ҡаршы алды. Өфөлә, бәлки, хаҡ арттырыу кәрәктер, унда автобусҡа ултырған юлаусы тиҫтәләгән километр юл үтә, ә Сибай кеүек бәләкәй ҡалала юл бер километрҙан да артмай. Автобустарҙа йөрөү хаҡы ҡаланың ҙурлығына, юлдың оҙонлоғона ҡарап ҡуйылырға тейеш түгелме икән?**

**Юҡ-барҙы күреп, үҙеңә соҡор ҡаҙаһың, тиеүселәр булды ул миңә, әле ҡаҙған соҡором һай, ҡурҡмайым...**

**Икен ЭТҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған саралар үткәреү менән бәйле 4,7 майҙа 19- 22 сәғәттәрҙә Шәфиев урамынан Кольский урамына тиклем, 9 майҙа 10-дан 14 сәғәткә тиклем Шәфиев урамынан Кольский урамына тиклем, 9 майҙа 20.30 - 22.30 сәғәттәрҙә Дәүләт циркы туҡталышынан Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты туҡталышына тиклем Октябрь проспекты ябыла.

✓5 майҙа 11 сәғәттә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты "Күп милләтле дәүләт шарттарында башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлап ҡалыу: проблемалар һәм үҫеш юлдары" секцияһын үткәреүгә әҙерлек буйынса эш төркөмө менән берлектә түңәрәк ҡор үткәрә.

✓6 майҙа 19 сәғәттә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Рияз Исхаҡовтың Һөйәнтөҙ музыкаль фильмының презентацияһы үткәрелә.

✓3-12 майҙа Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары ҡалаара, ҡала яны автобустары, тимер юл транспорты һәм самолеттарҙа бушлай йөрөй ала.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ғинуар-февраль айҙарында Өфө предприятиелары тарафынан биш миллиард һумлыҡ килем алыныуы тураһында мәғлүмәт килтерелде. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда бер ярым тапҡырға күберәк.

✓Өфө халҡы трамвай менән троллейбустарға өҫтөнлөк бирә башлаған. Бер социаль автобус былтыр 167 мең пассажир ташыһа, трамвайҙа 376 мең, троллейбуста 266 мең кеше йөрөгән. Бында транспорт картаһы менән йөрөү хаҡтарының уңайлы булыуы ла ыңғай роль уйнаған, күрәһең.

✓Рәсәй почтаһы 1 Май һәм 9 Май байрамдары мәлендәге эш режимын билдәләне. 1 Май - ял көнө. 2-7 майҙа бөтә почта бүлексәләре лә ҡәҙимге режимда, 8 майҙа почталар ҡыҫҡартылған режимда, 10 майҙа барлыҡ почта бүлексәләре ҡәҙимге режимда эшләй.

✓Баш ҡалала Рәсәйҙең мода индустрияһы "батшаһы" Вячеслав Зайцев ҡатнашлығында Мода аҙналығы булып үтте.

*БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ...*

# СИТ ЕРҘӘ СОЛТАН БУЛҒАНСЫ...

## үҙ илеңдә олтан бул



**Кеше донъяға үҙ теләге менән килмәй, әммә үҙ теләге менән китергә йәки китмәҫкә теләүселәре бихисап. Шулай уҡ кеше тыуасаҡ илен, телен, ата-әсәһен, уны уратып алған мөхитте, ваҡытты һайлай алмай. Хәйер, был бик тә яҡшы! Сөнки киреһе була ҡалһа, йәшәүҙең бөтә ҡыҙығы ла бөтөр ине... Мин дә илемде, телемде һайлап алманым, әммә ҡулымды йөрәгемә һалып, ысын күңелдән әйтә алам: "Хоҙайым, рәхмәт һиңә ошондай оло бүләгең өсөн. Рәхмәт мине башҡорт рухлы башҡорт ҡыҙы иткәнең өсөн!" Ни өсөнмө? Улайһа, тыңла.**

...Билдәһеҙ ваҡыттың билдәһеҙ бер көнөндә Аллаһы Тәғәлә изге эшен тамамлаған - Ер планетаһын әүәләп бөткән, ти. Унда шундай таҙа һауа, һыу, ер булған; иҫ киткес матур ҡоштар, төрлө-төрлө хайуандар, иҫәпһеҙ-һанһыҙ бөжәктәр ғүмер итә башлаған. Әммә ниҙер етешмәгән унда. Һәм Хоҙай кешеләргә йән өрөп, ергә төшөрә башлаған. Кешеләргә ул төрлө ҡиәфәт һәм төрлө тел биргән, ике төрлө енескә бүлгән... Һәм быны ер өләшер ваҡыт еткән, ти. Өлгөр һәм ҡыйыуҙар алдан барып, бар яҡшы, һыулы ерҙәрҙе алып бөткән. Бер баҫалҡы башҡорт ҡына ситтә ерһеҙ-һыуһыҙ тороп ҡалған. Аллаһы Тәғәлә быға бер аҙ аптырап торған да, Ер шарындағы үҙенең иң яратҡан өлөшөн башҡорттарға бирергә булған, ти. Ысынлап та, башҡорттарға тейгән ер иң бай һәм иҫ киткес хозур була. Был ерҙәрҙең иркенлеге иһә башҡа халыҡтарҙың сәмен һәм нәфсеһен ҡуҙғыта, ти. Тора-бара был ерҙәр көнсөл халыҡтар тарафынан талана, урлана башлай. Ә бер ҡатлы, ябай, тәбиғәт балалары булған башҡорттар киң күңеллелек күрһәтә, ҡуйынына балта ҡыҫтырып килгәндәрҙе лә абайламаҫтан үҙ еренә һыйындыра....

Бөгөн беҙ ошо изге ерҙең бер бәләкәй генә өлөшөндә ғүмер итәбеҙ. Шулай ҙа был - оло бәхет! Сөнки Башҡортостан иле бар, уның тәбиғи байлыҡтары, үҙенсәлекле мираҫы һәм ҡомартҡылары бар, әҙәбиәте һәм фольклоры телдән төшмәй. Беҙҙең хаҡта яҙалар, беҙҙең хаҡта асыштар яһайҙар! Тимәк, беҙгә юғалырға ярамай! Минең уйлауымса, күп осраҡта илебеҙ һәм телебеҙ киләсәге үҙебеҙҙән тора. Уйлап ҡына ҡарағыҙ. Беҙ. башҡорттар, Хоҙайҙың яратҡан бәндәләре, уның яратҡан ерендә йәшәйбеҙ. Әлбиттә, быңдай матур бүләккә лайыҡлы булырға тырышырға тейешбеҙ.

Юҡ, мин башҡа милләт халҡын рәнйеткем килмәй. Әммә минең халҡым да улар тарафынан рәнйетелмәһен ине. Һәр кешегә үҙ иле матур, үҙ теле яҡын. Һәр кеше уны байытырға һәм үҫтерергә тырыша. Ә беҙ? Ни өсөн үҙебеҙҙең телебеҙ ҡорор сиккә еткәндә, беҙ башҡа телдәрҙе байытыуҙа ҡатнашырға тейеш әле? Ни өсөн үҙебеҙҙең башҡортлоҡтан ҡасабыҙ? Ни өсөн: "Һин милләтең буйынса кем?"- тип һорағанда, теләр-теләмәҫ, ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп: "Мин - башҡорт...",- тип әйтәбеҙ? "Мин - Башҡорт! - тип башты ғорур тотоп әйтергә өйрәнәйек.

Ҡасандыр Волга буйҙарынан алып Кама ярҙарына тиклем йәйрәп ятҡан башҡортом төбәге. Ә бөгөн? Хатта Каруанһарай ҙа үҙ ҡулыбыҙҙа түгел. Ә һеҙ беләһегеҙме, бөгөн музейҙарҙы биҙәгән бик күп әйберҙәр -батша ҡалпаҡтары ла, башҡа затлы әйберҙәр ҙә, шулай уҡ булат ҡылысы ла ҡасандыр башҡорттарҙың ижад емеше булған. Әммә бөгөн был ижадты икенселәр үҙ исеме менән бәйләй. Ысынында иһә, бик күп әйберҙәрҙең, шулай уҡ булат ҡылыстың да эшләнеү серен беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ ғына белгән.

Бер саҡ шулай автобуста ауылға ҡайтып киләм. Минең йәнәшәмдә ике урта йәштәрҙәге ҡатын ултыра. Уларҙың хәбәрәнә ирекһеҙҙән ҡолаҡ һалам. Ҡатындарҙың береһе икенсеһенә илай-илай үҙ тормошон һөйләй. Ҡыҫҡаһы, ул ҡатындың ҡыҙы кемдәрҙендер татлы һүҙенә, матур донъя вәғәҙә итеүенә ышанып, ситкә сығып китә. Һөҙөмтәлә ҡолға әүерелә... Ҡайтыуға юл юҡ. Әсә кеше шуға әрней. Халыҡ: "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул,"- тип юҡҡа ғына әйтмәгән шул.

Быңдай миҫалдарҙы күп килтерергә була инде ул. Шуға ла милләттәштәргә өндәшке килә: "Телебеҙҙе һәм илебеҙҙе һатмайыҡ, ташламайыҡ, башҡорттарым!"

Сит ерҙә солтан булғансы,  
Үҙ илеңдә олтан бул,  
Һауала йондоҙ булғансы,  
Үҙ һыуыңда суртан бул.

Аҡыллы бул, уйлап эшлә,  
Уйлап һөйлә хәбәрҙе.  
Аҙымыңды үлсәп атла,  
Рәнйетмә кешене.

Бул ябай һин, ҡатмарлы ла,  
Оялсан, ҡыйыу ҙа бул.  
Яҙмышыңа бик зарланма,  
Һынап ҡарай, тимәк, ул.

...Һауала ла йондоҙ һүнер,  
Һыуҙа ла суртан үлер.  
Ҡалыр бары тупраҡ - ерең,  
Уйла. Ҡалырмы телең?

**Әлиә ТЕЛӘҮБИРҘИНА.**  
**Салауат ҡалаһы.**

*ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!*

**"Ауырлыҡ килеп тыуғанда ығы-зығыланмай, тыныслыҡ һаҡлаһаң, һүҙҙәреңде ярһып түгел, үлсәп кенә әйтһәң, һин үҙеңде оҙаҡ ваҡыт выждан ғазаплауынан ҡотҡарырһың. Үҙ-үҙеңде ҡулға ала белеү стратегияһы - ул "өс ҡапҡаны" үтеү. Боронғо аҡһаҡалдарыбыҙ илгә ниндәйҙер хәл иткес һүҙ әйтер алдынан өс һорау - өс ҡапҡа аша үтер булған. Тәүҙә аҡһаҡал үҙенән: "Һүҙҙәрем хаҡ булырмы?" - тип һораған. Хаҡ булғанына төшөнгәс, икенсе һорау-ҡапҡаға күскән. Үҙенә: "Минең һүҙҙәремә ихтыяж бармы һуң?" тигән һорауҙы биргән. Әгәр ихтыяж булһа, аҡһаҡал артабан үҙ-үҙенә ошондай һорау биргән:"Минең һүҙҙәремдә изгелек бармы?". Был һорауына ыңғай яуап булғанда ғына аҡһаҡал ил буйлап таралыр һүҙҙәренә ирек биргән".**

**Робин ШАРМА.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

**Ҡатнаш никах бәләһен үҙ ғаиләбеҙ миҫалында кисереп беләм. Ғаиләбеҙҙә ике малай, ике ҡыҙ үҫтек. Оло ағайым юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң татар ҡыҙына өйләнде. Еңгәбеҙ ни татар телен, ни башҡорт телен үҙ итмәне, үҙенең исемен дә, ағайымдыҡын да, балаларҙыҡын да тик русса ғына атап йөрөттө. Ағайым эшкә унған булды, гел юғары урындарҙа эшләне, әммә ғаилә бәхете генә күрмәне.**

# ҠАТНАШ НИКАХ ҠОРОУ...

## үҙеңә лә, милләтеңә лә юғалтыу ул

Хәтеремдә, бер саҡ ағайым иртән картуф бешерергә һалған да, эшкә йүгергән. Еңгәбеҙҙең тәҙрәнән: "Миша, когда соль положить, сейчас или в конце", - тип ҡысҡырғанын әле лә лаҡап итеп һөйләйҙәр. Ул саҡта ағайым райисполком рәйесе булып эшләй ине. Балалары ни телдә, ни диндә белмәй үҫтеләр. Еңгә лә, ағайым да вафат инде хәҙер. Бер саҡ өлкән ҡыҙҙарының төшөнә әсәләре ингән дә: "Өшөйөм", - тигән. Шунан балалары әсәләре ҡәберенә юрған алып барып күмгән. Динде, халыҡ йолаларын белмәй үҫеү кешене ниндәй назан итә...

Апайым башта башҡортҡа сыҡҡайны, ике ҡыҙҙары тыуҙы, тик бергә йәшәй алманылар. Еҙнәй эсте, ҡул күтәрҙе. Айырылышыуҙарына ҡарамаҫтан, йөҙәткәс, апайым балаларын алып, Украинаға сығып китте. Унда бер украинға кейәүгә сыҡты. Хәҙер өс ҡыҙы туғыҙ "украин хлопчиктарын" үҫтерә.

Иң үкенеслеһе - кесе ағайым. Ул арабыҙҙа иң аҡыллыһы. Өс вуз тамамланы, фән докторы исемен йөрөтә. Исем-фамилияһын атамайым, оялыр, сөнки ғаиләһе өсөн ул юҡ иҫәптә. Еңгәбеҙ мәрйә. Беҙ барһаҡ, сәй ҡуя ла, "Я вас все равно не понимаю", - тип, икенсе бүлмәгә инеп китә. Ағайым башҡортса радио ла тыңлай, телевизор ҙа ҡарай алмай, сөнки өйҙәгеләр аңламай, аңларға ла теләмәй. Өрләктәй ике улы бар, йөҙҙәре менән башҡорт булһалар ҙа, телдәрендә башҡорт һүҙе, күңелдәрендә милли рух юҡ. Береһе - мәрйәгә, икенсеһе йәһүдкә өйләнде, икешәр балалары бар.

Атай-әсәйемдең дүрт балаһынан тик мин генә башҡорт ғаиләһе ҡорҙом. Ике ул һәм бер ҡыҙымдан ете ейән-ейәнсәрем бар. Әсәйем ағайымдарҙың сит милләткә өйләнеүҙәренә ризалыҡ бирмәне, "Һеҙҙең өсөн тамуҡҡа инәһем юҡ", - тине ул. Тыңламанылар туғандарым, үҙҙәрен шундай ҙур бәхетһеҙлеккә дусар иттеләр.

Бына хәҙер милләтәбеҙ күпме юғалтыу кисергәнен иҫәпләп ҡарайыҡ. Оло ағайымдың ике ҡыҙы, өс ейәне, апайымдың өс ҡыҙы, туғыҙ ейәне, кесе ағайымдың ике улы, дүрт ейәне - барлығы егерме өс бала сит милләтте арттырған. Быңдай күренеш бер беҙҙең ғаиләлә генә күҙәтелмәй бит. Ошо юлдарҙы уҡығандар, туғандарығыҙҙы барлап ҡарағыҙ әле, ҡайһы милләтте арттыралар икән? Бала табыу менән генә илде, милләтте ҡотайтып булмай, уны башҡорт итеп, башҡорт рухлы итеп үҫтереү мөһим шул.

**М. ӘХМӘҘИЕВА.**  
**Өфө ҡалаһы.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## АШҠАҘАНҒА КЕҪӘЛ ФАЙҘАЛЫ



**Яҙ етеү менән һәр кемгә организмын таҙартып, көс йыйҙырып, матурландырып алыу кәрәк. Төрлө хроник ауырыулы кешеләргә лә хәле киҫкенләшеп китмәҫ элек профилактик саралар үткәреп алыу ҡамасауламаҫ.**

❖ Ашҡаҙанды, тын алыу юлдарын рәтләү өсөн: 1 кешегә 10 грамм иҫәбенә туралған бәпембә тамырын марляға һалып төйнәп, кәстрүлдәге һыуға төшөрергә лә, икенсе ягын кәстрүлдең тотҡаһына бәйләргә. Быңдай ашҡа кишер, картуф ҡына һалалар. Аш бешкәс, марляны алып ташларға. Шулай уҡ дегәнәк тамырын да бешерергә була. Дегәнәк лайлалы матдәләрҙе сығарырға булышлыҡ итһә, картуфтың һыу менән ҡатнашып, йәбешкәк иретмәгә әйләнә торған үҙенсәлеге бар. Кишерҙәге витаминдар яҡшыраҡ үҙләштерелһен өсөн, ашҡа саҡ ҡына май ҡушып ебәрергә кәрәк. Ашты саҡ ҡына һыуытып ашарға.

❖ Ашҡаҙанға файҙалы кеҫәл: ярты балғалаҡ киптерелгән бөтнөк менән 1 ҡалаҡ әнис орлоғон марляға төрөп, кәстрүлгә төшөргәс, тигеҙ күләмдә сөгөлдөр һуты менән һыу һалырға. Өс алманы ҡырғыстан үткәреп өҫтәргә. Айырым һауытта 3 ҡалаҡ крахмалды һыуҙа иреткәс, кәстрүлдәге ҡатнашмаға ҡушырға һәм ҡайнар хәлгә еткерергә лә, утты һүндереп ҡуйырға. Кеҫәлде һыуытып, марляны төйөнөн алырға һәм бер ҡалаҡ бал ҡушып болғарға.

❖ Һарымһаҡтың бер тешен иҙергә, бер балғалаҡ бал ҡушып, бер стакан йылы һыуға болғатып, ятыр алдынан көнөнә бер тапҡыр эсергә. Быңдай төнәтмәне 10-14 көн дауамында эсһәң, ҡан тамырҙары таҙара, йөҡо яҡшыра, нервылар тыныслана, юғары ҡан баҫымы төшә.

❖ Бер балғалаҡ меңъяпраҡты бер стакан ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, һөҙөп, аш алдынан эсеп ҡуйһаң, түбән ҡан баҫымы нормаль хәлгә килә. Төнәтмәне ашағандан һуң эсһәң, юғары ҡан быҫымын төшөрә.

❖ Бер ҡалаҡ миләш сәскәһенә бер балғалаҡ аҡ сәскә ҡушып, бер стакан ҡайнар һыу өҫтәп төнәтергә. Иртәле-кисле яртышар стаканлап 10 көн эсһәң, юғары ҡан баҫымы яйға һалыныр. Төнәтмәне ашар алдынан эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Иптәштәр ҡағиҙәһе

● Иптәштәрегеҙгә үҙегеҙҙе маҡтамағыҙ. Уларға тәкәбберләнмәгеҙ. Уларҙы мәсхәрәләмәгеҙ, көлмәгеҙ. Тел һәм ҡулығыҙ менән ҡурҡытмағыҙ, хәсрәтле хәбәрҙәр һөйләмәгеҙ. Улар менән ғәҙәттән тыш уйнамағыҙ, әҙәпкә һыймаған эштәр эшләмәгеҙ.

● Тәрбиәһеҙ ҡыҙҙар менән һөйләшмәгеҙ. Улар менән дуҫ булыу, ҡатнашып йөрөү - холоҡто боҙоу өсөн иң көслө сәбәп икәнен онотмағыҙ.

● Иптәштәрегеҙҙе хөрмәт итегеҙ. Тәрбиәле ҡыҙҙар менән һөйләшеүҙе файҙа тип белегеҙ. Уларҙың холоҡ һәм фиғелдәренән үрнәк алығыҙ. Арағыҙҙы ваҡыт айырһа ла бер-берегеҙҙе онотмай, хәлдәрегеҙҙе белешеп, мөмкин булғанда хат яҙышып тороғоҙ.

● Әҙәм балаһының дәрәжәһен белдереп тороусы нәмә - бер-ике генә юл булһа ла яҙылған хаттыр. Ике-өс юллыҡ хатынан яҙыусының мәртәбәһен асыҡ белерҙәр. Шуның өсөн хаттарығыҙҙы иғтибар менән уйлап яҙығыҙ.

● Үҙ исемегеҙгә булмаған хатты асмағыҙ. Имзаһыҙ йәки ваҡ-төйәк ҡағыҙға, китап һәм дәфтәрҙән йыртып алынған ҡағыҙ киҫәгенә һис бер ваҡыт хат яҙмағыҙ. Хатты конвертһыҙ ебәрмәгеҙ. Маркаһыҙ почтаға бирмәгеҙ.

### Йөҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Йөҙ - күңелдең көҙгөһө, кешеләрҙең шәфҡәтле һәм ҡаты булыуының билдәһелер. Шуның өсөн һәр ваҡыт йөҙөгөҙгә иғтибарлы булығыҙ. Һәр кем менән һөйләшкәндә ситкә ҡарап тормағыҙ. Үҙегеҙгә ҡарамаған кеше менән һөйләшмәгеҙ.Ҡайғылы кешеләр алдында көлмәгеҙ, шатлыҡлы әҙәмдәрҙең йөҙөнә хәсрәт менән ҡарамағыҙ. Хәсрәтленең хәсрәттәрен еңеләйтерлек рәүештә булығыҙ.

● Иптәштәрегеҙ менән бергә булғанда уларға хуш йөҙлө булығыҙ. Уларҙың күңелен ебәрерлек рәүештә ҡара йөҙ менән тормағыҙ. Мәжлес һәм туйҙа булғанда һәр кемгә асыҡ йөҙ күрһәтегеҙ, ләкин артыҡ көлмәгеҙ, етди һәм сабырлы булығыҙ.

● Күҙегеҙгә зарар булмаһын өсөн артыҡ яҡты һәм нескә нәмәләргә, аҡ һәм ҡыҙыл төҫтәргә оҙаҡ ҡарап тормағыҙ. Күҙ өсөн зарарһыҙ төҫтәр - йәшел һәм күк төҫтәр.

● Йөҙөгөҙҙө саф һәм һабынлы һалҡын һыу менән һәр ваҡыт йыуығыҙ. Ләкин матурланыу өсөн биҙәнгес, ирендәргә ҡыҙыл, ҡаштарға ҡара һөртмәгеҙ. Аллаһы Тәғәлә яратҡан ағзаларығыҙҙы шәриғәт бойормаған рәүештә боҙмағыҙ. Улар иһә тәрбиәһеҙлек һәм түбән холоҡлолоҡто күрһәтә.

● Биттәрен һәм ҡулдарын буяған ҡатындарҙы күрһәгеҙ, ни ҡәҙәр ҡыҙыҡлы һәм көлкөлө булһа ла сабыр итегеҙ, көлмәгеҙ. Тәрбиәһеҙлектәре өсөн үкенегеҙ, ҡайғырығыҙ.

### Ауыҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Тештәрегеҙ менән тырнаҡтарығыҙҙы өҙмәгеҙ, телегеҙ менән ирендәрегеҙҙе яламағыҙ. Һөйләшкәндә ауыҙығыҙҙан төкөрөк сәсмәгеҙ. Халыҡ алдында иҫнәмәгеҙ, кикермәгеҙ, сәскермәгеҙ. Иҫнәгәндә һәм йүтәлләгәндә һөйләшмәгеҙ, яулыҡ менән ауыҙығыҙҙы ҡаплағыҙ һәм сит яҡҡа башығыҙҙы бороғоҙ. Йүтәл һәм иҫнәү ҡат-ҡат булһа, халыҡтың күңелен боҙмаҫ өсөн мәжлестән сығып тороғоҙ.

(Дауамы бар).

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

**Һеҙҙең иғтибарға - "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2010" төбәк-ара конкурсында ҡатнашып, "Йөрәгемде балаларға бирәм" номинацияһында еңеп сығыусы Стәрлебаш районы Беренсе Май урта мәктәбе уҡытыусыһы Гөлнара Бәхтейәрованың педагогик фәлсәфәһе.**

# МӨХӘММӘТ ТАУҒА БАРМАҺА...

## тау Мөхәммәткә килһен

(ПЕДАГОГИК ФӘЛСӘФӘ)

### Ситтән ҡарағанда...

Иген баҫыуҙарын тулҡытып ел иҫә, ул туҡ башаҡтар еҫен килтерә. Күктә өҙҙөрөп һабан турғайы һайрай. Ә мәктәптә был осорҙа бала-саға тауышы яңғырай. Ҡайны бер уҡыусылар был саҡта донъяһын онотоп китап уҡый. Күрше бүлмәлә дәрес бара. Башҡорт әҙәбиәте дәресе. Уҡытыусының ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙҙе уҡыусылар ҡыҙыҡһынып, йотлоғоп тыңлай, белем орлоғо йыя. Шылт иткән дә тауыш юҡ, бары тынлыҡты уҡытыусының тауышы ғына боҙа.

Ситтән ҡарап торһаң, был күренеш - тамаша, тамашаға күҙҙәр ҡамаша. Дөрөҫөн әйткәндә, ситтән күҙәткәнгә генә тамашалай тойола ул. Ә ысынында иһә, ошондай тынлыҡҡа яҡын торған, камил, гармониялы күренешкә уҡытыусының, мәктәп коллективының, уҡыу программаларын һәм дәреслектәрҙе төҙөүсе ғалимдарҙың күпме аң, зиһен көсөргәнеше, оҙайлы йылдарға һуҙылған тынғыһыҙ хеҙмәте, йоҡоһоҙ төндәре һалынған.

Ситтән ҡарап, күптәр уҡытыусы хеҙмәтен еңел һөнәр тип баһалай. Имеш, саң йоторға, ауырлыҡ күтәрергә түгел. Әммә иңгә төшкән ауырлыҡ менән күңелгә, ихтыярға төшкәнде сағыштырырлыҡ та түгел шул. Икенсенән, күпте белгән, тәжрибәле уҡытыусы булып етеү өсөн күпме китап саңы йоторға кәрәк әле. Улай ғына түгел, ата-әсәләрҙең күп ваҡытын донъя хәстәренә бүлеүе арҡаһында уларҙың балалары мәктәп мөхитендә йәшәй, һәм уларҙың "саңын" ҡағып йотоусы ла шул уҡ уҡытыусы. Ярай әле, совет осоро мәктәбенең оло бер ҡаҙанышы - уҡытыусы энтузиазмы бар. Ә бына башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына килгәндә, улар икеләтә энтузиазм менән эшләргә, йәшәргә тейеш, сөнки...

### Сөнки...

Бөгөнгө уҡыусының аҙ һәм теләкһеҙ уҡыуы, тел, әҙәбиәт менән артыҡ мауыҡмауы бер кемгә лә сер түгел. Телевидение, компьютер, кеҫә телефоны, зауыҡһыҙ мәҙәниәт бала күңеленән шиғриәтте, халҡыбыҙ моңдарын ҡыҫырыҡлап сығара бара. Әҙәбиәт тә, әлбиттә, донъяуи мәсьәләләр төйөнөн сисмәй, әммә һүҙ сәнғәте өлгөһө булараҡ, кешегә тәьҫир итмәй ҡалмай. Әгәр ҙә уҡыусы туған телендәге аҡыллы, фәһемле китап менән осрашҡандан һуң саҡ ҡына булһа ла игелеклерәк, миһырбанлыраҡ булһа, уны уратып алған донъяның да яҡтыраҡ булыры бәхәсһеҙ. Һәр бер баланың күңеленә аҙ-аҙ ғына булһа ла нур көлтәһе, яҡтылыҡ шәлкеме һала алһаҡ, улар ҡасандыр килеп үҙ эшен эшләйәсәк, ҡояш булып балҡыясаҡ.

Шул уҡ ваҡытта телевизорға, компьютерға текәлгән, кеҫә телефоны менән уйнаған баланы замандың ошондай әүрәткестәренән айырыу мөмкинме һәм был кәрәкме һуң? Ярай, уларҙы тыйыу һәм ҡурҡытыу юлы менән әүрәткестәрҙән айырып, ҡулдарына үҙ телебеҙҙәге китапты тоттороп ултыртып та ҡуйҙыҡ, ти. Әммә "Көслөп асҡан күҙҙең нуры булмай", тигән һымаҡ, тәрбиәләүҙең был ысулы балаларҙың күңелендә телебеҙгә һәм әҙәбиәтебеҙгә ҡарата нәфрәт һәм ытырғаныу тойғоһо тәрбиәләйәсәк. Ни эшләргә ҡала һуң? Ошо урында "Мөхәммәт тауға бармаһа, тау Мөхәммәткә килһен", - тигән һүҙҙәр иҫкә килеп төшә. Йәғни телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә, тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һөйөү хисен башта беҙ һанап киткән әүрәткестәрҙең эсенә индереп була лаһа. Әлбиттә, телевидение, радио тапшырыуҙарын беҙҙең ерлеккә тап килтереүҙә уҡытыусы бер ни эшләй алмай, әммә зауыҡлы һәм еңел-елпе фекерләүгә өйрәтеүсе компьютер программаларын беҙҙең ерлеккә тап килтереүҙә уҡытыусы күпте эшләй ала. Хәҙер инде ауыл ерендәге уҡыусы балалар ҙа Интернет селтәре аша аралаша. Асылда, унда балалар юҡ-бар яҙыша, рух, белем үҫешенә булышлыҡ итмәгән темалар буйынса бәхәсләшә. Бәй, был урында уҡытыусы уҡыусыларҙың заманса ошо аралашыуы менән етәкселек итә ала лаһа. Нисекме? Тәрлә донъяуи йәки дәрес программаларына ярашлы бәхәстәргә, диспуттарға нигеҙ булырлыҡ фәһемле темалар тәҡдим итеп. Әйткәндәй, уҡыусылар күмәкләп Интернет аша берәр хикәйә йә башҡа төрлө әҙәби әҫәр ҙә яҙа ала. Әҫәрҙе бер уҡыусы яҙа башлай ҙа, икенсеһе дауам итә.

### Уҡыусыны алдап булмай

Хәҙерге башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының милли сәйәсәткә ҡарата үҙ ҡарашы, әүҙем позицияһы булыуы фарыҙ. Әгәр ҙә ошолар булмаһа, программа буйынса ғына әҙәби әҫәрҙәр уҡытып, әллә ни эш ҡырып булмаясаҡ. Сөнки мәктәпте тамамлаған башҡорт үҫмере артабан ниндәй генә һөнәр һайлаһа ла, милләт идеяһы менән йәшәргә, үҙе ғаилә ҡорғанда ла, балалар үҫтергәндә лә милләт принцибына тоғро ҡалырға тейеш. Минең педагогик фәлсәфәмдең төп йүнәлеше бына ошоға ҡайтып ҡала. Икенсенән, заманса әҙәбиәт дәресе - фекер һәм тойғо дәресе, рухи хеҙмәтте камиллаштырыу, эстетика, белемде камиллаштырыу дәресе. Ғөмүмән, хәҙерге заман уҡыусыһын ялған идеялар менән алдау мөмкин түгел. Уҡыусы һинең бер тапҡыр алдашҡаныңды белеп ҡалһа, бүтәнсә һиңә ышанмаясаҡ һәм һин уның күҙ алдында уҡытыусы булыуҙан туҡтаясаҡһың.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы ғына түгел - милләт уҡытыусыһы ла. Бөгөнгө заманда милли фәлсәфә нигеҙҙәрен яҡшы белгән, үҙен быуат хужаһы итеп тойорҙай ғилемле, күңелендә халыҡ ижады гәүһәрҙәренә һәм шиғриәткә һөйөү йөрөткән бай рухлы шәхес тәрбиәләргә тейеш башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Әҙәбиәт уҡытыусыһы милли рух, күңел байлығы тәрбиәләй алһа, ул уҡыусылары күңелендә ҙур шәм яндыра ала, тигән һүҙ. Фекеремде түбәндәге юлдар менән тамамлайым:

Дәрес бара - күренмәҫ еп менән
Йөрәктәргә йылы бирәмен.
Бер бала ла иғтибарһыҙ ҡалмай
Һәр береһен яҡын күрәмен.
Алда мине бөйөк эштәр көтә,
Бараһы ла әле бараһы.
Йәшәүемдең оло мәғәнәһе -
Мәктәп менән өйөм араһы.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АЛЛА МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

Мин төшөмдә Алла менән һөйләштем. "Һинең минең менән һөйләшкең киләме?" тип һораны ул. "Эйе, әгәр ҙә ваҡытың булһа", - тинем мин.

Алла йылмайҙы: "Минең ваҡытым мәңгелек,- тип яуап бирҙе ул.- Һин миңә ниндәй һорауҙар бирергә теләгән инең?"

- Һине кешеләге ниндәй һыҙаттар аптырата?

- Кешеләр балалыҡтан тиҙерәк сығып, өлкәнәйергә ашыға, ә аҙаҡ йәнә балалыҡҡа ҡайтырға хыялана.

- Башта аҡса эшләр өсөн һаулыҡтарын юғалталар, ә аҙаҡ һаулыҡты кире ҡайтарыр өсөн күп аҡса исраф итәләр.

- Улар киләсәк тураһында шул тиклем күп уйлайҙар, хатта хәҙергеһен онотолар. Шулай итеп, хәҙергеһендә лә, үткәнендә лә йәшәмәйҙәр.

- Кешеләр бер ҡасан да үлмәҫ кеше кеүек йәшәйҙәр, ә үлгәндә бөтөнләй йәшәмәгән кеүек үләләр,- тип яуап бирҙе Алла.

Мине ҡулдарымдан алды һәм беҙ бер аҙға тынып ҡалдыҡ. Һуңынан мин Унан:

- Атай булараҡ, балаларыңдың ниндәй тормош һабаҡтарына өйрәнеүен теләр инең?- тип һораным. Уның яуаптары ошолай булды:

- Белһендәр ине - бер кемдән дә үҙенде көсләп яраттырып булмай. Кеше үҙен яраттырырға рөхсәт итә генә ала.

- Үҙенде башҡалар менән сағыштырыу ҙа яҡшы эш түгел.

- Ғәфү итергә өйрәнеү мөһим.

- Хәтерҙәренән сығармаһындар ине - яратҡан кешеңдең күңелен яралау бер секунд ҡына ваҡыт ала, ә шул яраны дауалау күп йылдарға һуҙылырға мөмкин.

- Аңлаһындар ине - кемдең аҡсаһы күп - шул бай түгел, кемдең мохтажлығы аҙ, шул бай.

- Һәр кешене яратыусы була, тик уларҙың ҡайны берәүҙәре үҙ тойғоларын әйтә генә белмәй.

- Ике кеше бер үк нәмәгә ҡарап, төрлө әйбер күрә ала.

- Бер-берегеҙ генә ғәфү итергә түгел, ә үҙенде ғәфү итергә өйрәнергә кәрәк.

- Миңә бүлгән ваҡытың өсөн, рәхмәт,- тинем мин ҡыйыуһыҙ ғына. -Үҙ балаларыңа тағы ла нимәләр әйтергә теләр инең?

Алла йылмайҙы ла:

- Белһендәр, мин һәр ваҡытта ла улар менән! - тип яуап бирҙе.

**Миләүшә ҒӘЙФУЛЛИНА.**

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

# МИЛЛИ ҮҘАҢ...

## туған телде һәм халыҡ тарихын өйрәнеүҙән башлана




**XX быуатты башҡорт халҡының урбанизация йоғонтоһона бирелеү, йәғни ауылдарҙан ҡалаларға күсеү осоро, тип атарға була. Бөгөн республикабыҙҙа йәшәүсе башҡорттарҙың 42 проценттан ашыуы ҡалала төпләнгән. Ҡала мөхитенең башҡорт мәҙәниәте, мәғарифы һәм фәне үсешендәге әһәмиәтен инҡар итеп булмай, әммә уның милли сифаттарыбыҙға кире йоғонто яһауы ла билдәле. Тап шуның өсөн ҡала башҡорттары проблемаларын ғилми нигеҙҙә өйрәнеү маҡсатында ғилми-ғәмәли конференциялар уҙғарыу фәһемле традицияға әйләнде. III Бөтөн донъя ҡоролтайы алдынан ойошторолған VI Төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция "Ҡала башҡорттары: тел һәм демография мәсьәләләре" тип атала. Ошо сараның Октябрьский ҡалаһында уҙғарылыуы ла тиккә түгел: республикабыҙҙың был төбәгендә көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары көн итә, ә уларҙың байтағы ошо яҡтың Бәләбәй, Дүртөйлө, Туймазы, Нефтекама, Бөрө, Яңауыл ҡалаларында йәшәй. Дәүләт һәм муниципаль власть органдары булышлығында РФА Өфө ғилми үҙәге, РФА ӨҒҮ-нең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты менән берлектә ойошторған сарала байтаҡ ҡына ғалимдарыбыҙ, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, уҡытыусылар һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Конференцияла яңғыраған ғилми докладтар һәм сығыштар ошо төбәктең милли мәғарифын, мәҙәниәтен үҫтереү, милләттәштәребеҙҙең милли үҙаңын һәм үҙбилдәләнешен тергеҙеү йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә. Ойоштороусыларҙың әүҙемлеге менән тиҙ арала ошо конференция материалдарының айырым ғилми йыйынтыҡ рәүешендә баҫылып сығыуы ла хуплауға лайыҡ. Һеҙҙең иғтибарығыҙға ғилми хеҙмәткәр Закирйән ӘМИНЕВтың ошо йыйынтыҡҡа индерелгән сығышын тәҡдим итәбеҙ.**

Совет власы урынлаштырылғандан һуң Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ көнбайыш райондары башҡорттары оҙаҡ йылдар буйы татар телендә уҡытыла. Бының сәбәптәрен төрки телле ике туғандаш халыҡтың тарихи үткәненән эҙләргә кәрәк. Революцияға тиклем башҡорт һәм татарҙар өсөн уртаҡ булған яҙма әҙәби тел - Волга буйы-Урал төрки теле ҡулланыла.

XX быуат башындағы революциянан һуң башҡорттар кисекмәҫтән яңы Рәсәй шарттарында үҙ милли автоном дәүләтселегеөсөн көрәшкә сыға. Үҙ дәүләтселегенә өлгәшкән халҡыбыҙ алдында башҡорт әҙәби телен булдырыу мәсьәләһе лә килеп тыуа. Әҙәби телдең ниндәйерәк буласағы хаҡында фекер алышыу барған осорҙа ҡайһы бер татар зыялылары башҡорттарҙың бары тик татар халҡының бер өлөшө булып, уларҙың теленең дә татар теле диалекты булыуы хаҡындағы уйҙырмаларын өҫкә сығарырға маташты. Бындай шарттарҙа башҡорт зыялылары араһында әҙәби телебеҙгә нигеҙ итеп татар теленән иң ныҡ айырылып торған диалектты тәҡдим итеүселәр еңеп сыҡты. Шуға күрә ул саҡтағы "төрки" әҙәби теленә яҡыныраҡ булған үҙенсәлектәре булыуы арҡаһында көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалекты дөйөм башҡорт әҙәби теленән ситтә ҡалды. Үҙҙәренең башҡорт сығышлы икәнен таныпы, башҡорт милли үҙаңын һаҡлаған осраҡта ла, көнбайыш башҡорттарын татарса уҡытыу эҙһеҙ үтмәне. Уларҙың бер өлөшө аҡрынлап милли үҙаңын юғалта барып, үҙҙәрен татарҙар составында күрһәтә башланы. Шуның өсөн XX быуаттың 70-се йылдарында ошо яҡ райондары мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу индерелә.

Ваҡытында миңә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында байтаҡ ҡына йәшәргә тура килде, һәм был яҡ башҡорттарының үҙҙәренең милли үҙаңын һаҡлап ҡалыуы тураһында бик нигеҙле итеп әйтә алам. Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе лә миңә яҡшы таныш. Күрше Татарстан Республикаһының бар нәмәне лә кәрәгенән артыҡ кимәлдә сәйәсиләштереп ҡараған ҡайһы бер тикшеренеүселәренең был райондарҙа башҡорттар йәшәүен инҡар итеүенә ҡарамаҫтан, был мәсьәләлә айыҡ ғилми ҡараш өҫтөнлөк ала. Шул уҡ Татарстандың объектив ҡарашлы ғалимдары көнбайыш башҡорттарының әсә башҡорт этносына ҡарауын таный. Мәҫәлән, Мәскәүҙә "Халыҡтар һәм мәҙәниәт" серияһында баҫылып сыҡҡан "Татарҙар" китабы авторҙары был төбәктә борондан уҡ татарҙар менән башҡорттарҙың йәнәш йәшәүе һәм һуңғыларының милли үҙаңы бер ни тиклем эрозияға бирелеүенә ҡарамаҫтан, тотороҡло рәүештә һаҡланып ҡалып, бындағы башҡорттарҙың ассимиляцияға бирелгәнлеге тураһында һөйләү иртәрәк әле, тип белдерә.

Йәш быуынға туған халҡының тарихын өйрәтеү барышында ғына әсә теленә һөйөү тәрбиәләп була. Башҡорт халҡының бай һәм ҡатмарлы тарихы менән тығыҙ бәйләнеш булмаған осраҡта туған телде уҡытыуҙы ла бар тулылығында ғәмәлгә ашырып булмаясаҡ. Көнбайыш башҡорттарының милли үҙаңын тап ошо ҡағиҙәне үтәгән осраҡта ғына тулыһынса тергеҙеп буласаҡ.

Көнбайыш башҡорттары вәкилдәре башҡорт тарихының бөтә дәүерҙәрендә лә дөйөм милләт эштәрендә бик әүҙем ҡатнашып килә. Байтаҡ ҡына башҡорт ихтилалдары көнбайыш райондарҙа башланып китә. Арҙаҡлы мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдинов, тарихсы Морат Рәмзи, шағир Шәйехзада Бабич, яҙыусылар Фазыл Туйкин, Афзал Таһиров, Назар Нәжми, башҡа билдәле фән һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре көнбайыш башҡорттары араһынан сыҡҡан. Ошондай легендар шәхестәрҙең тормошон һәм ижадын өйрәнеү уҡыусыларҙа үҙҙәренең яҡташтары менән ғорурлыҡ тойғоһо уятһа, ата-бабаларҙың данлы тарихын белеү уларҙа үҙ халҡына ҡарата ихтирам һәм ватансыллыҡ тойғолары тәрбиәләү мөмкинлеген бирә. Үҙ халҡының тарихын белеү шәхестең эске донъяһын байытып, уның рухи таянысына әйләнә. Бындай кешелә үҙ милләтенән кәмһенеү тойғоһо барлыҡҡа килмәйәсәк, һәм унда башҡа милләткә күсеү теләге бер ҡасан да булмаясаҡ.

Көнбайыш райондарында башҡорт телен уҡытыу дөйөм башҡорт тарихын тәрәнәйтеп өйрәнеү менән ҡуша барырға тейеш. Уҡытыу-тәрбиә процесында көнбайыш башҡорттарының башҡорт донъяһында тотҡан урынын, уларҙың азатлыҡ хәрәкәтендәге ролен айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алыу зарур. Һәр ауылдың, ырыуҙың үҙ батырҙары булған, уларҙың байтағы Рәсәй кимәлендә билдәле булып, исемдәре һәм ғәмәлдәре тарихи сығанаҡтарҙа теркәлеп ҡалған. Йәштәрҙе бына ошондай тарихи материалдар менән таныштырыу уларҙың милли үҙаңын формалаштырыуға ярҙам итәсәк.

Тарихтан да йоғонтолораҡ тәрбиәсене табыуы ҡыйын. Тарихи хәтер аша милләттең ваҡыттар арауығындағы бөтөнлөгө хасил була. Замандаштарыбыҙҙың үҙ халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә мөнәсәбәте аша күп үлсәмле ысын мәҙәни мөхит барлыҡҡа килә. Кеше үҙенең хәҙерге ваҡытта тупланған тәжрибәһе менән генә йәшәй алмай. Һәр милләттең һәм уның айырым вәкилдәренең тарихи үҙаңы заман һәм быуындар бәйләнешен тәьмин итә. Киләсәкте күҙаллар өсөн үткәндәргә ҡараш ташлау фарыз. "Йәмғиәт үҫеше ҡанундарын аңлау, ватан яҙмышын үҙендеке һымаҡ кисерә алыу, уның өсөн үҙенә яуаплылыҡ алыу һәм үҙ ғәмәлдәрендә иң әүәл уның аша баһалау - "тарих асылы", тарихи үҙандың тәғәйенләнеше бына ошола", - тип яҙҙы билдәле рус философы һәм әҙәбиәт белгесе А. В. Гулыга.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙ, башҡорттар, үҙ тарихыбыҙҙы төплө беләбеҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Был бигерәк тә күп ваҡыттар дауамында татарса уҡытылып, үҙенең килеп сығышын күрше республика халҡы тарихы менән бәйләп ҡабул итә башлаған көнбайыш башҡорттарына ныҡ ҡағыла. Тап ошо сәбәп тарихи тамырҙарҙы юғалтыуға килтерә лә инде. Беҙҙең тарихсы-ғалимдарыбыҙ был юҫыҡта эш алып бармай, тип әйтеп булмай, әммә уларҙың бик аҙ тираж менән баҫылып сыҡҡан ғилми хеҙмәттәре был төбәктә йәшәүсе милләттәштәребеҙгә барып етмәй. Шул уҡ ваҡытта үҙенең ысын милли тарихынан йыраҡая барып, объектив мәғлүмәткә эйә булмаған кешенең башҡорт телен аңлы рәүештә өйрәнергә ынтылыуына өлгәшеү мөмкин булмаясаҡ.

Ниндәйҙер ғәмәлдәргә тотоноу алдынан кеше үҙ алдына билдәле бер маҡсат ҡуя. Үҙҙәре һөйләшкән диалект әҙәби башҡорт теленән ныҡ ҡына айырылып торғанлыҡтан, көнбайыш райондарҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙ алдында ла уларға үҙ аллы хәл итеүе ҡыйыныраҡ булған һорауҙар килеп тыуа. Башлыса, улар "Беҙ кем?", "Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ысынлап та башҡорт булғанмы?" тигәнгә ҡайтып ҡала. Ошо һорауҙарға тарихи яҡтан нигеҙле һәм объектив яуап таба алмағандар башҡорт телен өйрәнеүҙе лә үҙ маҡсаты итеп ҡабул итмәйәсәк. Тимәк, ошо төбәктә башҡорт телен уҡытыу башҡорт халҡының тарихын өйрәтеүҙе тулы кимәлдә алып барған осраҡта ғына уңышлы буласаҡ.

Тарихтан билдәле булыуынса, был төбәк башҡорттарының этник сығышы тураһында уларҙың ата-бабалары ла, күрше йәшәгән халыҡтар ҙа яҡшы белгән. Татарстандың билдәле тарихсыһы Н. И. Воробьевтың 1947 йылда "Советская этнография" журналында баҫылған мәҡәләһендә бына ниҙәр бәйән ителә: "ТАССР территорияһының Зәй һәм Ыҡ йылғалары араһында урынлашҡан, экспедиция маршруты үткән бер өлөшө Ҡаҙан татарҙары йәшәгән боронғо район сиктәренән ситтә ятҡанлыҡтан, ундағы халыҡтың көнкүрешен өйрәнеүҙән тыш, был территорияға татарҙарҙың күсеп килеүе менән бәйле һорауҙарҙы асыҡлау кәрәк булды. Был урманлы-далалы ерҙәрҙә борон-борондан башҡорттар йәшәгән. Был турала тарихи документтарҙан да, халыҡ риүәйәттәренән дә билдәле. Байтаҡ ҡына ауылдарҙың (Һарайлы, Ҡарамалы, Ҡараҡашлы һ. б.) халҡы хәҙер ҙә үҙҙәрен сығышы буйынса башҡорт, тип иҫәпләй, күп кенә башҡа ауылдарҙа халыҡтың бер өлөшөнөң ата-бабалары башҡорттарҙан булыуы билдәле. Йыш ҡына был төбәк башҡорттарының бик ҙур майҙанда ер биләүе тураһында һөйләйҙәр. Мәҫәлән, Һарайлы ауылы кешеләренең ата-бабалары биләгән ерҙәрҙең Камаға тиклем етеүе, йәғни 100 саҡрымға тиклем арауыҡта урынлашыуы тураһында риүәйәт бар. Ҡаҙан ханлығын Мәскәү дәүләтенә ҡушҡандан һуң был район Ҡаҙан һәм Кама буйындағы (Каманан төньяҡҡа табан) ерле халыҡтың суҡындырыуҙан һәм урыҫлаштырыуҙан ҡасып килеү урынына әйләнә. Тәүҙәрәк был күсеш стихиялы рәүештә бара. Урыҫ булмаған халыҡтарҙың төньяҡ-көнбайыштан ҡасып киткән, бер нисә ғаиләнән торған ҙур булмаған төркөмдәре - йә үҙ белдеге менән, йә булмаһа ошо ерҙәрҙең хужалары булған башҡорттар менән килешеү нигеҙендә - урмандар араһына килеп төпләнә".

Туған телде, туған тарихты уҡытыу системалы һәм бер өҙлөкһөҙ барған осраҡта ғына уңышҡа өлгәшеү мөмкин. Урыҡ-һурыҡ ҡына бирелгән мәғлүмәт тиҙ онотоласаҡ. Айырым-айырым һәм ҡыҫҡа ваҡытлы, кампания форматында уҙғарылған сараларҙан фәтеүә юҡ. Татар телендә сыҡҡан "Кызыл таң" һәм "Өмет" баҫмаларында, шулай уҡ урындарҙағы район гәзиттәрендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тарихына һәм уларҙың бында күсеп килеүсе төрлө милләт кешеләре менән мөнәсәбәттәренә арналған мәҡәләләрҙең даими рәүештә баҫылып тороуы мотлаҡ. Көнбайыш райондары ауылдары тарихы буйынса радио һәм телевидение тапшырыуҙары бик йоғонтоло. Был материалдарҙа ошо төбәктең тыуған төйәкте өйрәнеүселәренең фекере сағылыш тапһа, ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең милли үҙаңын тергеҙеү йәһәтенән бик отошло ла, ышаныслы ла буласаҡ.

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа үҙ нәҫел-нәсәбеңдең килеп сығышын өйрәнеп, шул нигеҙҙә нәҫел шәжәрәләрен төҙөү эше киң ҡолас алды. Был изге ынтылыш йәшәйешебеҙҙең тарихи сылбырын ялғап, үҙ ата-бабаларының бөгөнгө вариҫтары булған милләттәштәребеҙҙең милли үҙаңын яңыртып, быуындар араһындағы күсәгилешлекте киләсәккә йүнәлтеү мөмкинлеген аса. Шулай итеп, барса милләттәштәребеҙҙең туған телен, милләт, ырыу һәм нәҫел тарихын системалы һәм даими өйрәнә алыуы башҡорт халҡының берҙәмлеген һәм бөтөнлөгөн тәьмин итеүсе төп фактор булып тора.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы планына ярашлы, "Милли матбуғат яңы тарихи шарттарҙа: перспективалар һәм үҫеш" секцияһында республикабыҙҙың башҡорт баҫмаларының хәҙерге торошо, бурыстары, халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереүҙә һәм әүҙем тормош позицияһын булдырыуҙағы роле тураһында эшлекле фекер алышыу ҡаралған. Ошо көндәрҙә "Киске Өфө" гәзите башланғысы менән ҡоролтайҙың матбуғат секцияһы эшендә ҡараласаҡ мөһим мәсьәләләр буйынса бер төркөм ғалимдар, журналистар һәм урындарҙағы ҡоролтай ағзалары ҡатнашлығында түңәрәк ҡор уҙғарылды. Милли матбуғат мәсьәләләре буйынса һөйләшеүҙә яҙыусы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Рәшит Шәкүр, ошо уҡыу йорто ғалимдары Зәки Әлибаев, Луиза Сәмситова, "Тамаша" журналының баш мөхәррире Фәнил Ҡоҙаҡаев, "Ағиҙел" журналының бүлек мөдире Фәнил Күзбәков, "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Дәүләтбәков, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хеҙмәткәре Рәмил Рәхмәтов, шулай уҡ Иглин, Благовещен, Ҡырмыҫҡалы, Аҫҡын район гәзиттәре мөхәррирҙәре Радик Таһиров, Лира Батыргәрәева, Эльза Саттарова, Илмира Ғәлиәхмәтова, Фәйрүзә Юнысова һәм "Киске Өфө"гәзите журналистары ҡатнашты.**

# Милләттең

## йәки Башҡорт матбуғаты



**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Милли матбуғатты халыҡ тормошонан айырып ҡарап булмай. Башҡорттар бик киң географик арауыҡта таралып йәшәй, һәм милләтебеҙҙең бөгөнгө хәл-торошон, уй-фекерҙәрен, төрлө хәл-ваҡиғаларға ҡарашын, матди һәм рухи ихтыяждарын беҙ милли матбуғат баҫмалары аша һәр кемгә еткерә алырға тейешбеҙ. Тормошобоҙ бик йылдам үҙгәреп, яңынан-яңы сәйәси, иҡтисади һәм рухи-әхлаҡи проблемалар береһе артынан береһе тыуып ҡына тора. Үҙгәрештәр заманында матбуғат саралары совет дәүерендә һәм унан аҙаҡҡы йылдарҙа тупланған тәжрибәгә таянып ҡына үҫешә алмай. Гәзит-журналдарыбыҙҙы элеккесә сығарыуҙы дауам итһәк, уҡыусыларыбыҙҙың йөрәгенә барып етерҙәй мәҡәләләр баҫмаһаҡ, беҙҙең бер кемгә лә кәрәгебеҙ ҡалмаясаҡ. Ҡайһы бер гәзиттәрҙе иғландар таҡтаһына оҡшатам: кешенең аҡылына, хис-кисерештәренә һис бер ыңғай йоғонто яһарлыҡ булмаған ҡоро һәм ваҡ мәғлүмәттәр йыйылмаһынан ғибәрәт улар. Ә оператив мәғлүмәтте хәҙер радио һәм телевидение аша ғына түгел, интернет селтәренән дә бик тиҙ табып була. Шуға күрә ваҡытлы матбуғатты мәғлүмәт сараһы итеп кенә ҡарау дөрөҫ түгел. Милли матбуғатта, ғөмүмән, киң матбуғат сараларында үҙгәрештәр барамы, улар ниндәй форматта булып, баҫмаларыбыҙҙың йөкмәткеһенә ниндәй яңылыҡтар индерелә - беҙ иң әүәл ошо проблемаларға иғтибар итергә тейешбеҙ, тип уйлайым.

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ:** Матбуғаттағы үҙгәрештәр тураһында һүҙ һөйләр алдынан үҙебеҙҙең фекерләү йүнәлешен үҙгәртә алыу мотлаҡ. Ҡоролтайыбыҙҙың һуңғы киңәйтелгән ултырышында ла, башлыса, элегерәк нисек фекер йөрөтһәк, шул уҡ бер нәмәләрҙе ҡабатлау өҫтөнлөк итте. Ошо рәүешле фекер алышыуҙың һөҙөмтәһе ҙур булмаясаҡ. Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы ултырышында альтернатив матбуғат сараларын булдырыу мәсьәләһе лә тикте юҡҡа ғына күтәрелмәгәндер, минеңсә. Унан һуң, ошо һөйләшеүгә йыйылыу журналистарыбыҙҙың хәҙерге матбуғат проблемаларына ҡарашын асыҡлау өсөн дә кәрәк булды. Ә проблемалар, хәл итә торған мәсьәләләр етерлек. Был матбуғат сараларының матди-техник базаһына ла, кадрҙар әҙерләүгә лә, журналистарҙы матди яҡтан тәьмин итеү һәм социаль яҡлауға ла берҙәй ҡағыла. Журналистарҙың тығыҙ хеҙмәттәшлегенә һәм теләктәшлегенә өлгәшеү, уларҙың урындағы үҙидара һәм власть органдары менән мөнәсәбәттәрен көйләү - был юҫыҡта ла ҡоролтай трибунаһына сығара торған көнүҙәк мәсьәләләр етерлек. Иң мөһиме - тейешле урынында объектив тәнҡит һүҙенән тайпылмау, үҙ фекеребеҙҙе һәм ҡарашыбыҙҙы йәмәғәтселеккә лә, етәксе органдарға ла еткерә алыу кәрәк.

**Рәшит ШӘКҮР:** Альтернатив матбуғат тигән һүҙгә ҙур йөкмәтке һалынған. Әлеге ваҡытта беҙҙең ҡыйыуыраҡ йәштәр уны әҙме-күпме тулыландырыу маҡсатын үтәй. Хәл ителмәгән мәсьәләләребеҙҙе төптән уйлап, нигеҙле итеп үҙ алдыбыҙға ҡуя белмәү проблемаһы ул. Проблеманы ҡуйырға мөмкин, ләкин мәсьәлә бит уны ихтыяж кимәленә еткереп билдәләүҙән, йәғни, ғилми нигеҙле итеп күрһәтә һәм хәл итә алыуҙан тора. Хәҙерге заманда бер генә проблема ла үҙ-ара һөйләшеү кимәлендә генә яҡтыртыла алмай, һәр бер проблеманы тәрәндән өйрәнергә кәрәк. Был йәһәттән йәмәғәтселек вәкилдәре, зыялылар ярҙамға килә. "Киске Өфө"нөң һуңғы һанында сыҡҡан монолог - ҡабат-ҡабат уҡып сығырлыҡ материал ул. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының фекерле, илһөйәр, аңы уянған кешеһе, билдәле архитектор Рудоль Әүсәхов әйткән һүҙ беҙҙең өсөн айырыуса ҡиммәт. Ошо сығышта электән ситтә ҡалдырыла килеп, ассимиляцияға бирелгән халҡыбыҙҙың бер өлөшөнөң яҙмышы хаҡында бик ҡиммәтле мәғлүмәт сағыла. Журналист әңгәмәсеһе менән һөйләшә белгән, уны үҙенең авторҙашы итә алған - әлеге гәзит материалының төп ҡиммәте бына шунда. Телевидениела йыш ҡына һөйләүсенең иң мөһим һәм әңгәмә асылына тура килгән һүҙен әйтер мәле етһә, бүлдерәләр ҙә ҡуялар. Журналистың ошо проблема буйынса концепцияһы хатта әңгәмәләшкән кеше кимәленә лә етмәй, ул бирер һорауын алдан механик рәүештә уйлап ултыра, респондентты тыңламай, әңгәмә ағышын тоймай. Ә күпме файҙалы һүҙ әйтелмәй ҡала. Тапшырыуҙарҙан, яҙылған мәҡәләнән журналистың белеме күренә. Журналист бик белемле, ҡыҙыҡһыныусан кеше булырға тейеш. Ул беҙҙең бөгөнгө фәнде, ғилемде, ижтимағи тормош проблемаларын белеп йәшәргә тейеш.

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ:** Журналист эшендә махсуслашыу мотлаҡ булырға тейеш. Әгәр ниндәйҙер теманы матбуғатта уның бар тәрәнлегендә асырға теләйһең икән, уны төрлө яҡлап өйрәнеү фарыз. Был йәһәттән "Киске Өфө" журналистарына һүҙ тейҙерерлек түгел, улар үҙҙәре яҡтыртҡан проблемаларҙы белеп эш итә. Әммә тағы ла бер дөйөм етешһеҙлегебеҙ бар: радио-телевидение булһынмы, гәзит-журналдармы - бер үк кешеләрҙең сығыш яһауына шаһитбыҙ. Улар - арҙаҡлы һәм киң мәғлүмәтле заттар, тик башҡа авторҙарҙы табыу, уларҙы йәмғиәт аренаһына сығарыу тураһында ла уйланырға урын бар.

**Рәшит ШӘКҮР:** Журналистың донъяға ҡарашы киң булмаһа, махсуслашыу ғына уны үҙ һөнәренең оҫтаһы итә аламы икән, тип шикләнеп тә ҡуяһың. Ҡайһы бер журналистар беҙҙең ҡул өҫтөндә генә ятҡан хеҙмәттәребеҙҙе, фәнебеҙҙе белмәй. Фәнде белмәгәс, нисек итеп һин үҙ халҡыңдың яҙмышы тураһында фекер йөрөтә алаһың? Журналист ниндәйҙер теманы алғас, уны өйрәнергә, айышына төшөнөргә һәм ысынбарлыҡтағыса яҡтырта алырға тейеш.

Беҙ, ғалимдар, шулай уҡ халыҡ араһында йөрөп, экспедицияларға сығып, үҙебеҙгә кәрәкле материал йыябыҙ. Билдәле этнограф Рәил Кузеев: "Ғалим экспедицияла нимә табырға теләй, шуны таба ла инде", - тип әйтер ине. Маҡсат ҡуймаһаң, иҫ киткеле табышты күрмәй үтеп китеүең бар. Асылыкүл янындағы Яңы Тормош ауылында бик мәғлүмәтле, иҫкесә уҡый-яҙа белгән Солтан Ҡасимов исемле бер бабай бар ине. Мин ул бабайҙың өйөндә булдым, топонимик атамалар тураһында һораштым, әммә ашығып йөрөгәнлектән, ҡуна ҡалып, оҙаҡлап һөйләшеп ултыра алманым. Яңыраҡ Мәкәш ауылында унан тороп ҡалған бер ҡулъяҙма китап табылды. Баҡтиһәң, Солтан бабайҙың ошондай 15 китабы булған, ә яҡын-тирәләгеләрҙең битарафлығы арҡаһында улар юғалған. Мин быны үҙем өсөн дә бик ҙур юғалтыу, тип иҫәпләйем. Маҡсатлы эш алып бармаһаң, бик фәһемле асыш-табыштар эргәһенән үтеп китеүең дә бик ихтимал.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА:** Рәшит ағайҙың ғалим булараҡ үҙе өсөн яһаған фәһемле һығымтаһы журналист эшенә лә берҙәй ҡағыла. Журналист үҙенең көндәлек эшендә төптән уйланған маҡсат ҡуймаһа, уның да ошондай фәһемле һәм бәләкәй генә булһа ла асыш булырҙай фекерҙәрҙе toймай-күрмәй үтеп китеүе бар. Йәки геройы менән әңгәмәгә алдан әҙерләнмәһә, геройы йәшәгән донъя, эшләгән эше тураһында хәбәрҙар булмаһа, шулай уҡ етерлек һәм иң мөһим мәғлүмәтте алып еткерә алмаҫҡа мөмкин.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Башҡорт телендәге баҫмалар - башҡорт милләтенең матбуғаты, шул уҡ ваҡытта күп милләт вәкилдәре йәшәгән Башҡортостан матбуғаты ла. Тап шуның өсөн дә башҡорт матбуғаты - алтын урталыҡ, лояллек һағында тороусы матбуғат та. Бының кире яҡтары ла бар: беҙ яртылаш хәҡиҡәт менән йәшәргә лә мәжбүрбеҙ. Мин альтернатив матбуғат ихтыяжын инҡар итмәйем, әммә был мәсьәләне бер баҫма эсендәге альтернатив фекер менән тормошҡа ашырыу мөмкиндер, тим. "Киске Өфө"лә төрлө темаларға диалогтар, түңәрәк ҡорҙар ойоштороп, беҙ бының мөмкин икәнлегенә инандыҡ. Был мәсьәләнең төбөнә төшөп ҡараһаҡ, аналитика тигән төшөнсәгә барып етәбеҙ. Тимәк, башҡорт матбуғат баҫмалары әйтер һүҙен яртылаш хәҡиҡәт, ишара, киңәйә менән еткерһә лә, ижади эшләү юлы менән уҡымлы була ала. Ғөмүмән, беҙ шул хаҡта ла беләбеҙ: ижад туҡтаған урында коньюнктура башлана. Хәҙерге осорҙа элекке замандың үҙе менән бергә бәҫен юғалтҡан очерк, фельетон, репортаж, интервью матбуғат баҫмаларының йөҙөн билдәләй алмай. Һәр кем үҙ ғүмерендә иң күбендә 3 мең китап уҡый алып та, үҙенә кәрәкле иң кәрәкле китапты уҡымауы бар. Шуның кеүек, йыл буйына сыҡҡан гәзит йә журнал уҡыусы өсөн иң кәрәкле мәҡәләне лә баҫмауы бар. Бында ла журналистарға, баш мөхәррирҙәргә ижади эшләү өсөн икһеҙ-сикһеҙ мөмкинлектәр асыла. Беҙгә фекерләү форматын үҙгәртеү фарыз. Бының өсөн башҡорт милли матбуғаты башҡорт имиджы концепцияһын барлыҡҡа килтерергә һәм шуны ғәмәлгә ашырыу буйынса эш алып барырға тейеш. Әлегә беҙ был имиджды күрмәйбеҙ.

**Рәшит ШӘКҮР:** Башҡорт имиджы - ул башҡорт рухы, башҡорттоң донъяға таралған күңел сафлығы, тоғролоғо, рухи батырлығы. Башҡорт рухлы кеше, бәлки, һәр ваҡыт һәр кешегә ярҙам да итә алмайҙыр, ләкин ул кешегә зыян итмәй, ул кешегә изге күңелле, яҡшыға яҡшы менән яуап бирә. Минең шундай формула бар: аш менән атҡанға таш менән атма, таш менән атҡанға аш менән атма. Йәғни, мин бында башҡорттоң боронғонан килгән бер ҡатлы изгелеге тураһында өҫтәп әйтеп ҡуйҙым. Әгәр кемдер таш менән атһа, ни өсөн һин уға аш менән атырға тейеш? Һин үҙеңдең мәнфәғәтеңде яҡлай алырға, изгелекле кешенең изгелеген аңлай белергә, шул уҡ ваҡытта яуыз кешенең яуызлы-

*✓ Ни өсөн башҡорт үҙ еренә бихисап ҡәүемдәрҙе һис бер ҡаршылыҡһыҙ ҡабул иткән? Бүтән халыҡтар килеп ултырһа, башҡорттар уларға шарттар тыуҙырған, уның да ерҙә йәшәргә хаҡы бар, тип ҡараған.*

ғын да баһалай белергә тейешһең. Әгәр шулай булмаһаң, ул һинең өҫтөңә менеп, тапап үтеп китәсәк. Ни өсөн башҡорт үҙ еренә бихисап ҡәүемдәрҙе һис бер ҡаршылыҡһыҙ ҡабул иткән? Батша дәүерендә башҡорт ер изге, ер Хоҙайҙан, тип ҡараған. Бүтән халыҡтар килеп ултырһа, башҡорттар уларға шарттар тыуҙырған, уның да ерҙә йәшәргә хаҡы бар, тип ҡараған. Ә ул һинең күңелендәге изгелекте баһалай белмәй, ерен бушҡа бирҙе, тип башҡортлоғоңдан көлә. Эйе, башҡортта боронғолоҡто ла һаҡларға кәрәк, беҙ боронғолоҡтан бөйөк рухиәтте мираҫ итеп алған халыҡбыҙ. Ләкин ана шул меңәр йылдар буйы туплаған рухиәт ҡиммәттәрен беҙ барыбер яңы шарттарҙа, яңысараҡ, үҙебеҙҙең мәнфәғәтебеҙҙе, үҙебеҙҙең яҙмышыбыҙҙы нисек итеп яҡлап һәм һаҡлап ҡалып була, тигән һорауҙан сығып яҡтыртырға тейешбеҙ. Йәнә, халҡыбыҙҙың аңында, аҡылында үҙенә, улына һәм башҡа вариҫтарына билдәле шарттарҙа, бигерәк тә ил-йорт йолаларын, әхлаҡ ҡанундарын үтәүҙә талап итеп була.

гәзиттәрен уҡымаҫ өсөн генә әллә нимәнде бирергә әҙерһең. Унда иғландан башҡа бер нәмә лә юҡ. Район шуның менән генә йәшәйме икән, тип уйлайһың. Районда бер генә ҡыҙыҡ ваҡиға ла булмағанмы икән ни? Һәр бер райондың үҙәккә ҡуя торған проблемаһы бар. Республика гәзиттәренә сығармайынса ғына, район гәзиттәре үҙҙәре лә уны эшләй ала бит. Әгәр ҙә журналист ниндәйҙер проблеманы белеп етмәй икән, төрлө белгестәрҙе лә йәлеп итеп була.

**Рәмил РӘХМӘТОВ:** Бәлки, журналистарыбыҙға махсуслашыу юлын һайлау файҙалыраҡтыр. Заманыбыҙҙың бөтә баҫмалары ла журналистың хәбәрҙар белгес булыуын талап итә, сөнки гәзиттең оператив форматы йәки интернет баҫма тиҙ ҡыбырлау, төрлө темаларға тиҙ яҙыу, ҡайҙандыр материал табыуҙы талап итә. Ҡайһы бер осраҡта мөхәррир ҙә журналистың мөмкинлеген ҡыҫа, тар темаға ултырта. Шулай итеп, журналистың фекерләүе тарая. Журналистарыбыҙ ысынбарлыҡҡа тап килгән, иткәйне бит инде, һәм уның ҡарарында милли республикаларҙа үҙ дәүләт телен уҡытыуҙың Рәсәй Конституцияһына ярашлы булыуы хаҡында асыҡтан-асыҡ әйтелә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ҡайһы бер мәғариф етәкселәре ошо проблеманы мәктәп директорҙары ҡарамағына күсерергә әҙер. Журналист закон нигеҙендә эш итә, һәм ул халыҡтың, дәүләттең законлы мәнфәғәттәрен иң беренселәрҙән булып яҡлап сығырға әҙер булырға тейеш.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА:** Матбуғаттың көслө, ҡеүәтле ҡорал булыуын онотмайыҡ. Беҙ өҫтән нимә тәҡдим итәләр, шул турала ғына яҙырға күнегеп киттек. Журналистың үҙенең дә граждандыҡ позицияһы булыуы мотлаҡ бит. Әгәр ҡайҙалыр башҡорт мәктәбе ябыла, йәиһә туған телдә уҡытыу түбән кимәлдә икән, журналистың ошо халыҡ мәнфәғәте менән бәйле проблеманы ситләтеп уҙырға хаҡы юҡ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:** Мин Пушкиндың "Мы страшно ленивы и нелюбопытны" тигән һүҙҙәрен ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрөргә Миңә ҡалһа, был журналисҡа туранан-тура ҡағыла.

Университетта махсус факультет барлыҡҡа килгәндән алып журналист әҙерләү проблемаһы көнүҙәк булып тора. Кадрҙар әҙерләү ул кадрҙарҙы әҙерләүселәрҙе әҙерләүҙән башлана. Әгәр ҙә беҙ шул кафедрала журналистиканың тарихы, бөгөнгөһө, теорияһы тураһында мәҡәлә яҙырлыҡ кеше күрмәйбеҙ икән, нимә өмөт итә алабыҙ? Бөтөн Рәсәй буйынса хәл шундай, тип аҡлана алабыҙ. Әлбиттә, Рәсәйгә эйәрәбеҙ, ләкин Рәсәйгә һылтаныуҙы туҡтатырға күптән ваҡыт. Утрау булып йәшәй алмаһаҡ та, ундағы проблеманың тамсы һыуҙағы кеүек, беҙҙә лә сағылыуына ҡарамаҫтан, үҙебеҙҙең проблеманы үҙебеҙ хәл итергә тейешбеҙ. Әммә проблемалы мәҡәлә яҙып та, уның буйынса фекерләшергә кеше тапмауың бар, шуға ла беҙ йышыраҡ үҙебеҙҙең ҡаҙанда ҡайнайбыҙ, тип әйтергә тура килә. Альтернатив матбуғат тураһында һүҙ сыҡты. Законға ярашлы, һәр матбуғат баҫмаһының ҡурҡмайынса һүҙ әйтергә мөмкинлеге булырға тейеш. Әгәр мөмкинлек бар икән, альтернатив баҫмаларҙың кәрәге юҡ. Власть ныҡлы икән, ул альтернатив баҫманан ҡурҡмаясаҡ, хуплаясаҡ ҡына, сөнки ныҡлы ултырған власҡа ла ваҡытында һәм урынлы тәнҡитләп тороусы баҫма мотлаҡ кәрәк. Тимәк, альтернатив баҫма сығарырҙай кешеләребеҙ бар икән, уны хупларға ғына кәрәк. Көрсөккә килеп терәлһәк тә, бөтәһе лә яҡшы, тип үҙебеҙҙе тынысландырырға күнеккәнбеҙ, ә уйлап ҡараһаң, саң ҡағырлыҡ сәбәптәр ҙә етерлек.

# РУХ САҒЫЛЫШЫ,

## үҙ бурысын нисек үтәй?

санлыҡ күрһәтеү тәртибе һаҡланған. Шуның өсөн башҡорт имиджы башҡорт кешеһенең үҙ-үҙенә, бер-береһенә талапсан булыуында ла сағыла. Милли матбуғат баҫмаларында башҡорт имиджы буйынса фекер алышыу дауам итеп, бигерәк тә йәштәр фәһем алырҙай мәҡәләләр баҫылып торһа, беҙ рухи күсәгилешлеккә өлгәшә алырбыҙ.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА:** Ҡала һәм район гәзиттәре журналистарын, матбуғатҡа яңы аяҡ баҫыусы йәштәребеҙҙе бына ошондай кәңәш-тәҡдимдәргә иғтибарлыраҡ булырға саҡырабыҙ. Гәзит-журналда эшләй башлау йәш журналист өсөн оҫталыҡ мәктәбенә инеүгә тиң. Перспективалы, талантлы йәш журналистарҙы табыуы бик ҡыйын бөгөн. Йәшерен-батырын түгел, журналистика факультетын тамамлап килгән йәш белгестәрҙе журналист һөнәренә ҡайтанан өйрәтергә мәжбүр булабыҙ. Кадрҙар әҙерләү буйынса ла һөйләшеп алайыҡ әле.

**Зәки ӘЛИБАЕВ:** Журналистика факультетының уҡыу-уҡытыу системаһынан сығып ҡарағанда, ниндәйҙер кимәлдә, журналист әҙерләү уҡыу планынан башлана. Әммә был уҡыу планына буласаҡ журналисҡа рух һалыусы бер генә предмет та индерелмәгән. Журналистика факультетында дөйөм фәндәрҙән тыш, махсус курстар бар. БДУ-ла журналистика факультеты эшләп килгәнгә быйыл 20 йыл, әммә ул курстар бер кемде лә ҡыҙыҡһындырғаны юҡ. Йәшерен-батырыны юҡ, ул махсус курстарҙы башҡа эш тапмаған кешеләр уҡыта.

Альтернатив матбуғатты кем барлыҡҡа килтерә? Бөгөн район әммә барыһы ла күрмәмешкә һалышҡан проблема буйынса һорау бирергә ҡурҡа. Ниндәй генә ҙур мәҡәләне уҡыһаң да, бында бәреп әйтелгән тура һүҙ юҡ кимәлендә, барыһы ла яҡшы яҡтан ғына күрһәтелә.

Тағы ла шул: беҙ һәр ваҡыт үҙ мәҡәләбеҙҙең геройы итеп башҡортса яҡшы һөйләшкән, рухлы кешене һайлайбыҙ. Ә ниңә беҙгә ҡаршы булған башҡа милләт вәкиле менән әңгәмә ҡормайбыҙ? Бәлки, ундай сығыштар, бәхәстәр кемдеңдер ысын йөҙөн асырға ярҙам итер ине.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Бөгөн райондарҙа ла, республика кимәлендә лә халыҡты борсоған проблемаларҙы матбуғат баҫмаларында күтәреп сығып, ошо хәл өсөн яуаплы кешеләрҙе тәнҡитләүҙән ҡурҡабыҙ. Тәнҡитһеҙ үҫешкә юл ябыласаҡ. Ҡатмарлы проблемалар, улар нисек кенә аяныслы булмаһын, гәзит биттәрендә тикшерелмәй икән, халыҡтың матбуғатҡа битараф ҡалыуының төп сәбәбенә әйләнә. Етешһеҙлектәребеҙҙе күрергә теләмәйбеҙ икән, гәзит уҡымайҙар, тип, халыҡҡа үпкәләргә лә хаҡыбыҙ юҡ. Бына, мәҫәлән, Генераль прокуратура ҡушыуы буйынса Рособрнадзор эксперттары Башҡортостанда башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законлымы-юҡмы икәнен тикшереп китте. Беҙ был турала матбуғатта бер һүҙ ҙә яҙмайбыҙ, сөнки ошо проблеманы халыҡҡа аңлатыуҙан ҡурҡабыҙ. Урыҫтар: "Изге урын буш тормай", - тиҙәр. Буш торған урын имеш-мимеш һәм күрәләтә ялған хәбәрҙәр менән тултырыласаҡ. Ә Рәсәйҙең Конституция суды әлеге мәсьәләне 2004 йылда уҡ хәл мәжбүр булам. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн шарттар шундай. Гәзит-журналдар, радио-телевидение үҙе теләгәнен әйтә алмай барыбер ҙә. Бының шулай икәнен танырға һәм ошо шарттарҙа нимә эшләргә мөмкин икәнлеге тураһында баш ватырға кәрәк. Әгәр ҙә был шарттар беҙҙе ҡәнәғәтләндермәй икән, тимәк, беҙ уларҙы үҙгәртеү маҡсатында ниндәйҙер эш алып барырға тейешбеҙ. Юҡһа, беҙ мәҡәлә яҙғанда уҡ ҡурҡып ултырабаҙ, быны баҫмаясаҡтар, баҫһалар, минең менән ни булыр икән, һ.б. Әгәр ҙә журналист тулы хәҡиҡәтте яҙырға ҡурҡмай икән, бындай журналисҡа ярҙам итергә кәрәк.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Күптән инде башыбыҙҙан дүртенсе власть икәнлегебеҙҙе ҡағып төшөргәндәр. Беҙ быны онотҡанбыҙ. Әгәр ҙә беҙ ул власты алырға теләмәйбеҙ икән, йәмғиәт, дәүләт кимәлендәге власть ағзаһы икәнебеҙҙе белмәйбеҙ һәм белергә лә теләмәйбеҙ икән, әлбиттә, беҙ меҫкен хәлдә ҡалыр инек. Әммә беҙ үҙебеҙҙең халыҡҡа, үҙебеҙҙең уҡыусыларға еткерергә тейешбеҙ: әгәр ҙә башҡортлоғобоҙҙо күрһәтергә теләйбеҙ икән, беҙ көрәшергә тейешбеҙ. Федераль закондарға ла, федераль етәкселәргә лә, үҙебеҙҙең етәкселәргә лә кәрәк саҡта һүҙ әйтергә тейешбеҙ. Әгәр йәнебеҙҙәге ҡурҡыуҙы еңә алһаҡ, дүртенсе власты кире ҡайтарып ала алыр инек.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:** Махсуслашыу йәки энциклопедик ҡоласлы булыу мәсьәләһенә лә ҡағылып үттек. Был юҫыҡта бәхәс электән бара. Журналисҡа энциклопедист булырға ла, махсуслашырға ла тура килә. Тимирязев тигән атаҡлы ғалим: "Кеше бөтә нәмә тураһында ла әҙ-әҙләп булһа ла белергә тейеш", - ти.

Рәмил Рәхмәтовтың аудиторияларға бүлеп ҡарау тигәне менән килешмәйем. Әлбиттә, мәсьәләләрҙең эреһе-вағы, көс етерҙәйе-етмәҫтәйе бар, уларҙы беҙгә гел бүлгеләп хәл итергә тура килә. Беҙгә бөгөн нейтраль аудиторияны тәрбиәләп маташҡансы, кешеләрҙең ыңғайҙары, өмөтлөләре менән эшләргә кәрәк, шул саҡта яйлап аудиторияны ла киңәйтә бараһың.

**Луиза СӘМСИТОВА:** Гәзит-журнал биттәрен асҡанда шул күҙгә ташлана: мәҡәлә яҙған журналист та, ғалим да тик мәҡәләнең йөкмәткеһенә генә иғтибар итә, ә ни эшләп ул тел мәсьәләһен ситтә ҡалдыра? Мәҙәниәт, әҙәбиәтте белеү, әлбиттә, кәрәк, әммә пунктуацион хаталар ни өсөн иғтибарҙан ситтә ҡала? Һәр мәҡәләлә иң кәмендә 2-3 хата табыла. Бөгөн иң аҡһағаны - пунктуацион хаталар, улар бар хаталарҙың 90 процентын тәшкил итә. Был бына нимәнән килеп сыға: журналист һөйләм төҙөлөшөн иғтибарға алмай. Хата - яҙған кешенең йөҙө ул.

**Зәки ӘЛИБАЕВ:** Милли рухты күтәрә торған ваҡиғалар көн дә булып тора, шуларҙың гәзиттәребеҙҙә нисек яҡтыртылыуы тураһында лә әйтмәй булмай. Студенттар көнөндә "Башҡортостан" гәзитендә махсус бер бит баҫылды. Биттең өҫтән бер өлөшөн негр студенты тураһындағы мәҡәлә алып тора. Шул уҡ биттә БР Президенты стипендиаты Ғәлиә Мөхәмәтйәнова тураһында ус аяһындай ғына мәҡәлә баҫылған. Иң беренсе үҙ-үҙебеҙгә тейешле юғарылыҡтағы мөнәсәбәт булдырыу фарыз. Башҡорт имиджы шунан башлана. "Йәшлек"тә өс һөйләм менән сит илдәр, Рәсәй яңылыҡтарын бирәләр, шул да етә. Минең үҙ милләтем хаҡында күберәк уҡығым килә. Башҡортҡа файҙа булһын әле, тип, милли матбуғатты башҡа милләт кешеһе алдырмаҫ һәм уҡымаҫ. Беҙҙең матбуғат башҡаларҙы түгел, үҙебеҙҙе күтәрергә тейеш. Башҡорт гәзитен асам икән, башҡорт каналын тоҡандырам икән, үҙемдең файҙам өсөн эшләйем. Кеше күңелен күрәм, тип йәшәүҙән ҡотолорға ваҡыт.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:** Заһир Исмәғилевҡа ла атаһы "Урал"дан да бөйөгөрәк әҫәр яҙа алмаһаң, композиторлыҡ эшенә тотонма, тип әйткән бит. Рәшит ағайға өҫтәп, бөгөнгө башҡорттоң ниндәй булырға тейешлеге хаҡында әйтеп китәйем. Бөгөнгө башҡорт үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тойорға тейеш. Ул ошо республика өсөн иң яуаплы шәхес. Балаларына ошо рухты һалырға тейеш. Ошонан башлана ул ысын башҡортлоҡ. Ғорур, сая булыу, ете һәм унан да күберәк быуындарыңды белеү мотлаҡ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Коллегаларыбыҙ һөйләгәндәрҙе тыңлағас, шундай фекергә килдем: Башҡортостандың башҡорт телендә сыҡҡан барлыҡ баҫмаларын берләштергән ижтимағи ойошма булдырыу бик файҙалы булыр ине. Мәҫәлән, райондарҙа башҡорт мәнфәғәтен яҡлап, урындағы етәкселәргә һис оҡшамаған тәнҡит материалы баҫылып та өлгөрмәй, улар ошондай журналистан йә мөхәррирҙән ҡотолоу сараһын эҙләй башлай. Бындай осраҡта ошо йәмәғәт ойошмаһы булдыҡлы һәм әүҙем коллегаларыбыҙҙы ҡурсалай алыр ине.

**Фәнил ҠОҘАҠАЕВ:** Бында велосипед уйлап сығарыу кәрәк түгел. Журналистарҙы яҡлау өсөн Журналистар союзы бар, ә унан ҡоролтайҙың Башҡарма комитетында милли матбуғат секцияһын булдырыу ҡаралған, ул да ошо мәсьәләләр менән шөғөлләнә аласаҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Мин әлегә тиклем үҙебеҙҙең Журналистар союзында ысынлап та яҡлау-ҡурсалауға мохтаж коллегаларыбыҙ өсөн янып-көйөп йөрөүселәрҙе күргәнем юҡ әле, бәлки, яңылышамдыр. Шуға күрә башҡорт журналистарының айырым йәмәғәт ойошмаһы булһа, беҙ ойошҡаныраҡ рәүештә эшләп, ысын хеҙмәттәшлек һәм теләктәшлек булдырыуға өлгәшер инек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли матбуғатыбыҙҙың бөгөнгө торошона һәм киләсәгенә арналған түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар Өсөнсө ҡоролтай трибунаһына сығарырлыҡ байтаҡ фәһемле фекерҙәре менән уртаҡлашты. Фекер алышыу, фекер уртаҡлашыу дауам итә. Гәзит уҡыусыларыбыҙ ҙа беҙгә үҙ фекерҙәрен еткерә ала.**

**✓ Тормоштары күҙ алдында үткән ҡатын-ҡыҙ уҡылған китап һымаҡ ҡыҙыҡһыҙ була икән. Береһенә лә күңеле тартманы, ул үҙенең аҡ күгәрсенен көттө. Теге көн күргән төшөнән һуң, күңеле елкенеп, дәртләнеп йөрөнө.**

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# АҠ КҮГӘРСЕН БУЛЫП ОСОП КИЛДЕҢ...



Төштә бала сағынан дөрөҫ күрҙе Нуриман. Атаһының һуғыштан имен ҡайтырын да, күп тә тормай, яраларынан үлерен дә төш аша белде. Үҫә төшкәс, хеҙмәте аша дан ҡаҙанырын күрҙе. Имеш, юл буйлап китеп бара, арҡаһына артмаҡлаған киндер тоғонда орден- миҙалдар ялтырап ята. Ғаиләһе ниндәйерәк булырын, балалары яҙмышын алдан белде. Төшөндә күргәндәр барыһы алдына килде.

Бөгәсә тағы бер серле төш күреп уянды Нуриман ҡарт. Имеш, асыҡ тәҙрәнән ап- аҡ күгәрсен осоп инде лә яурынына ҡунды. Күгәрсен - бәхет ҡошо, тимәк, изгегә, тип юраны ул. Хатта яңғыҙлығын онотоп, кәйефе күтәрелеп киткәндәй булды. Әбейе гүр эйәһе булғанға ла өс йыл тула. Яңғыҙ - ярлы, ғүмере - зарлы, тигәндәй, тамам үҙәгенә үтте яңғыҙлыҡ.

Иҙел буйҡайҙары ике туғай,
Уның бер туғайы андыҙлыҡ.
Был донъяҡайҙарҙа ике үкенес:
Береһе - үлем, береһе - яңғыҙлыҡ, - тип юҡҡа ғына йырламайҙар икән. "Хоҙай биргән ғүмерҙе ниңә зарығып үткәрергә, туры килеп, бергә-бергә тормош көтөрлөк ипле генә ҡатын осраһа, өйләнергә кәрәк,"- тип уйланы. Олоғайған көндә сөкөрләшеп һөйләшеп, береңде-берең әпәүләп, көңгөр-ҡаңғыр йәшәргә теләй ул. Яңғыҙлыҡтан биҙрәгән Нуриман ҡарттың ниәте торған һайын нығына барҙы. Ҡартайып барғанда ла шулай була икән, күңеле кемделер көттө, өҙөлөп һөйгәһе, һөйөлгәһе килде.

- Ҡаңғырып йөрөмә яңғыҙяры. Яңғыҙлыҡта бер көн йәшәүе ауыр. Донъяң бынамын тигән, пенсияң һәйбәт, әбей ал, - тине туғандары. Ҡоҙа- ҡоҙағыйҙары, таныш- тоноштары ла димләп ҡараны. Тормоштары күҙ алдында үткән ҡатын-ҡыҙ уҡылған китап һымаҡ ҡыҙыҡһыҙ була икән. Береһенә лә күңеле тартманы, ул үҙенең аҡ күгәрсенен көттө. Теге көн күргән төшөнән һуң, күңеле елкенеп, дәртләнеп йөрөнө.

Көтмәгәндә тыуған ауылында үтәсәк шәжәрә байрамына саҡырыу килде. "Яҙмышыма яҙғанды ошонда осратмаҫмынмы икән?", тип дәртләнде ҡарт. Күңеле ниҙер һиҙенепме, байрамға ихлас әҙерләнде, өҫ- башын яңыртты, өйөн йыйыштырҙы.

Кем эҙләй, шул таба, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаға. Мөләйем йөҙөнән яғымлылыҡ бөркөп йылмайған Мафрузаны бер ҡарауҙан оҡшатты Нуриман ҡарт. Бер ҡалала йәшәһәләр ҙә, уны бығаса осратҡаны булмағайны. Ысынлап та, аҡ күгәрсенгә оҡшап тора лаһа. Тулы йөҙөнә сал төшкән сәстәре лә ҡалай килешә. Йылмайып ебәрһә, бит тирәһендәге йыйырсыҡтары ла ҡуша йылмая төҫлө. Бар булмышынан тыныслыҡ, баҫалҡылыҡ, олпатлылыҡ бөркөлә. Нәҡ бына шундай мөләйем әбей кәрәк инде Нуриманға. Эргәһенә килеп һүҙ ҡушҡайны, һөйләшеп алды ла киттеләр. Байрамда гел бергә йөрөнөләр. Ҡайтыр саҡта осрашырға һүҙ ҡуйышып, адрестары, телефон номерҙары менән алыштылар.

Шәжәрә байрамынан һуң апаруҡ ваҡыт үтеп китте. Нуриман ҡарт һаман Мафрузаны уйланы. Ниһайәт, өйөнә саҡырып алырға йөрьәт итте. Бүләккә матур ғына яулыҡ әҙерләп ҡуйҙы. Барлыҡ шатлығы булған баҡсаһын алып барып күрһәтергә ниәтләне. Мафруза ялындырып торманы. Ябай ғына итеп, ризалығын белдерҙе. Көтөп алған ҡунағын ихлас ҡаршы алды хужа. Хәленән килгәнсе ҡәҙерхөрмәт күрһәтте.

Көнө буйы бер-береһе менән аралашты, һөйләште улар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Дачаһына ла барып уранылар. Икеһенең дә кәйефе бермә- бер күтәрелде.

- Йәш саҡта көнө буйы эшләп, арып ҡайтаһың да, иртән тороп тағы эшкә йүгерәһең, эргә-тирәңдә дуҫ-иштәрең, коллективың, яңғыҙлыҡты һиҙмәйһең дә. Олоғайғас, эш башҡаса икән. Үҙәк базаның баш бухгалтеры булып эшләгән сағымда тегенеһе килә үтенес менән, быныһы... Хаҡлы ялға сыҡҡайным, бер кемгә лә кәрәгем юҡ. Үҙеңде меҫкен итеп тойоуҙан ҡыйыны юҡ икән. Яңғыҙлыҡтан тамам йонсоном,- тине Мафруза.- Яңғыҙлыҡ - әҙәм аңламаҫ йән ауырыуы икән ул. Бер эшкә дәрт төшмәй. Яңғыҙлыҡ бер Хоҙайға килешһен икән.

- Былай булғас, икебеҙҙең ауырыу бер төрлө,- тине Нуриман ҡарт Мафрузаның үҙ хәлен шул тиклем асыҡ итеп тасуирлап биреүенә хайран ҡалып. Уға күңел күҙе менән төбәлде. - Минең хәлдәр ҙә шул сама.

Сәй артында, һүҙҙәре килешеп, тағы байтаҡ һөйләште аралашыуға һыуһаған ике тол, ике етем. Мафруза Нуримандды күберәк белгән һайын нығыраҡ оҡшатты. Унын интеллектына һоҡланды. Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән был кешенең эсе тулы хазина булып сыҡты. Белмәгән нәмәһе, ҡыҙыҡһынмаған өлкәһе, эшләмәгән эше юҡ. Тарихын да, әҙәбиәтен дә белә. Һаулыҡ һаҡлау буйынса ғилеме - табибтарың ары торһон. "Эргәңдә ошондай иптәш булһа, йәшәүе күңелле булыр, эс бошорға ваҡыт ҡалмаҫ ине, әйтәгүр",- тип уйланы Мафруза. - Ә баҡсаһы ниндәй! Ниҙәр генә үҫтермәгән бөтмөр хужа бында.

- Торғаны бер Мичурин икәнһең! - тип маҡтап алды уны Мафруза. - Күрсе, йылы яҡта ғына үҫкән өрөк менән йөҙөмөнә тиклем...

- Улар ҡатын- ҡыҙ кеүек наҙлы, хәстәрлек, иғтибар талап итә. Яратһаң - үҫә, яратмаһаң - юҡ. Мин бит уларға күңел йылымды бирәм.

"Ярата беләлер был кеше", тип уйланы Мафруза үҙенә унын ниҙер әйтергә теләгәнен һиҙенеп. Эйе, баҡса унғандарҙы ярата. Был эш һөйгән, унған, үҫемлектәр телен белгән кешегә күңелендә ихтирам уянды. Үҙе лә уны саҡырып алырға булды. Йәштәрсә елкенеп, дәртле баҫып килеп инде ҡунаҡ. Мафрузаның боҙолған үтеген йүнәтә һалып бирҙе, һыуы ағып торған крандарын ҡараштырҙы. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Хушлашыр алдынан йылы өйҙән сығып ҡайтып киткеһе килмәгән Нуриман ҡарт:

- Икебеҙгә ҡайһылай рәхәт,- тине. - Әллә яҙмыштарҙы бергә ҡушайыҡмы, Мафруза? Һин дә яңғыҙ, мин дә яңғыҙ. Бер-беребеҙгә терәк-таяныс булып йәшәр инек.

- Әлләсе, мин ул турала уйлағаным юҡ. - Мафруза йәш ҡыҙҙар кеүек оялды. Тәҡдим, ысынлап та, аяҙ көндө йәшен атҡандай булды. Ә ҡарт алдына алғанын өҙмәне лә ҡуйманы. Бер ай буйы уйлап йөрөгән нәмәләрен теҙҙе лә теҙҙе генә.

- Торорға өс бүлмәле фатирым, бынамын тигән дачам, емеш-еләк тулы баҡсам бар, пенсиям яҡшы, һаулығым һәйбәт. Күңелемә оҡшаның, зинһар, тәҡдимемде кире ҡаҡма. Риза булһаң, иртәгә үк никах уҡытабыҙ, ЗАГС-ҡа барабыҙ. - Нуриман Мафрузаға мөлдөрәп ҡараны. - Үкенмәҫһең.

- Балаларың ни әйтер?

- Йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй. Йәш саҡта ла кеше аҡылы менән йәшәмәнем, хәҙер ҙә балаларҙан барып өйләнергә рөхсәт һорап йөрөмәм. Мин атай әле...

Нуриман ҡарттың ҡыҙып китеүенән балалары менән араһында ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡ барлығы һиҙелде. Быны үҙе лә йәшереп торманы:

- Әсәләре үлгәс, мине судҡа биреп, донъя бүлдерәбеҙ, тип йөрөнөләр. "Мине урам буйына сығарып ырғытаһығыҙмы хәҙер?" тинем. "Башҡа әбейбабайҙар дачала ла тора, һин дә дачаңа кит", тинеләр.

- Бына нисек. Торорға фатирҙары юҡмы ни?

- Бар, бөтәһе лә бар. Серегән байҙар. Нәфселәренә баш була алмайҙар.

- Аңлашылды.

Мафрузаның күңелендә ошо зарлы кешене ҡыуандарыу теләге уянды.

- Мин риза, - тине лә, үҙенең дә күңеле шатлыҡ менән тулды.

Никах туйына Мафрузаныҡылар, Себерҙән отпуск етмәйенсә ҡайта алмабыҙ, тигәс, Нуримандың балаларын булһа ла саҡырып алырға булдылар. Мансур менән Наилә Өфөлә үҙ ғаиләләре менән йәшәп яталар икән. Яңы өйләнешкән бәхетле пар ҡунаҡтар килеүгә матур ғына итеп өҫтәл әҙерләне. Нуримандың балалары килеүен килде, әммә уларҙың атаһын никах менән ҡотларға самалары юҡ ине. Табын артына ултырғас та Наилә һүҙҙе үпкәләүҙән башланы.

- Әсәйҙе тиҙ онноттоң, атай,- тине. - Был өйҙә әсәй урынында икенсе ҡатынды күреү беҙгә ҡыйын. Ашарыңды ашағанһың, йәшәреңде йәшәгәнһең, ниңә кәрәк булды һеҙгә законлап өйләнеү. Һеҙҙең йәштәгеләрҙе "ҡарт ишәк" тиҙәр. Көнсығыш илдәрҙә ишәк ҡартайһа, ите ашарға яраҡһыҙ булғас, ихатанан ҡырға ҡыуып сығарып ебәрәләр, ти, йөрөп-йөрөп үҙе үлә...

Күҙ ҡараһындай күреп, ҡәҙерләп үҫтергән балаһынан былдай әшәке һүҙҙәр ишетермен тип көтмәгән Нуримандың йөҙө көл төҫлө булды.

- Ни һөйләйһең, Наилә, туҡта, аҡылыңа кил, - тине. Ул Мафрузаның табын артынан тороп сығып китеренән ҡурҡты. Ярҙам көтөп улына ҡараны. Мансурының да йөҙө томһайғайны.

- Наилә дөрөҫ әйтә, был йәштә әбейҙәр бабайҙың милкен ҡармар өсөн генә тормошҡа сыға. Ниңә ЗАГС-һыҙ былай ғына килеп тормай? Ниңә кәрәк уға законлы никах? Мираҫ хоҡуғы закон менән һаҡлана беҙҙә.

Кейәүе менән килене лә һүҙ әйтеүселәрҙе хуплаған һымаҡ, баш ҡағып ултырҙы. Мафрузаның, ысынлап та, түҙер хәле ҡалманы.

- Беҙ һеҙҙе бында ыҙғышырға түгел, шатлығыбыҙҙы бүлешергә тип саҡырҙыҡ. Беҙ, ике яңғыҙ кеше, осраштыҡ та, яҙмыштарҙы бәйләргә, бер-беребеҙгә терәк булып йәшәргә һөйләштек. Насармы ни? Милек мәсьәләһенә килгәндә, закондың бында ни ҡыҫылышы бар. Кем олоғайған кешене түшәктә ауырып ятҡан сағында ҡарай, донъя шуға инселәнергә тейеш, тип уйлайым. Бына һин, Мансур, атайың хәлһеҙләнеп түшәктә ятһа, уны ҡарарға ризаһыңмы? Нәилә, ә һин? - өнһөҙ ҡалған Мансур менән Нәиләгә ҡарап, Мафруза һығымта яһаны.- Бына шулай, атай милкен бүлешеп алыуы рәхәттер, уны ҡартлыҡта тәрбиә ҡылыуы ҡыйын. Юҡһа, үҙебеҙ ҡарайбыҙ, тип, ата-әсәһенән донъяһын һаттырып, аҙаҡ үҙен урамға ҡыуып сығарғандарҙы ла күргән бар.

Нәилә һөйләүсене дорфа бүлдерҙе.

- Ҡарттар йорто ни өсөн?

Сығырынан сыҡҡан Нуриман ҡарт күрәләтә быңдай оятһыҙлыҡҡа сыҙай алманы, рәнйеп, күҙҙәренә йәш алды.

- Ғүмерем буйы, балаларым, тип, һеҙҙең өсөн өҙәләндем. Хәҙер күрәм, ярай әле беҙҙең илдә ҡарттарҙы Японияләғы кеүек Нараями тауына илтеп ырғытыу йолаһы юҡ. Һеҙ мине тамсы ла йәлләп тормаҫ инегеҙ. Ғүмерегеҙ булһа, ҡартлыҡ һеҙгә лә килер...

Табындың йәме бөттө. Ҡунаҡтар, хушлашып та тормай, шарт-шорт йыйынып, сығып китте. Икеһе генә ҡалғас, Нуриман Мафрузаһын яурынынан ҡосаҡлап алды ла:

- Рәхмәт, ҡәҙерлем, - тине. - Күтәрә һуғып, сығып китерһең тигәйнем, түҙҙең. Былай булғас, йәшәйбеҙ, Алла бирһә.

Аш- һыуҙы яңынан йүнәтештереп, улар кире табынға ултырҙы. Булып үткән хәлдән һуң ни әйтһәң дә килештереп булмаҫын тойған Мафруза йырлап ебәрҙе:

Күк буҫтау ҙа сәкмән туҙмай тиҙәр,
Кителеп-кителеп ситенән дә туҙа икән.
Йәш ғүмеркәйҙәрҙе уҙмай тиҙәр,
Миҙгел- миҙгел булып та уҙа икән.

Тауышы моңло уның. Йәш саҡтарҙа сәхнәләрҙә йырлап йөрөнө.

- Ҡуйсы әле, моңайышып ултырмайыҡ. Бөгөн беҙҙә байрам. Беҙ осраштыҡ, бергәбеҙ, инде Хоҙай ғүмер, һаулыҡ бирһен...

Улар шулай үткән ғүмерҙәре тураһында һөйләшеп, сөкөрләшеп, байтаҡ ултырҙы. Нуриман ҡартҡа Мафрузаның белеклелеге оҡшаны. Балаларың фәлән икән, төгән икән, тип булышманы, яраһына тоҙ һалманы. Кемдең үҙ балаһы тураһында насар һүҙ ишеткеһе килһен. Ҡатындың кеше күңелен аңлай белеүе араларын тағы яҡынайтып ебәрҙе.

Шулай матур ғына йәшәп ятҡанда улы шылтыратты.

- Мафруза апайҙың үткәне тураһында ни беләһең? Ул төрмәлә ултырып сыҡҡан...

- Шунан?

- Бик мөкиббән китмә, тип иҫкәртәм...

Бер аҙҙан ҡыҙы шылтыратты:

-Ҡотлайым, атай, һин бай бисәгә өйләнгәнһең. Аҡсаһы банк тулы, ти...

Улар Мафруза тураһында байтаҡ ғәйбәт йыйҙы. Имеш,

*✓ Һигеҙәр сәғәт буйы туҡтауһыҙ фортепиано артында ултырырға тура килгән саҡтар ҙа була. Беҙҙең өсөн тиҙ арала яуланған популярлыҡтан бигерәк, сифатлы башҡарыу оҫталығына өлгәшеү мөһим.*

ике иргә барған, икеһе лә үлгән, тимәк, ул ғаиләгә бәхетһеҙлек алып килә. Аяуһыҙ уҫал. Күрше-тирәһенә йылы һыуын эсермәгән, фәлән-фәсмәтән.

Башта Нуриман ҡарт балаларын тыңланы. Хәбәрҙәрен эсенә һалып барҙы. Үҙе һаман Мафрузаны һынаны. Ипләп кенә төрлө темаға һүҙ башланы. Төрмәлә ултырыуының да сәбәбен белде. Машинала китеп барған саҡта юлға ҡаршы сыҡҡан баланы бәреп йыға. Сабый тере ҡала, әммә атаәсәһе юллап, барыбер ултырта. Ике иренең дә үлеүе хаҡ. Береһе аварияға осрай, икенсеһе һыуға бата. Эсергә әүәҫ күршеләре гел аҡса һорап ҡаҡшатҡан, шуға аралашмаған. Бына нисек, бер үк хәбәрҙе кеше үҙенә нисек кәрәк, шулай бора ала. Үҙе Мафрузаны көндән-көн нығыраҡ яратты. Күңеле нескә, холҡо ҡырҡыуыраҡ, әммә боҙоҡ түгел. Ундай ҡатын менән гөрләтеп донъя көтөргә була.

Бер көндө Мафруза ауылдағы туғандарын күреп килергә булды. Шул арала шылтыратып, Нуриман улы менән ҡыҙын саҡырып алды.

- Һеҙ минең бәхетле булыуыма ҡаршымы? - тип башланы ул һүҙен. - Мин һеҙҙең юлығыҙға кәртәме? Икмәгегеҙҙе ашайыммы, үҙемде ҡарарға ҡушаммы? Мин үлеп китһәм, донъя беҙгә иркенерәк ҡалыр тиһегеҙме? Ничеге подобного. - Ул бик асыулы ине. - Башҡаса Мафруза апайығыҙ тураһында ғәйбәт таратыр булһағыҙ, миңә атай тимәгеҙ. Хәҙер миңә унан да яҡын бер кем юҡ. Һеҙ килеп, хәл дә белмәйһегеҙ, ә ул һәр саҡ минең янда. Ипле, ярҙамсыл, итәғәтле. Тағы шуны әйтәм, һеҙгә минең милек өсөн дә талашып йөрөргә тура килмәҫ. Икегеҙҙе лә фатирлы, машиналы иттем. Ҡалғанын үҙегеҙ хәстәрләрһегеҙ. Мафрузаға минән бер ни кәрәк түгел, уның үҙенең йыйған донъяһы үҙенә етәрлек. Беҙ һөйләшеп, кәңәшләштек тә, минең милекте балалар йортона васыят иттек. Хәләл көсөм менән йыйған донъям, әйҙә, үҙем һымаҡ етем- еҫер кинәнһен.

Марат менән Нәилә ишеткәндәренән саҡ ҡолап китмәне.

- Атай, һин әллә алйотланып бараһыңмы. Нисек васыят иттең,- тип икеһе бер тауыштан ҡысҡырып ебәрҙе.

- Бына шулай, хәҙер минең һеҙҙе талаштырырлыҡ бер нәмәм дә юҡ. Инде Мафруза апайығыҙға ла итәғәтлерәк булырһығыҙ...

Бар уйын балаларына әйтеп биргәс, Нуриманға еңел булып ҡалды. Бынан ары улар Мафрузаһы менән бер- береһе өсөн йәшәйәсәк. Уларға артыҡ аҡса ла, байлыҡ та кәрәкмәй. Ҡартлыҡ баҡсаһындағы емеш-еләктең әле нәҡ тулышып өлгөргән сағы. Йәшәү бәхетен татып, көн дә ҡалҡҡан ҡояшҡа ҡыуанып, хөкүмәт биргән пенсияға кинәнеп, һөйөп-һөйөлөп йәшәргә лә йәшәргә әле. Төшөндә күргән, тәҙрәһенән осоп ингән аҡ күгәрсене менән парлашып оҙаҡ йылдар йәшәргә яҙһын...

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

ИЖАДХАНА

# ФОРТЕПИАНО АРТЫНДАҒЫ ИСКӘНДӘР...



## ҡурай тотҡан олатаһынан кәм түгел

**Өфө дәүләт сәнғәт академияһының II курс студенты Искәндәр Ғафаров, йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, үҙен һәләтле музыкант буларак танытырға ла өлгөрҙө. Башҡортостан, Рәсәй сиктәрендә үткән конкурстарҙа ғына түгел, сит ил тарафтарында ла беренселекте яулап, үҙ оҫталығын әленән-әле раҫлай килә. Быйыл ул Париж ҡалаһында үткән Александр Скрябин исемендәге X Халыҡ-ара пианистар конкурсында I премияға лайыҡ булды. Фортепианола башҡарыу өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм сит илдәрҙә Башҡортостан композиторҙары әҫәрҙәрен пропагандалағаны өсөн Искәндәр ҒАФАРОВ Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына тәҡдим ителде. Ул әле ижады һәм музыка сәнғәтенә ҡарашы тураһындағы уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша:**

### Ижадым нигеҙендә халыҡсанлыҡ ята

Минең сәнғәткә һөйөүем, ижади һәләттәрем атай-олатайҙарымдан килә. Әсәйем яғынан ҡартатайым Ғәли Ильясов - йырсы, ҡурайсы, шағир, журналист булған. Өләсәйем дә матур итеп йырлаған. Атайым яғынан өләсәйем - Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы ижади ҡарашлы кеше, матур йырлай. Ә олатайым Айрат Ғафаров - ҡурайҙа, баянда, скрипкала бик оҫта уйнаған. Мине тыуғандан уҡ уға оҡшатҡандар. Бәләкәй сағымда йоҡламай йөҙәтһәм, ҡартатайым төнө буйы минең менән уйнап ултырыр булған. Атайымдың өләсәһе лә сәсәниә булған, йөрөгән ерендә йыр сығарып, көйләп йөрөгән. Атайым Алмас Ғафаровты тамашасы билдәле йырсы, ҡурайсы, тип белә. Әсәйем Йәмилә Ғәли ҡыҙы иһә мине "Хан ҡыҙы", "Ураҡсы ҡыҙ" йырҙарын йырлап йоҡлатыр ине. Ошондай йыр-моңға маһир, талантлы ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән бала буларак, минең бүтәнсә өлкәне һайлауым мөмкин дә түгел ине. Әле мин шөғөлләнгән өлкә профессиональ музыка булһа ла, уның нигеҙендә ике яҡлап нәҫел ебемдән күсә килгән халыҡсанлыҡ тигән төшөнсә ята. Тап шул ижадымды тулы ҡанлы итә, миңә көс-дәрт бирә, илһам уята, еңеүҙәргә әйҙәй.

Мин атай-әсәйемдең теләк-кәңәштәренә һәр ваҡыт ҡолаҡ һалып эш итәм, улар бер ваҡытта ла насарға өйрәтмәй бит. Ни тиһәң дә, улар миңә ҡарағанда күпте күргән, тормош тәжрибәләре лә етерлек. Үҙем икеләнгән һорауҙарымда һәр ваҡыт уларға мөрәжәғәт итәм. Конкурстарҙы ойоштороуҙарҙа ла, еңеүҙәремдә лә атай-әсәйемдең өлөшө ҙур. Шулай уҡ миңә 12 йәштән алып фортепиано серҙәренә төшөндөргән уҡытыусым Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Рөстәм Рәжәп улы Шәйхетдиновҡа рәхмәтем сикһеҙ.

### Башҡорт халыҡ көйҙәрен дә уйнаясаҡмын

Шуныһы ҡыуаныслы, беҙҙең хәҙерге композиторҙарыбыҙ араһында, элеккеләр кеүек үк, фольклор алымдарына мөрәжәғәт итеп, халыҡсанлыҡ төшөнсәһен иҫтән сығармай, матур башҡорт көйҙәрен ижад итеүселәр етерлек. Мәҫәлән, төрлө яҡлап үҫешкән композитор буларак, Урал Иҙелбаевтың ижадында халыҡсан әҫәрҙе лә, заманса яңғырағандарын да ишетергә була. Ә тәғәйен башҡорт халыҡ көйҙәренә килгәндә, уларҙың фортепиано өсөн уңышлы эшкәртелгәндәре бик күп түгел. Шуға ла мин әлегә уларға ныҡлап тотонғаным юҡ, әммә киләсәккә ниәттәр бар. "Ялсығол"до мин үҙем эшкәртеп уйнағайным. Концерттарҙа "Шәл бәйләнем", "Порт-Артур" көйҙәрен уйнағаным бар. Ә инде халҡыбыҙҙың оҙон көйҙәренә килгәндә, улар фортепиано тарафынан уйналғанда бер аҙ үҙгәртелеберәк, бүтәнсәрәк яңғыраш табыуы ихтимал, сөнки был инструмент күберәк эмоциональ-визуаль кимәлдә башҡарыла. Ә оҙон көйҙә һүҙҙәр мәғәнәһен дә еткерә алырға кәрәк, шуға ла музыка ҡоралдары араһынан ҡурай ғына уны бөтә камиллығында уйнай ала.

Башҡорт сәнғәтенең киләсәген күҙаллағанда, ул артабан да ике йүнәлештә барасаҡтыр, тим. Уның береһе - классика һәм милли сәнғәт, икенсеһе - ультразаманса музыка. Заманса музыка һәр ваҡыттағыса Европа артынан эйәрер инде, ә халыҡсанлыҡ, Европанан файҙалы алымдар үҙләштереп, үҙ традицияһына тоғро ҡаласаҡ. Минеңсә, заманса музыка билдәле бер ваҡыт өсөн генә актуаль. Ә халыҡ көйҙәре һәм классика, хатта бер аҙ күләгәлә булһа ла, мәңге йәшәйәсәк. Ғөмүмән, халыҡ йыры һәм классик әҫәрҙәр бер-береһенә яҡын тора. Шуға ла беҙҙең халыҡ йырҙарын сит илдә лә яратып тыңлайҙар, аңлайҙар, тоялар һәм баһалайҙар.

### Үҙеңдән ситләшергә ярамай

Профессиональ музыкала, әйтәһе лә түгел, күпкә ауырға тура килә. Һәр ваҡыт үҙ өҫтөңдә эшләүҙе, көстө, ныҡышмалылыҡты талап итә. Һигеҙәр сәғәт буйы туҡтауһыҙ фортепиано артында ултырырға тура килгән саҡтар ҙа була. Беҙҙең өсөн тиҙ арала яуланған популярлыҡтан бигерәк, сифатлы башҡарыу оҫталығына өлгәшеү мөһим. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙә классик йүнәлештәге эшмәкәрлек киң даирәләге тамашасыға йүнәлтелмәгән. Шуға ла беҙҙең концерттарға, эстрада сәнғәтенән айырмалы рәүештә, юғары сәнғәтте аңлаған классик музыка һөйөүселәр генә йыйыла. Ә бына сит илдәрҙә, бигерәк тә Европала боронғо һәм классик музыка элек-электән юғары баһалана һәм был беҙҙең файҙаға, беҙ унда иркен ҡатнашып, үҙебеҙҙе һынау мөмкинлегенә эйәбеҙ. Әле беҙҙә рэп, поп стилендә башҡарыусылар Европа музыкаһын бер аҙ башҡортлаштырып йырлай. Уларҙан "урланған" музыка менән генә сит илгә сығып булмай бит инде. Ультразаманса музыка өсөн бөгөн инглиз теле ҡулай. Тимәк, донъяға ҡарашыңды, кешелеккә ҡарата әйтер фекереңде һүҙҙәр теҙмәһе менән еткереү мөһим булған рэп стилендә башҡортса йырлап, донъя кимәленә сығып булмауы көн кеүек асыҡ. Сөнки сит ил тамашаһына үҙҙәрендә булмаған, бығаса ишетелмәгән мәҙәниәтте күреү ҡыҙығыраҡ. Тимәк, үҙеңде донъяға танытҡың килә икән, үҙ-үҙеңә тоғро ҡалырға, үҙеңдән эҙләнергә кәрәк. Шулай ҙа һәр кем үҙ мөмкинлегенә, үҙ теләгенә ҡарап сығыш яһай. Әгәр бөгөн эстрадала еңел-елпелек тоябыҙ икән, уныһы ла булырға тейештер. Улар бит ваҡытлыса ғына. Шуны ла күҙәткәнем бар: рок музыкаһы башҡарыусылары тора-бара классикаға киләләр. Мин үҙемде тик классика менән генә сикләргә тырышмайым. Башҡорт йәштәре ижады менән дә ҡыҙыҡһынам, заман менән бергә атлап, уның киң даирәләрен байҡап барам.

### Еңеүҙәрҙә ҡурҡыуҙы еңергә өйрәндем

Сит илгә тәүге тапҡыр сығыуым - Италияла үткән Халыҡ-ара музыканттар конкурсында ҡатнашыуым булды. Был тәүге конкурс һәм тәүге еңеү ине. Артабан 2003 йылда Киевта "XXI быуат сәнғәте" Халыҡ-ара конкурсында ҡатнаштым. Унда беҙ ике номинацияла ла - яңғыҙ һәм ансамбль менән башҡарыу - беренсе урынды яулап ҡайттыҡ. Унан һуң Ырымбурҙа Ростропович исемендәге конкурста, шунан Болгарияла үткән "Өмөттәр. Таланттар. Оҫталар" конкурсында ҡатнаштым. Һуңғыһы байрам кеүек үткәйне. Унда ла "Яңғыҙ башҡарыу", "Уҡытыусы һәм уҡыусы" номинацияларында беренселек беҙҙә булды. 2009 йылда Өфөлә үткән З.Исмәғилев исемендәге I башҡорт фортепиано музыкаһы башҡарыусылары конкурсында шулай уҡ I премия лауреаты исеменә лайыҡ булдым. Иң ҙур еңеүемде, моғайын да, быйыл февраль айында Париждан алып ҡайтҡанмындыр. Мин унда программаға индерелгән мотлаҡ башҡарыла торғандарҙан Скрябин, Гендель, Прокофьев, Дебюсси әҫәрҙәренән тыш, Айрат Ҡобағошовтың әҫәрен башҡарҙым. Ғөмүмән, мин сит илдәргә сыҡҡан һайын үҙебеҙҙең башҡорт композиторҙары әҫәрҙәрен уйнайым. Улар - Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Урал Иҙелбаев һ.б. Беҙ был конкурста 45 минут буйы туҡтауһыҙ уйнарға тейеш инек, был тотош концерттың бер өлөшөн тәшкил итә. Бик ауыр булды. Әйткәндәй, был конкурста 19-24 йәш категорияһындағы ҡатнашыусылар араһында мин иң кесеһе инем. Берәүҙе лә минән насарыраҡ уйнай, тип әйтеп булмай, һәр кемдең сығышы үҙенсәлекле килеп сыҡты.

Сәхнәлә иң мөһиме: тулҡынланыу ҡурҡыуға әүерелмәҫкә тейеш. Ҡурҡыу һине биләп ала икән, аң томалана, ҡулдар ҡалтырай башлай, йә һин киләһе нотаны онотаһың, йә әҫәрҙе автоматик рәүештә башҡараһың. Ә инде ошо тулҡынланыуҙы ыңғай йүнәлешкә борғанда ул музыкантҡа ярҙам ғына итәсәк. Ҡурҡыуҙы еңә белергә өйрәнергә кәрәк. Миңә, мәҫәлән, уҡытыусым сәхнәгә сығыр алдынан банан ашарға ҡуша. Мин хәҙер гел шулай итәм һәм был ысул бик ныҡ ярҙам итә. Ә бына валериан экстрактын эсергә ярамай, ул кешене артыҡ тынысландырып, башты томаландырыуы ихтимал. Рихтер, мәҫәлән, сығыш яһар алдынан бер-ике ҡалаҡ шәкәр ашар булған. Күптәр шулай уҡ шоколад ашай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһы ғына өлкәлә ижад итмә, үҙ асылыңа тоғро ҡалғанда, тамырың халҡыңдың үткәненә, уның традицияларына ерегеп үҫкәндә генә, көслө үҫеш алырға, юғары бейеклектәргә үрләргә мөмкиндер. Быны беҙ Искәндәр ижады аша ла күрҙек. Эшмәкәрлеген классик йүнәлештә алып барыуына ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ көй-моңдарынан алыҫ китмәй, шуны бергә үреп алып барыуы - бер һоҡландырһа, ҡала егете Искәндәрҙең башҡортса таҙа итеп һөйләшеүе, беҙҙең халыҡҡа ғына хас тыйнаҡлығы, баҫалҡылығы, ихласлығы тағы ла бер һоҡланыу уятты.**

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СКЛЕРОЗДЫ...

## ҡояш менән дауала

■ Тәмәке тартыу бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай. Айова штаты университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙың уйлау һәләте түбәнәйә. Тест ярҙамында ғалимдар баш мейеһе функцияларын тикшерә һәм фекерләү функцияһының боҙолоуын асыҡлай. Был ҡатын-ҡыҙ организмында бүленеп сыҡҡан эстроген гормоны менән бәйле һәм тәмәке ҡанда был матдә концентрацияһының аҙайыуына килтерә.

■ Әгәр ҙә башығыҙ йыш ауырта икән, дарыуханаға барырға ашыҡмағыҙ. Тайвандың милли университеты табиптары белдереүенсә, баш ауыртыуын ябай массаж бөтөрә. Бынан тыш, массаж күңелһеҙ хәлдәрҙе оноторға мөмкинлек бирә. Ғалимдар фекеренсә, массаж депрессияны еңергә лә ярҙам итәсәк.

■ Эҫе көндәрҙә күптәр лимонад менән һыуһынын ҡандырырға күнеккән. Асыҡланыуынса, лимонадтың дауалау үҙенсәлеге лә бар икән. Лимонад составындағы калий цитраты, мәсәлән, бөйөрҙә таш барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Был татлы эсемлек антисептик һәм бактериаль үҙенсәлеккә лә эйә. Иң мөһиме, лимонад яҡшы сифатлы булырға тейеш.

■ Ҡайһы йөштә тойғолар көслөрәк, тип уйлайһығыҙ? Канаданың Монреаль университеты ғалимдары кеше ни тиклем олораҡ, улар араһында тойғолар ҙа көслөрәк, тип иҫәпләй. Белгестәр быны махсус иҫәпләү системаһы ярҙамында асыҡлаған. Оло йәштәгеләр әйтеүенсә, бәхетле ғаилә тормошоноң рецепты ябай ғына: ир менән ҡатын бер береһе менән ни тиклем күберәк аралаша, тойғолар ҙа шул тиклем көслө була.

■ Тропикта йәшәүселәрҙә склероз сире һирәгерәк осрауы ғалимдар тарафынан күптән иҫбатланған. Мэдисондағы Висконсина университеты белгестәре склероз организмға D витамины етешмәгән осраҡта барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Тимәк, ҡояш был сирҙең барлыҡҡа килеүен туҡтата ала, ти улар.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡтүлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сөтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Тулы көүҙәле балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда яйыраҡ үҫешә, тигән фекергә килгән Төньяҡ Каролина университеты ғалимдары. Бындай балалар һуңыраҡ шыуышырға өйрәнә, һөҙөмтәлә дөйөм организмдың хәрәкәт әүҙемлеге түбәнәйә. Ғалимдар билдәләүенсә, баланың бәләкәй саҡта тулы көүҙәле булыуы уның артабанғы ауырлығына ла йоғонто яһауы ихтимал.

■ Ҡартайғас, енел аҡыллылыҡ менән яфаланырға теләмәһәгеҙ, йәш саҡтан уҡ сәләмәт тормош алып барығыҙ, тип кәңәш итә Эдинбург университеты ғалимдары. Әгәр ҙә кеше спорт менән шөғөлләнһә, насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмаһа, дөрөҫ туҡланһа, был сир менән ауырыу ихтималлығы 20 процентҡа кәмей.

ЙӨНСЕЛ ЙӨНЛӘР

# ЕГЕТ КЕШЕГӘ...

## етмеш төрлө һөнәр төҫ

**Кем ул бөгөнгө башҡорт эшҡыуары? Уларҙы ниндәй мәсьәләләр борсой? Башҡортостанда эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн ниндәй саралар күрелә? Ошолар хаҡында һүҙ алып барылды III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек сиктәрендә үткән "Башҡортостанда башҡорт эшҡыуарлығы торошо һәм үҫеш перспективалары" тигән республика семинар-кәңәшмәһендә.**

БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары, сәнәғәт, инвестиция һәм инновация сәйәсәте министры Юрий Пустовгаров: "Халыҡта эшҡыуарлыҡ рухы һәр ваҡыт булған. Элек бит бер кем дә эшһеҙ ултырмаған, ауылда һәр кем ни менәндер шөғөлләнгән. Ошоларға кире әйләнеп ҡайтырға кәрәк", - тигәйне үҙенең сығышында. Эйе, "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигән башҡорт халыҡ мәҡәләле тап шуға ишара яһай. Үҙебеҙҙең һөнәрҙәрҙе иҫкә төшөрөргә ваҡыт. Миҫалға атайымды килтерер үтәм: уның һәр миҙгелгә күрә тәғәйен шөғөлө бар. Әйтәйек, ул ҡышын һунар итә, ат саналары эшләй, аҙын ҡош-ҡортҡа талдан оя үрә, кәрәк-балта һаплай, селек һепертке бәйләй, йәйен умартасылыҡ менән шөғөлләнә. Атайолатайҙарынан отоп алған һөнәрҙәре уны йыл әйләнәһенә ғаиләһен тәьмин итерлек килем тупларға ярҙам итә. Тап шуға ла колхоздар тарҡалыуы уның көмәһен ҡомға килтереп терәмәне. Атайым төп шөғөлдәренең береһен - умартасылыҡты табыш килтереүсе төп сығанаҡҡа әүерелдерҙе.

90-сы йылдарҙа үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, бюджет өлкәһендә эшләүселәр эшҡыуарлыҡ тигән яңы ағымға ҡушылып, күпселеге алыпһатарлыҡ менән мауығып киткәйне. Әле килеп милләттәштәребеҙ эшҡыуарлыҡты киңерәк мәғәнәлә аңлай, эш асыу тигәндән, тауар етештереп һатыу һәм халыҡҡа ниндәйҙер хеҙмәт төрө күрһәтеү отошлораҡ икәненә төшенә башланы. Бөгөнгө эшҡыуар ҡыяр үҫтереп һата, ҡаҙ үрсетә, һөт, ҡымыҙ етештерә, баҫыу эшкәртә, сауҙа нөктәләре, хеҙмәтләндереү үҙәктәре аса. Хәҙер ул үҙе табыш алып ҡына ҡалмай, бүтәндәрҙе лә эшле итә. 2009 йыл мәғлүмәттәре буйынса республикала кесе һәм урта эшҡыуарлыҡта эшләүсе 125 мең кеше иҫәпләнә. Был һан 2008 йылға ҡарағанда 7,6 процентҡа артҡан. Әммә ул әлегә юғары күрһәткестәр тураһында һөйләмәй. "Кесе эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса Волга буйы федераль округында лидер, Рәсәй Федерацияһында һигеҙенсе урынды биләп тороуыбыҙға ҡарамаҫтан, эшләйһе эштәребеҙ күп әле, - тип әйтеп үтте БР-ҙың эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты рәйесе Ринат Зәйнуллин. - Әйтәйек, майҙаны буйынса беҙҙең республика ҡаҙәре булған Финляндияла (уның баш ҡалаһы Хельсинкиҙа 600 мең халыҡ йәшәй) 250 мең эшҡыуар иҫәпләнә. Беҙ хәҙер Рәсәй субъекттарына ҡарап эш итмәйбеҙ, уларҙан өйрәнәһе, үҙләштерәһе яҡшы ысулдарҙың барыһын да беҙ эшләп ҡараныҡ инде, хәҙер беҙгә алға киткән Европа илдәренән өлгө алырға, тәжрибә тупларға кәрәк".

Ә юғары күрһәткестәргә өлгәшеү, яңы бейеклектәр яулау өсөн беҙ, башҡорт халҡы, нисек итеп эш итергә тейешбеҙ һуң? Семинар барышында Стәрлетамаҡтан килгән эшҡыуар дәүләт ярҙамын тоймауға, был йүнәлештә эштәр алып барылмауына зарланды. Әлбиттә, үҙ эшен яңы асҡан эшҡыуарҙарға күтәрелеп китеү өсөн дәүләт ярҙамы, һис шикһеҙ, кәрәк. Ринат Зәйнуллин әйтеп китеүенсә, улар күрһәтелә лә, тик кәрәкле документтарҙы теүәлләп, үҙ ваҡытында хәстәрлек күрергә кәрәк. Былар барыһы ла раҫ, әммә дәүләт ярҙамын алыу - ул әле эшең алға китәсәк, тигәнде аңлатмай. Кемгәләр зарланып, юҡлыҡҡа һылтанып ултырыр заман үтгел. "Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй", йәки "Күмәкләгән яу ҡайтарған" тигәндәй, бергә тупланып, кәңәш-төңәш итеп, бер-беренә ярҙам күрһәтеп эшләгәндә генә үҙең дә, күршең дә уңасаҡ. Быны беҙ Әбйәлил эшлеклеләре миҫалында күрҙек. Улар иңгә-иң терәшеп эш итә, шул уҡ ваҡытта бер-береһенең уңышына аяҡ салмай, һәр кемдең үҙ йүнәлеше һәм тап шуға ла уларҙың эше алға бара.

"Үҙең аяҡҡа баҫтыңмы, иптәшеңә ҡул бир" - бына ошо булырға тейеш бөгөнгө башҡорт эшҡыуарлығының төп девизы. Был өлкәлә 25 йыл тәжрибәһе булған билдәле эшҡыуар Сәғит хажи Исмәғилев әйтелгәндәрҙе ҡеүәтләп, тағы ла шуны өҫтәне: "Дингә килгәс, һуңғы 15 йыл эсендә шуны аңланым: кеше Исламда булғанда ғына уңышлы эшҡыуар булып китә ала. Изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә лә, хәҙистәрҙә лә нисек дөрөҫ йәшәргә, дөрөҫ эшләргә, уңышлы кеше булырға - барыһы ла асыҡ итеп яҙылған. Беҙ иң мөһимен - ата-бабаларыбыҙ ауыр шарттарҙа ла нисек лайыҡлы йәшәй алыуын иҫтән сығарғанбыҙ. Улар ерен дә һаҡлаған, яу ҙа сапҡан, ҙур ғаиләһен дә аҫрай алған бит. Беҙ шуны аңларға тейешбеҙ: ризыҡты беҙгә Аллаһ бирә, ниндәйҙер ҙур уңыштар ҡаҙанабыҙ икән, был да Аллаһтан, шунлыҡтан мин-минлеккә бирелергә, һауаланырға кәрәкмәй. Юғалтыу кисереп, хәлең көрсөккә килеп терәлгәндә лә, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, бер туғаныңа ышанысың ҡалмағанда ла, Аллаһ барлығын онотма. Беҙ яңғыҙ булғанда бер нимәгә лә өлгәшә алмаясаҡбыҙ, ҙур ағымда юғалып ҡаласаҡбыҙ. Әгәр һин бөгөн аяғыңа ныҡлы баҫып киткән икәнһең, күршеңә ярҙам ит, унан һуң был икәү өсөнсөнө күтәрһен. Был беҙҙең ер, һәм

МАТУР ХӘТИРӘЛӘР

# ТӘМЛЕ ӘЙБЕР ӘҘ БУЛАМЫ,

## әллә иҫкә алырлыҡ бәхетле мәлдәрме?

**Ниндәйҙер матур иҫтәлектәренәме, хыялдарынамы сумып, йылмайып үтеп барыусы оло йәштәрҙәге ханымды күреп, көнләшеп ҡуйҙым. Ә минең яҙ айы алдында була торған бер сәйер күңел төшөнкөлөгөнән сыға алмай йөрөгән мәлем ине (Заманаһы шулай, урамда кемделер туҡтатып һүҙ ҡушыу, таныш булмаған кеше менән һөйләшеү юҡ. Бигерәк тә йәштәргә шундай тәрбиә бирелгәнме - һүҙ ҡушһаң, йүгереп ҡаса).**

Ә минең берәй матур хәбәр ишеткем килә. Был ханым йылмайып атлай бит, тимәк, уйҙары, хәтирәләре матурҙыр, тип: "Миңә лә һөйләгеҙсе матур хәтирәгеҙҙе...", - тип өндәштем. Ул башҡорт апайы булып сыҡты.

- Бына әле саф һауа һулап киләйем, тип, урамға сыҡҡайным. Уйланып китеп бара инем, ҡыҙыҡ хәтирәләргә юлыҡтым. Әле беҙ бер туҡталышты ла йәйәү үтергә яҙҡауланабыҙ. Ә мин үҫкән балалар йортоПушкин урамындағы әле Аксаков исемен йөрөткән баҡсаның ҡул арьяғында ине. Беренсе класты шул йорттан Красин урамында урынлашҡан 9-сы башҡорт мәктәбенә йөрөп уҡыныҡ. Бына әле һанап барам: ҡыш тимәй, буран тимәй, ямғыр тимәй, ҡулдарыбыҙға портфель тотоп, әллә биш туҡталышты йәйәү атлағанбыҙ. Ленин урамынан үткәндә трамвайҙар йөрөүен күреп: "Бер кешеләр һәр ваҡыт туҡталышта баҫып тора, ә икенселәре һәр саҡ трамвайҙа китеп бара", - тип уйлай торғайным. Сөнки бер ҡасан да трамвайҙа йөрөгәнем булманы. Ә беҙҙе оҙатып йөрөүсе тәрбиәсе Сажидә апай бер көн аптекаға инеп, "С" витамины һатып алғайны, әле шул иҫемә төштө. Шуға йылмаям. Апай был "5" тин ҙурлығындағы аҡ витаминдарҙың һәр береһен дүртәр өлөшкә бүлеп сыкты ла, һәр балаға дүрттән бер өлөшөн өләште (Апай кескәй генә эш хаҡы алып йөшәгәндер, тип уйлайым мин хәҙер). Беҙ йылмайышып ул өләштәргә ҡаптыҡ. Шул саҡ Сажидә апай: "Балалар, әгәр һеҙҙе һыйлаһалар, яуап итеп нимә әйтергә кәрәк?" - тип һораны. Шул саҡ Шәүкәт исемле бер малай: "Ә ниңә бик әҙ?" - тип ысҡындырмаһынмы. Апай ҙа, балалар ҙа гөр килешеп көлөп ебәрҙе. Апайыбыҙ: "Балалар, тәмле әйбер әҙ була ул", - тип өҫтәне. Беҙ күмәкләшеп: "Рәхмәт, апай!" - тинек.

Был Мәҙинә исемле ханымдың хәтирәһен тыңлап йылмайһам да, ниңәлер күңелем төбөндә әскелтем хис ҡалды. Тәмле әйбер генә әҙ буламы? Әллә тормош юлын үткәндә һөҡланып иҫкә алырлыҡ бәхетле саҡтар әҙ буламы?

**Айгөл АХУНОВА**

***✓ Үҙеңдең ҡулыңдан килмәй икән, бында дәүләт ярҙамы ғына һине ҡотҡара алмаясаҡ. Ҡаршылыҡтар һәр ваҡыт булып тора. Үҙеңә сос, үткер, хәстәрлекле, мәғлүмәтле, ныҡышмал һәм тырыш булырға кәрәк.***

унда мул һәм етеш тормош көтөүсе милләттәштәребеҙ тиңтәләрсә, йөҙҙәрсә генә түгел, ә күп булырға тейеш".

Башҡорт эшҡыуарлығын киңерәк йәйелдереү өсөн бер-береһенә бәйле булған, әммә төрлө йүнәлештәге һәм, иң мөһиме, урындағы халыҡ ихтыяж кисергән эш асыу күпкә отошло буласаҡ. Тап шуға ла, Ринат Зәйнуллин еткереүенсә, быйылдан теге йәки был райондарҙа кәрәкле булған эшҡыуарлыҡ төрҙәрен үҫтереү өсөн ғилми-тикшеренеү эштәре алып барыласаҡ. Был, берҙән, конкурентлыҡты кәметәсәк һәм яҡшы табыш алыу мөмкинлеген бирәсәк, икенсенән, районның иҡтисади-социаль хәлен яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк. Ғөмүмән, башҡорт халҡының киләсәген ауыл һаҡлай. Ә ауылдар мәктәптәр һәм эш урындары булғанда, йәғни эшҡыуарлыҡ үҫешкәндә генә йәшәйәсәк. Ауылдарҙы үҫтереү өлкәһендә республикала бик күп эшләнә. Шуларҙың береһе - 500 кешенән кәм булған ауылдарҙа халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итәсәк сауҙа нөктәһе асыусыларға гранттар таптырылыуы. Әйткәндәй, райондарға дәүләт ярҙамы мөмкинлектәре тураһындағы мәғлүмәттәр күпселек осраҡта барып етмәй, йәиһә улар уның менән файҙаланыу юлдарын белмәй. Тап шуға ла семинар барышында райондарҙа төрлө мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе эшҡыуарҙар советы ойоштороу тәҡдиме яңғыраны һәм резолюцияның бер пункты итеп ҡабул ителде. Шулай уҡ башҡорт эшҡыуарлығын күтәреү юлдарының бер сараһы итеп Юрий Пустовгаров: "Беҙгә сит илдә йәшәгән эшҡыуар милләттәштәребеҙҙе ҡайтарырға һәм ата-бабалар ерендә беҙҙең менән бергә эштәрен дауам иттерергә инандырырға кәрәк", - тигән фекер-тәҡдим дә индерҙе.

Тағы шул: һәр кем эшҡыуар булып китә алмай. Кемдер был эште ойоштороға, ә кемдер эшләргә тейеш. Был тәбиғи. Тап шуға ла беҙгә, көнсөллөктән һәм ғорурлыҡтан өҫтөн булып, ситтәргә түгел, ә үҙебеҙҙең халыҡҡа хеҙмәт итергә кәрәк. Шул саҡта беҙҙең һәр кемебеҙ ашлы, эшле, ә илебеҙ бай һәм күркәм булыр, иншаллаһ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты 2010 йылдың 1 апреленән кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарынан, инфраструктура ойошмаларынан түбәндәге финанс ярҙамы төрҙәренә документтар ҡабул итә башланы: башланғыс эшҡыуарлыҡты субсидиялау, страховка взностарын, лизинг түләүҙәрен, күргәҙмә-йәрминкә сараларында ҡатнашыу буйынса сығымдарҙы, энергия һаҡлау һәм электр селтәре хужалығы объекттары эштәренә бәйле сығымдарҙы өлөшләтә субсидиялау. Документтар Өфө ҡалаһы, К.Маркс урамы, 37-се һанлы йорт адресы буйынса көн һайын сәғәт 10.00-дән 17.00 сәғәткә тиклем ҡабул ителә. Шулай уҡ һәр кесаҙна 10.00 сәғәттән 12.00 сәғәткә тиклем БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты рәйесе Ринат Зәйнуллин һеҙҙе шәхси һорауҙар буйынса ҡабул итә. Тулыраҡ мәғлүмәтте www.mbis.bashkortostan.ru сайтына йәки www.mbbash.ru интернет-порталына инеп ҡарай алаһығыҙ.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Илшат ҒӘЛИН, Өфө ҡалаһы:**

- Беҙҙең халыҡ ни өсөндөр эшҡыуарлыҡҡа тотонорға ҡурҡа. Унан ҡурҡырға ярамай, был беҙҙең ҡулдан килә торған эш. Беҙгә бары тик берләшеп эшләргә кәрәк. Шулай иткәндә генә беҙҙә көс буласаҡ. Элек беҙҙең "Мираҫ" тигән ойошма эшләп килә ине. Беҙ унда комплекслы программа төҙөп, егеттәрҙең һәләтенә ҡарап, уларҙы төрлө йүнәлештә үҫтерә инек. Әйтәйек, кемдеңдер эшҡыуарлыҡ һәләте юҡ, әммә унан яҡшы спортсы сығасаҡ. Артабан инде үҙ эшен яйға һалған эшҡыуар спортты үҫтереүгә аҡса индерә башлай. Бына шулай итеп эшләгәндә беҙ башҡорт донъяһын һәр яҡлап үҫтерә алыр инек. Ғөмүмән, эшҡыуарлыҡ беҙҙең милләттең матди хәлен күтәреп кенә ҡалмай, ә шул нигеҙҙә бүтән йүнәлештәргә лә юл асасаҡ шөғөл ул.

Беҙ Төркиәнән мосолман кейемдәрен, дини атрибутика килтереп һатыу эшен асып йөрөйбөҙ. Әлбиттә, мосолман кейемдәрен үҙебеҙҙә етештергәндә яҡшы булыр ине, тик туҡыма һатып алыу әлегә ҡиммәткә төшә. Киләсәктә был эште лә яйға һалырбыҙ, тип уйлайым. Башҡорт телендә дини баҫмалар сығарыу эше лә бөгөн өлгөрөп еткән мәсьәлә. Юғиһә, беҙгә дини китаптар ҙа Ҡаҙан менән Мәскәүҙән килә.

**Нияз АЛТЫНҒУЖИН, Әлшәй районы:**

- Эшҡыуар - ул ҡурҡмайынса эш иткән кеше. Элек-электән эшҡыуарлыҡ менән барыһы ла шөғөлләнмәгән, кемдең көсөнән, һәләтенән килә, шулар ғына тотонған был эшкә. Әле лә шулай: үҙеңдең ҡулыңдан килмәй икән, бында дәүләт ярҙамы ғына һине ҡотҡара алмаясаҡ. Ҡаршылыҡтар һәр ваҡыт булып тора. Үҙеңә сос, үткер, хәстәрлекле, мәғлүмәтле, ныҡышмал һәм тырыш булырға кәрәк.

Мин үҙем тәүҙә фермер булып эшләнем. Әле автомобилдәр ремонтлау кеүек халыҡты хеҙмәтләндереү төрҙәре менән шөғөлләнәм. Шулай уҡ электр тауарҙары менән һатыу иткән сауҙа нөктәләрем дә бар. Эште төрлө йүнәлештә алып барырға кәрәк, йәғни запас юлдар һәр ваҡыт булырға тейеш, ҡайһыһы ғаиләнде аҫрауға, ҡайһыһы төп бизнесыңа китә.

**Рәйес ИСХАКОВ, Стәрлебаш районы:**

- Мин 18 йыл мәктәптә физкультуранан уҡыттым. Эш хаҡы бер бак бензинлыҡтан да артмай ине. Аптыраған көндән эшҡыуарлыҡҡа тотондом, 11 йыл була инде. Мебель эшләп һатабыҙ. Хәҙер үҙем дә килем алам, бүтәндәрҙе лә эш урындары менән тәьмин итәм. Әммә былар миңә еңел бирелмәй. Минең бөгөн мебель эшләү цехым, етештереү ҡорамалдарым, техникаларым бар - былар әллә нисәмә йылдар тир түгеп табылған хеҙмәт емеше. Юғиһә, ҡайһы бер кешеләр, бөгөн эш астың да иртәгә байып киттең, тип, еңел генә уйлай. Стәрлетамаҡта етештерелгән тауарымды һатыусы алты сауҙа нөктәм бар. Бөгөн конкуренттар шул тиклем күп, һәр кем үҙ тауарын һатыу өсөн көрәш бара. Урманда бүре аҙыҡ өсөн нисек көрәшһә, бында ла шулай. Эргә-тирәлә - Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалалары. Ошо эшҡыуарҙарҙы йырып сығып ҡара. Ҡайһы саҡта үҙеңә зыянға ла эшләргә тура килә. Әммә бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелергә ярамай.

## *БЫЛ - ГОНАҺ!*



# ЭРЕЛӘНЕҮ, ҒОРУРЛАНЫУ, ТӘКӘББЕРЛӘНЕҮ

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Бер кеше үҙе менән һоҡланып, кейеменә маҡтанып китеп барған. Аллаһ бының өсөн ергә уны йоторға бойорған һәм уның унда батыуы Ҡиәмәт көнөнә тиклем дауам итәсәк".

"Залим һәм һауалы кешене Ҡиәмәт көнөндә ваҡ ҡына ҡырмыҫҡа рәүешендә терелтәсәктәр һәм кешеләр уларҙы тапаясаҡ".

Беҙҙең ҡайһы бер ата-бабаларыбыҙ, эрелек - ул Аллаһы Тәғәләгә ҡаршы башҡарылған тәүге "фетнә" тигән.

Аллаһы Тәғәлә "Баҡара" сүрәһенең 34-се аятында былай тигән: "Һәм бына беҙ фәрештәләргә: "Әҙәмгә сәждә ҡылығыҙ", - тип әйттек. Иблистән башҡаһы сәждә ҡылды. Ул ҡарышты, тәкәбберләнде һәм кафырҙарҙан булды".

Иблис кеүек тәкәбберләнгән кешегә имандың файҙаһы булмаясаҡ. Аллаһ илсеһе: "Тәкәбберлек хәҡиҡәтте ҡабул итмәү һәм кешеләргә булған нәфрәт", - тигән.

Ҡөрьәндең "Лоҡман" сүрәһенең 18-се аятында: "Һәм кешеләр алдында сырайыңды һытма, һәм Ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Аллаһ тәкәбберҙәрҙе, үҙен генә яратыусыларҙы, маҡтансыҡтарҙы яратмаҫ", - тип яҙылған.

Аллаһ илсеһе: "Бөйөклөгөм - минең кейемем. Ҡеүәтем - минең бөркәнсегем. Был йәһәттән минең менән ярышыусыларҙы мин утҡа ташлаясаҡмын", - тип әйткән.

Икенсе бер хәҙистә былай тиелә: "Бер көндө тамуҡ һәм ожмах бер-береһе менән бәхәсләшә башлаған. Ожмах: "Эй, Раббым! Ниңә миңә тик көсһөҙҙәр һәм ҡеүәтһеҙҙәр генә инә?" - тигән".

Ә "Ҡасас" сүрәһенең 83-сө аятында: "Бына әхирәт йорто. Беҙ уны Ер йөҙөндә маһайырға һәм боҙоҡлоҡ таратырға теләмәгән кеше өсөн әҙерләнек. Һәм һуңғы көн - тәҡүәлеләргә!", - тип әйтелгән.

Аллаһ илсеһе: "Тамуҡта кемдәр буласағын белгегеҙ киләме? Улар - йәлләй белмәгән дошман, һаран һәм тәкәббер кеше", - тигән. Тағы ла Аллаһ илсеһенең шундай һүҙҙәре бар: "Тамсы тиклем генә лә тәкәбберлеге булған кеше ожмахҡа инмәҫ".

## *УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Эске донъяң менән яҡты эҙ ҡалдыр

**"Цзин", йәки "Үҙгәреш китабы" - был Конфуций ҡанундары тупланған биш баҫманың береһе. Өс мең йыллыҡ тарихы булған был китаптағы кәңәштәрҙең характер һәм әхлаҡты үҫтереү өсөн һәр заман өсөн файҙалы булыуын күптәр раҫлай. "Уларҙың иң яҡшылары беҙҙең характерыбыҙҙы нығытыу өсөн боронғолоҡтоң күп фекерҙәре һәм ғәмәлдәре менән таныштыра. Уларҙа беҙ үҙебеҙҙең рухи донъябыҙҙы байытыу өсөн ҡуллана алырлыҡ йәшерен хазина ята".**

Шәхси характерыбыҙҙың күркәм яҡтарын үҫтерергә ярҙам итер өсөн "хазиналар тулы боронғо ҡумтаны" асырға, тарихи шәхестәр тормошон өйрәнергә генә кәрәк, тимәк. Әммә кемдәрҙе ысынында ла бөйөк тип атап була? Тарихта эҙ ҡалдырған һәр кем герой була аламы? Һәр кем Гитлерҙың кем булыуын белә, әммә бик аҙҙар ғына уны герой тип атай. Шулай уҡ оло тормош юлы үтеп,  мәҙәниәтебеҙгә нигеҙле йоғонто яһап та, иғтибарҙан ситтә тороп ҡалғандар бихисап. Ә ҙур билдәлелек менән файҙаланған кино һәм эстрада йондоҙҙары һуң? Йыш осраҡта улар ысын герой һыҙаттарын сағылдырамы икән?

Ысын бөйөклөктөң дан һәм йәмғиәттә тотҡан урын менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Был шәхестең дөйөм эш өсөн индергән өлөшө аша сағылған эске сифаты. Уны шәйләүҙәре лә, шәйләмәүҙәре лә ихтимал. Ул халыҡ алдына сығарып күрһәтеүгә мохтаж түгел, нигеҙле һәм ныҡлы була барған һайын ул үҙе өсөн үҙе һөйләй. Героик шәхестәр беҙҙең генә түгел, беҙҙең менән аралашҡан һәр кемдең тормошон яҡшыртасаҡ принциптарҙы йәки мөнәсәбәттәрҙе тоҡандырып, мөхәббәткә хеҙмәт итә. Бөйөк кешеләрҙең тормош юлы беҙҙең өсөн маяҡ булып тора ала.

"Цзин": "Тарихҡа өлгәшеү юлы уны белеү менән генә сикләнеп ҡалырға тейеш түгел, ә был ғилемде ҡулланып, үткәндәрҙең актуаллеген асырға кәрәк", - тип өйрәтә. Бөйөк кешеләрҙең үткән юлын өйрәнергә ҡарар ҡабул итеп, беҙ ысынлап та лайыҡлы йәшәлгән тормош серҙәрен асабыҙ һәм уны үҙебеҙгә өлгө итеп алабыҙ. Шулай итеп, беҙ теге йәки был геройҙарҙың биографияһын тәшкил иткән хазиналар менән тулыһынса файҙалана алабыҙ.

Ә һин үҙеңә өлгө итеп ҡуйырҙай кемдә был бөйөклөктө күрәһең? Кем үҙенең ҡаҙаныштары менән һиндә һоҡланыу уята? Һинең оло ихтирамыңды яулаған кешенең ниндәй ҙә булһа сифаттарын үҙеңдең исемлеккә индерә алаһыңмы? Улар ысынлап та һин үҙ тормошоңда ҡулланырға теләгән сифаттармы икән һуң? Әгәр юҡ икән, бүтәнде һайла, әгәр ҙә "эйе" икән, әйҙә, был бөйөк кешеләрҙең һүҙҙәре һәм ғәмәлдәре һинең тормошоңа ла инһен.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ҺУҒЫШТЫ ҠУРАЛМАЙЫМ...

# ӘЛЕ БУЛҺА ХӘТЕРЕМДӘ...

## икмәк тәме, ҡанлы бушлат



**Көтмәгәндә илебеҙ менән бергә бәләкәй Исән ауылына ла ҙур ҡайғы килде: ҡаты һәм ҡанлы һуғыш башланды. Фронтҡа китеуселәр тәүге көндәрҙә дошманды үҙ илендә тар-мар итеп, тиҙ арала еңеү менән ҡайтасағын белдерҙе. Ләкин таланған, ташланған, яндырылған меңәрләгән ауыл, ҡалалар, һалдаттарҙың күпләп ҡырылыуы тураһында көн дә һуғыш яландарынан ҡайғылы хәбәрҙәр килде. Ошо йылдарҙа беҙҙең ғаиләнән дүрт ағайым һуғышҡа китте. Ҡарт атайымды ла хеҙмәт фронтына алдылар, ләкин колхоз һәм ауыл Советы һорауы буйынса Белорет ҡалаһынан бер нисә аҙнанан кире ҡайтарҙылар.**

Ҡайғы яңғыҙ килмәй, тиҙәр. Шул йылдарҙа ағайым Салауат, ҡустым Әнүәр, һеңлем Үлмәсбикә төрлө ауырыуҙан үлеп ҡалдылар. 1942 йылдың көҙөндә өлкән Әхмәҙулла ағайым Сталинград янындағы ҡаты һуғыштарҙа һәләк булды.

Фронт менән тыл араһында айырма бик аҙ ине. Унда бомба шартлауы, пуля һыҙғырыуы, ҡан ҡойолоуы булһа, бында ауыр эш, ялançаслыҡ һәм аслыҡ хөкөм һөрҙө. Беҙ бөтә мәктәп менән башаҡ йыйып, колхозға тапшырабыҙ, күбәләр яһап, бер өйөмгә ташыйбыҙ. Ҙурыраҡтар ат тырмаһында эшләй, иген таҙарта. Ул йылдарҙа аслыҡтан төрлө үләндәр, киндер орлого, йыуа, һарына ашап, булған сағында картуф, балыҡ менән ҡәнәғәтләнергә тура килде.

Колхоз, эшләүҙәренә ҡарап, ғаиләиҫәбенә аҙнаһына бер тапҡыр ҡырлыҡлы иген яҙып бирә торғайны. Минә әсәйем теккән бәләкәй тоҡ менән ул норманы бик оҙаҡ ташырға тура килде. Бөтә ғаилә менән ағас ҡул тирмәнен әйләндереп, он тартып, икмәк бешерә инек. Көҙөн башаҡ йыйғанда һуғышта йөрөгән Ғәфүр ағайҙың ҡатынын табып, атайым менән ауылға алып ҡайттыҡ. Ул аслыҡтан һәм күп ҡан юғалтыу сәбәпле, бала таба алмай үлеп ҡалды. Тиҙҙән Ғәфүр ағай - һуғышта, ҡарт әсәһе ауылда яҡты донъянан киттеләр. Һуғыштың аҙаҡҡы йылдарында атайымдың ағаһы Зариф ҡатыны менән Магнитка барған саҡта ун йәшлек улын юғалтҡан. Бер нисә көн эҙләгәндән һуң кешеләр: "Улыңды эҙләмә, ул күптән тере түгел", - тигәс, ҡайғырып, илашып, ауылға ҡайттылар.

Шул заманда Түбә ҡасабаһында ете меңгә яҡын халыҡ йәшәй ине. Еңеүҙе яҡынайтыуҙа уларҙың өлөшө ҙур. Ғаилә менән бергә туҡланыу өсөн ун-ун ике бала яҙлы-көҙлө Түбә мәктәбенә 15 саҡрым юл үтеп, йөрөп уҡый инек. Ләкин Олесов, Архипов, Охроменко, Чипенко кеүек 15-16 йәшлек егеттәр, һәр береһе унарлаған малай эйәртеп, кешеләрҙе, бигерәк, ситтән килгәндәрҙе талап, йәберләп йәшәне. Минә лә уларҙан ике-өс тапҡыр ҡаты ғына эләкте, ләкин зәғифләнеүҙән йүгерек аяҡтарым ҡотҡарҙы. Бер көн минең дуҫым Зиннур Ҡыҙрасов аҡсаһын урлатты, беҙ йәшәгән фатирҙың балалары минең сумаҙанды асып, түңәрәк икмәктең яртыһын ашаны. Ике-өс көн сәй менән генә туҡланып, тамам асыҡҡас, ишек алдында оҙаҡ ҡына иланыҡ та, ауылға ҡайтып киттек. Бер нисә көндән һуң беҙҙе аҙыҡ биреп, кире уҡырға алып барҙылар. Яҙ көнө ауылға ҡайтып барышлай юл уртаһында яртылаш тултырылған тоҡ таптым һәм тиҙ генә урман эсенә инеп, асып ҡараным. Унда ике буханка икмәк, бер нисә килограмм шәкәр, сәй һәм төрлө кәнфиттәр бар ине. Уларҙы туйғансы ашап, Талҡаҫтан ятып һыу эстем дә, ҡалғанын әсәйемә алып ҡайтып бирҙем.

- Һин быларҙы урламаныңмы, улым? - тип һораны әсәйем.

- Юҡ, - тиеп ышаныслы яуап бирҙем.

Алтмыш йылдан артыҡ ваҡыт үтте, ләкин шул аҙыҡтарҙың тәме һаман иҫемдән сыҡмай.

Бер көн мәктәптә һуғышта аталарын юғалтҡан балаларға кейем һайлап алырға ҡуштылар. Беҙҙең ауылдан Морат һәм Фуат Ишбирҙиндәргә ике бушлат эләкте. Талҡаҫ күленә барып еткәс, күмәкләп фронттан ебәрелгән бүләктәрҙе асып ҡараныҡ: Моратҡа таҙа, кейерлек бушлат эләккән, ә Фуаттыҡының тышында ҙур тишек, эсендә ҡарайып ҡатҡан ҡан ине. Һабын булмағанлыҡтан, Фуаттың Талҡаҫ ҡомо менән ҡанлы бушлатын йыуып ултырыуы һаман күҙ алдымда тора.

7-се класта уҡығанда дуҫым Зиннур менән уҡытыусыбыҙ Фәриҙә Ғариф ҡыҙы Бикбулатоваға йомош менән индек. Ул беҙҙе күреп, һүҙһеҙ ҡалды: Зиннур яланаяҡ, мин галошта аяғыма бәйләп кейгәнмен. Ул оҙаҡ ҡына юғалып торҙо һәм ҡулына иҫке бер пар ботинка, ике пар носки тотоп килеп инде, беҙҙе кейендереп, ҡайтарып ебәрҙе. Уҡыу тамамланырға бер нисә ай ҡалғас, Зиннур тормош ауырлығы сәбәпле 8-се кластан ташлап, ауыл малын көтөргә яланды. Көҙ көнө мәктәп мөдире Бәҙри Мөжәүир улы Мәмбәтколов уны саҡыртып, имтихандарын таптыртты һәм 9-сы класҡа күсерҙе. Ауыр замандарҙа беҙгә ярҙам ҡулын һуҙып, уҡытып, кеше итеп сығарған уҡытыусыларыбыҙға беҙ мәңге рәхмәтлебеҙ.

Хәҙерге йәштәр оло быуындың тылда һәм һуғыш яланында батырлыҡтар күрһәтеп, Бөйөк Еңеү яулауын мәңгелеккә онотмаһын ине. Ул йылдарҙа берҙәмлек, халыҡтар дуҫлығы, ярҙамсыллыҡ, тырышып эшләү, илһөйәрлек һәм ватансылыҡ тойғолары бик көслө булды. Шул тойғолар хәҙерге һәм киләсәк быуындарға ла хас булып ҡалһын, тигән теләктәмен.

**Исмәғил МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Баймаҡ районы.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 майҙа** М.Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы.

**5 майҙа** Н.Асанбаевтың **"Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** тарихи драмаһы.

**6 майҙа** У.Гәлиевтың **"Ғүмер алда әле"** драмаһы.

**7 майҙа** Ф.Бүләковтың **"Мөхәббәт ҡарағы"** музыкаль комедияһы.

**8 майҙа** Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған **"Тыуған ер һәм йәшәү хаҡына..."** музыкаль-драматик композиция.

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 майҙа** 19.00 сәғәттә, **5 майҙа** 12.00 сәғәттә М.Кәрим әҫәре буйынса **"Беҙҙең өйҙөң йәме"** спектакле.

## Салауат башҡорт дәүләт драма театры

**5 майҙа** Н.Асанбаевтың **"Ете ҡыҙ"** тарихи драмаһы.

**6 майҙа** Ә.Атнабаевтың **"Ул ҡайтты"** драмаһы.

**7 майҙа** Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған **"Шаулы көндәр, данлы көндәр"** исемле театрлаштырылған тамаша.

ИҒТИБАР!

## "Здравур Цып-цып"

Тауыҡ, ҡаҙ йәки өйрәк себештәре үрсетергә ниәтләнһәгеҙ, уларға **"Здравур Цып-цып"** аҙыҡ өҫтәмәһе һатып алырға онотмағыҙ. Себештәр бәләкәй саҡта матдәләр алышыныуы бик әүҙем бара, шуға ла уларҙы был осорҙа бигерәк тә яҡшы ашатырға кәрәк. Аҙыҡ витамин һәм микроэлементтарға бай булырға тейеш, сөнки улар етешмәһә, себештәр йәйыраҡ үҫә, сибек була, рахит һәм башҡа сирҙәр барлыҡҡа килә. Ябай ем ҡошҡорт организмын был элементтар менән тулыландыра алмай. Шуға ла ғалимдар махсус шәхси ихаталар өсөн эшләнелгән **"Здравур Цып-цып"** витамин-минераль өҫтәмәһе тәҡдим итә. Уның составында 12 витамин, 7 минерал, алыштырғыһыҙ аминокислота һәм ферменттар бар. **"Здравур Цып-цып"** менән туҡланған себештәр ныҡыраҡ була, улар яҡшыраҡ ашай башлай, тиҙ үҫә. Был витамин-минераль комплекс ашатыу һөҙөмтәһендә йәш тауыҡтар иртәрәк йомортҡа һала башлай, уларҙың йомортҡаһы эрерәк була.

**Почта бүлексәләрендә һорағыҙ!**

Тауар сертификация үткән.

ӘҘӘМ КҮРКЕ

# БЫЙЫЛҒЫ ЯҘ МОДАҺЫ...

## минималлеккә саҡыра



**Быйылғы яҙ модаһы һәр нәмәлә минималлекте күҙәтеүҙе талап итә. Дизайнерҙар был йүнәлешкә "Аҙ булһа ла, яҡшыраҡ булһын" тигәндән сығып мөрәжәғәт иткән. Минимализм - ул төшөнкөлөк түгел, ә үҙенде тәртиптә тотоу, төҫһөҙлөк түгел, ә таҙалыҡ, үҙенсәлекһеҙлек түгел, ә тыйнаҡлыҡ, ябайлыҡ түгел, ә ябайлаштырыу. Яңы минимализм ҡәтғи һәм ҡаты түгел. Ул кейергә әйбер булмағанлыҡтан да түгел, киреһенсә, артыҡ биҙәнеү ялҡытыуҙан килә. Быйылғы модаға ҡарата бер нисә ҡағиҙә.**

■ Минималлек ниндәй ҙә булһа деталдәрҙе инҡар итмәй. Әммә улар сама менән ҡулланылырға тейеш.

■ Аҡ, ҡара, һоро, тән төҫтәре һәм уларҙың ярашыуы. Мәҫәлән, аҡ костюм һәм какао төҫөндәге күлдәк.

■ Ыҡсым кәүҙә һынын булдырыу. Һылашып торманған, әммә билде күрһәтеүсе, йә булмаһа артыҡ ҙур булмаған мул кейем. Киң йурындарҙан, осло мөйөштәрҙән ҡотолорға кәрәк. Тәбиғилеккә ынтылыу мөһим.

■ Ябай туҡымалар ҡулланыу һәм иң мөһиме - артыҡ арзан менән мауыҡмау. Былар - киндер, кизе-мамыҡ, йоҡа күн, ебәк, тығыҙландырылған клоке. Ялтыр туҡымалар бөтөнләй аҙ ғына булырға тейеш.

Аяҡ кейемен һәм биҙәүес әйберҙәрен зауығыңа тура килтереп һайла, тик түбәндәге кәңәштәрҙе иҫеңдә тот:

■ Итектәрҙе колготки төҫөндә кейеү модала. Шулай иткәндә, аяҡтар оҙонораҡ, ә буй-һын һомғол күренәсәк. Әйткәндәй, хәҙер итектәрҙе йәйгеһен дә кейәләр.

■ Сыбар сумка йәки аяҡ кейеме һәр ваҡыт бер төҫтәге күлдәккә тап килә, һәм - киреһенсә.

■ Көмөштә алтын менән бергә тағырға ярамай, ә бына бижутерияны ҡиммәтле металдар менән был миҙгелдә бергә йөрөтөргә мөмкин.

■ Сумканы аяҡ кейемөнә тап килтереп һайлау - модаһыҙлыҡ билдәһе. Аяҡ кейеме менән сумка бындай төҫ башҡа кейем өлөштәрендә (ҡайыш, шарф, блузка) ҡуҙәтелгәндә генә бер төҫтә була ала. Бер төҫтәге аяҡ кейемөнә сыбар сумка һайлау миҙгел хиты булып тора. Иң мөһиме - сумкалағы ниндәй ҙә булһа төҫ аяҡ кейеме төҫөнә тап килергә тейеш.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Битеңә тәнең төҫөндәге тон биреүсе крем һөрт, керпектәреңә тушь һал һәм асыҡ-алһыу төҫкә иренеңде буя. Тәбиғи төҫтәге ебәк күлдәк һәм кизе-мамыҡтан тренч йәки биле өҫтә булған салбар, футболка һәм пинжәк кей. Аяғыңа сандалийҙар эләктер һәм асыҡ күндән тегелгән классик сумка тот. Сәстәреңде тағат. Һәм яңы яҙға табан ҡыйыу аҙымдар менән атла. Әйҙә, минимализм һинең образыңда ғына батшалыҡ итһен. Ыңғай хис-тойғолар һәм яңы тәьсораттар күп булырға тейеш.**

**Дизайнерҙар беҙҙе кейем алмаштырырға ғына түгел, ә күктән ергә төшөргә саҡыра. Төргәнгә түгел, уның эсендәгенә иғтибар итеү мөһим. Дуҫтарың менән йышыраҡ һәм смс, аська һәм скайп ярҙамынан тыш аралаш. Өй ашына өҫтөнлөк бир һәм иғтибарыңды күберәк балаларға бүл.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ!

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ БАҺАҺЫНЫҢ...

## халыҡ-ара кимәлдә тағы бер раҫланыуы

**Күптән түгел Сибай ҡалаһы мәҙәниәтенең йөҙөк ҡашы, "Гөлдәр" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре балалар ансамбле Ҡабарҙы- Балҡар республикаһында үткән "Алтын Майҙан Эльбрус" халыҡ-ара этнофестивалендә ҡатнашып, ҙур еңеү яулап ҡайтты. Бәйге бик көсөргәнешле барҙы, хатта баһалама ағзалары үҙҙәре лә ҡыйын хәлдә ҡалды, сөнки улар ҡуйған балл буйынса бер юлы өс коллектив: Украинанан килгән "Акварель" балалар бейеү ансамбле, Ҡырғыҙстандан "Жащ ҡыял" бейеү ансамбле һәм Башҡортостандан "Гөлдәр" ансамбле Гран-приға дәғүә итте. Шуға күрә был коллективтарҙың өсәүһенә лә беренсе урын бирелде. Бынан тыш, "Гөлдәр"ҙәргә Ҡайсын Кулиев исемендәге махсус приз - "Бейеү ижадының иң юғары поэзияһы" призы ла тапшырылды.**

"Гөлдәр" ансамбле Й. Бикбирҙин ҡуйған "Ҡара юрға", Р. Ғәбитовтың "Крәкәүәк", С. Аҫҡарованың "Ҡурай" бейеүҙәре менән таң ҡалдырырлыҡ композиция күрһәтте. Һәр бейеү башҡортса риүәйәте, тарихы менән оҙатыла барҙы. Баһалама комиссияһының рәйесе Болгарияның атҡаҙанған артисы Бисер Киров: "Бейеүегеҙ бөйөк моңға, дәртле көйгә һалынған, унда боронғо халыҡтың холоҡ-фиғеле, рухы сағыла" - тип, беҙҙең бейеүҙәргә һоҡланыуын белдерҙе. Ҡабарҙы-Балҡар республикаһының, балҡар халҡының данлыҡлы хореографы, Фәйзи Ғәскәровтың ижадташы, үҙ халҡының бейеүҙәрен сәхнәләштереүгә нигеҙ һалған Мөхтәр Кудаев та юғары баһа бирҙе беҙҙең балаларҙың сығышына. "Башҡортостан вәкилдәре феноменаль әҙерлек менән килгән. Уларҙың бейеү оҫталығы, бейеүҙәрҙең ҡуйылыуы юғары профессиональ кимәлдә", - тине ул. "Гөлдәр"ҙәрҙең сығышына ҡарата ул тағы шулай тине: "Хайуандар, үҫемлектәр донъяһын һүрәтләгән бейеүҙәр - улар бик борондан килгән йола, был йола тик башҡорттарҙа ғына һаҡланып ҡалған. "Гөлдәр" ансамбле бейеүселәре ошо йоланы юғары кимәлдә һынландырып күрһәтте лә инде. Башҡа халыҡтарҙа ла ошондай йола бейеүҙәрен тергеҙергә кәрәк". Мөхтәр Чукаевич Фәйзи Ғәскәров тураһындағы хәтирәләре менән дә уртаҡлашты һәм уның яҡты иҫтәлегенә арнап, "Гөлдәр"ҙәргә "Эльбрус" тигән бейеү ҡуйҙы. Мөхтәр Кудаевты ғәжәпләндергәне, һоҡландырғаны тағы шул булды: ул ҡуйған бейеүҙе "Гөлдәр"ҙәр сәғәт ярым эсендә өйрәнеп тә алды.

Бәйгелә яңғыҙ бейеүселәр араһынан "Гөлдәр" ансамбленән Элина Яхина, Миләүшә Мәтинова, шулай уҡ Өфөнән Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәфис Иҙрисов 1-се урынға лайыҡ булдылар. "Гөлдәр" ансамбленән яңғыҙ бейеүселәр Нәйлә Әхмәтшина - 2-се, Айнур Ишмөхәмәтов 3-сө урынды яуланы. Дуэт бейеүҙәре араһында ла "Гөлдәр" ансамбле бейеүселәре Элина Яхина менән Тимур Мортазинға етеүселәр булманы. Улар "Күгәрсендәр", "Бүләк" бейеүҙәрен бик юғары кимәлдә башҡарып, 1-се урын яуланы.

Төркиәнең фольклористика институты ғалимдары һәм баһалама комиссияһы ағзалары 60 илдән килгән көнкүреш һәм декоратив сәнғәт өлгөләре күргәҙмәләренә айырым иғтибар бирҙе. "Гөлдәр" ансамбле күргәҙмәһе башҡорт тирмәһен һынландырҙы. Унда башҡорт милли кейемдәре, ҡорама түшәктәр, балалар үҙҙәре яһаған әйберҙәр, һунар һәм яу ҡоралдары, башҡа көнкүреш әйберҙәре ҡуйылғайны. Шунда уҡ башҡорт милли ризыҡтарынан баһалама комиссияһы ағзалары ғына түгел, килгән кешеләрҙең барыһы ла ауыҙ итеп ҡараны. Башҡорт ҡымыҙына еткән ҡымыҙ, башҡорт ҡаҙыһынан да яҡшыраҡ ризыҡ, башҡорт балынан да тәмле һәм шифалы бал юҡлығына барыһы ла инанды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Гөлдәр" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре балалар ансамбле халыҡ-ара кимәлдәге был сарала барыһын да хайран итеп, башҡорт бейеүҙәренең балҡышына оло баһа, Башҡортостаныбыҙ данына дан өҫтәп ҡайтты. Фестиваль президенты Мостафа Кавасоглу уларға Төркиәлә үткәреләсәк Халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашыу өсөн сертификат тапшырҙы. Афариндар!**

**Асия ҒӘЙНУЛЛИНА.**




АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҮҘЕН ЮҒАРЫ ҺАНАҒАН - түбән кеше

Байлығы булып та уны башҡалар менән бүлешмәгәндәр һәм үҙе өсөн тотонмағандар бай түгел - сит баҫыуҙы һаҡлаған ҡараҫҡының да үҙенең байлығы юҡ бит.

**(Һинд мәҡәле).**

Үҙен юғары һанаған - түбән кеше, Үҙен түбән һанаған - аҡыллы кеше.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша йәшәгән. Уны ғүмере буйы өс һорау борсоған: иң мөһим ваҡыт ҡайһыһы, иң төп кеше кем, иң мөһим эш нимә? "Әгәр ҙә ошо өс һорауҙың яуабын белһәм, бөтә донъяны буйһондорор инем, мин теләгәндәрҙең барыһы ла тормошҡа ашыр, халыҡ мине иң ҙур аҡыл эйәһенә тиңләр ине", - тип уйлаған батша. Был һорауҙарына яуап эҙләп, ул әллә күпме ғалимдар, аҡыл эйәләре, аҡһаҡалдар менән һөйләшкән, ләкин уларҙың береһе лә уны ҡәнәғәтләндерерлек яуап бирә алмаған. Берҙән-бер көндө батшаға ҡайҙалыр бик аҡыллы ҡарт йәшәүе тураһындағы хәбәр килеп еткән. Ул атҡа атланған да, ҡартты эҙләп, юлға сыҡҡан. Йөрөй торғас, бер ауылға барып сыҡҡан, баяғы ҡарттың өйөн эҙләп тапҡан. Ҡарт баҡсаһында ер ҡаҙып йөрөгән, ти. Батша атынан төшөп, ҡарт эргәһенә килеп сәләм биргән һәм былай тигән: "Мин һинән өс һорауыма яуап алырға теләйем. Иң мөһим ваҡыт ҡайһыһы, иң төп кеше кем, иң төп эш нимә?" Ҡарт уны өндәшмәй генә тыңлаған, үҙе көрәген ҡулынан ыҫҡындырмай, ер ҡаҙыуын дауам иткән. "Һин, моғайын, арығанһыңдыр, - тигән батша ҡартҡа. - Әйҙә, мин һиңә ярҙам итәйем". Шулай тигән дә, ҡарттың көрәген алып, батша ер ҡаҙый башлаған. Бына бер саҡ улар эргәһенән бите яраланған, ҡанға буялған бер кеше үтеп бара икән. Батша уны туҡтатҡан да, хәлен һорашҡан, йылғаға барып һыу алып килеп, яраларын йыуып бәйләгән, һыу эсергән, шунан уны күрше ауылдағы үҙе туҡтаясаҡ бер йортҡа алып барып, йоҡлар урын биргән.**

**Икенсе көндө иртән батша тағы ла баяғы ҡарт янына килгән һәм: "Изгелекле ҡарт, һин дә минең һорауҙарыма яуап бирмәҫһеңме икән инде?" - тип һораған. "Һин үҙ һорауҙарыңа үҙең яуап бирҙең инде", - тигән ҡарт. "Нисек инде?" - тип аптыраған батша. "Һин минең ҡарт һәм хәлһеҙ икәнемде күргәс, ярҙамға ташландың - көрәгемде алып, ер ҡаҙыған мәлең - иң мөһим ваҡытың булды. Шул ваҡытта иң төп кешең - мин инем, ә һинең ярҙамың - иң төп эшең булды. Бына яралы кеше килде - ул һинең өсөн иң төп кешегә әүерелде, уға ярҙамың - һинең төп эшең ине. Хәтереңдә тот: иң төп ваҡыт - ул бөгөн, иң төп кеше - бөгөн эргәңдә булғаны, ә иң төп эшең - ошо эргәңдә булған кешегә изгелек эшләү".**

ИҒЛАН

**Башҡорт телендә балаларҙың тыуған көн байрамын үткәрәбеҙ. Әкиәт геройҙары, милли уйындар һәм бүләктәр һеҙгә бик оҡшаясаҡ. Тел.: 8-937-33-55-235, 8-937-30-50-421**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6167
Заказ 1682